✓ ***Мосолман үҙ вәғәҙәһенә тоғро. Вәғәҙә биргәнһең икән, үтәргә кәрәк, сөнки вәғәҙә яуаплылык менән бәйле. Һүҙ биреп тә үтәмәү Аллаһы Тәғәләнең нәфрәтен тыуҙыра, Ул мосолмандарының быңдай түбәнселеккә төшөүен теләмәй. Хәҙистәрҙең береһендә: "Ике йөҙлә кеше өс билдә менән айырыла: нимәлер һөйләй икән - алдай, вәғәҙә бирһә - уны боҙа, әгәр уға нимәлер ышанып тапшырһалар - мәкерлек эшләй", - тиелә.***

***ХӘҘИСТӘРҘӘН.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға — Һатыуҙа хаҡы ирекле

**8 - 14 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2007 ЙЫЛ**

№36 (246)

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

**Ябай кешенең... ҡатмарлы фекерҙәре**

**балыҡсы ла тигән изге шөғөл**



**2**

**Күкрәк һөтө сере**



**7**

**Балаға белем бирмә,**

**ә белем алыу юлын күрһәт**





**8-9**

**Быуаттарға тиңдәш Туғажмандай,**

**оҙон ғүмерле бул, ҡурайым**



**16**

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

**14-15**

*Беҙҙең менән был тауға менергә бер башҡорт та ризалашманы. Улар был тауға менер алдынан доға ҡылып, нәҙер әйтеп кенә меңәләр икән. Былай ғына менеүҙе улар ҙур гонаһҡа һанай. Башҡорттарҙың тәбиғәткә шул тиклем яҡын тороуы, уны һаҡлауҙарына һоҡланырлыҡ.*

*Иван ЛЕПЕХИН.*

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# "ХӘҠИҠӘТТЕ ҠАҘЫП СЫҒАРҘЫҠ..."

## Хәҡиҡәтте хәҙер Мәскәүҙең абруйлы ғалимдары ла раҫлай



**Беҙ Өфө-II ҡаласығында алып барылған археологик ҡаҙыныуҙар тураһында яҙып сыҡҡайнык инде. Күптән түгел Рәсәй кимәлендәге абруйлы эксперт советы был ҡаласыҡты "Иң уникаль археологик ҡомартҡы" тип баһаланы.**

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһына Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институты директоры, тарих фәндәре докторы Н. МАКАРОВтан ошондай йөкмәткеле хат килде:**

"Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының саҡырыуы буйынса Рәсәй Фәндәр академияһының а р х е о л о г и я институты хеҙмәткәрҙәре, тарих фәндәре докторҙары И. Л. Ҡыҙласов, Ш. Н. Әмиров, тарих фәндәре кандидаты И. А. Сапрыкина Өфө ҡалаһының Кировподагы районында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығы торошон һәм уны фәнни яҡтан өйрәнеү перспективаларын тикшереү өсөн Эксперт советы йыйылышында ҡатнашты.

Өфө ҡалаһының Пушкин һәм Воровский урамдары киҫелешендә урынлашҡан боронғо Өфө-II ҡаласығы хаҡында Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты ошоларҙы хәбәр итә:

1. 2006-2007 йылдарҙа боронғо ҡала урынлашҡан территорияның киңъяк майҙанында алып барылған археологик ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә табылған мәҙәни ҡатлам фән тарафынан етди өйрәнеүгә талап итә. Мәҙәни ҡатламдың 4 метрға етеүе уны Көнсығыш Европала булған башҡа ҡомартҡыларҙан айырып тора. Кешенең был территорияла даими йәшәүе мәҙәни ҡатламдарҙың эҙмә-эҙлекле урынлашыуы менән иҫбатлана (беҙҙең эраға тиклем I-II быуаттар). Боронғо ҡаланың һаҡланып ҡалған стратиграфияһы хронологик этаптарҙы, ҡаласыҡтағы йорттарҙың планын, оборона системаһын теп-теүәл итеп билдәләргә мөмкинселек бирә.

2. 2007 йылда алып барылған археологик ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә табылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына инә. Боронғо ҡаланың оборона стеналары ҡомартҡының төүгө көндәренән үк алдан аҙерләнгән проект буйынса төҙөлгән һәм бында ҡасандыр үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булғанлығын дәлилләй. Стена төҙөүҙә ҡулланылған балсыҡ массаларынан тыш, ағас конструкциялар ҙа яҡшы һаҡланған һәм улар архитектур төҙөү деталдәрен дөрөҫ күҙалларға ярҙам итә.

3. Ҡаҙыныу эштәре ваҡытында табылған археологик к о л л е к ц и я л а төҫлө, ҡиммәтле, төҫлө һәм ҡара металдан яһалған әйберҙәр, һөйәктәр, быяла, аҫыл таштар, балсыҡ әйберҙәр бар. Беҙҙең эраның IV быуатынан алып XV быуатҡа тиклем йәшәгән Урал-Волга буйы төбәге халҡы өсөн хас булған һауыт-һаба менән бер рәттән, Урта Азия, Кавказ һәм башҡа яҡтарҙың һауыт-һабаһы өлгөләре лә табылған. Быяла һәм ярымҡиммәтле таштарҙан яһалған әйберҙәр Византия һәм Прибалтика территорияларына менән булған бәйләнештәр тураһында һөйләй. Иртә һәм үҫешкән Урта быуаттарға ҡараған бик күп алтын, көмөш ювелир әйберҙәр һәм кейем деталдәре (алҡалар, ҡайыш биҙәүестәре), шулай уҡ Алтын Урҙа, иртә Византия ваҡытына ҡараған тимер аҡсалар табылған. Ҡалала алтын менән эш итеү буйынса махсуслашҡан ювелир эшмәкәрлек үҫешкән булған. Һөйәктән төрлө әйберҙәр эшләү ҙә бик киң таралған күренештәрҙең береһе һаналған.

Өфө-II боронғо ҡаласығы ҡәберлек менән берҙәм археологик комплексты тәшкил итә.

Шулай итеп, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты беҙҙең эраның IV-XV/XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығы фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтен билдәләй. Өфө-II ҡаласығы быуаттар буйына йәшәп килгән ҙур административ, сауҙа үҙәктәренең һәм Урал-Волга буйы тарихының әһәмиәтле пункттарының береһе һанала. Мәҙәни ҡатламдың һәм органик материалдың яҡшы һаҡланыуы Урта быуаттарға ҡараған урындағы тарихи процесты яҡшы күҙалларға мөмкинлек бирә.

Боронғо ҡаласыҡтың фәнни әһәмиәте шунда: ул Башҡортостандың һәм Көньяҡ Уралдың яҙма тарихҡа тиклемге иң ҡиммәтле тарихи сығанаҡтары иҫәбенә инә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламын ныҡлы һәм комплекслы өйрәнеү Өфө-II ҡаласығын Рәсәй археологияһы фәненең эталонлы объектына әүерелдерәсәк, тип иҫәпләргә бөтөн нигеҙ бар.

**(Аҙағы 5-се биттә).**

**УЙЛЫҒА - УЙ!**

**Дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен уҡытыу өсөн, минеңсә, тик алдынғы, ҙур тәжрибәле уҡытыусыларҙы ғына йәлеп итергә кәрәк ине. Ғәмәлдә иһә, күп урындарҙа башҡорт телен тел белгәне лә, белмәгәне лә эш урыны булған өсөн генә эшләп йөрөй. Дәүләт телен бойомға ашырыу эшнеҙҙәрҙе эшкә урынлаштырыу мәсьәләһен хәл итеү өсөн хеҙмәт итергә тейеш түгел. Күп кенә уҡытыусылар хатта класс журналына башҡортса яҙа белмәй, тип зарлана методистар. Быңың менән дәүләт теленең әһәмиәтен түбән төшөрәбеҙ. Ҡайһы урындарҙа башҡорт теле уҡытыусылары телдә уҡыусыларына ҡарағанда ла насарыраҡ белә..**

**8-9**-сы биттә уҡы

✓ Ҡыҙҙар кеүек көйәнтәләп һыу ташып йөрөү малай кешегә килешмәй, тип иҫәпләнһә лә, минең кеүек, апай-һеңлеләрең булмаһа, ҡаса-боҫа, көйәнтәһеҙ генә һыу ташырға тура килә.



ҺАБАҠТАР

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҠАТМАРЛЫ ФЕКЕРҘӘРЕ

## Балыҡсы ла тигән изге шөғөл

**Балыҡҡа барыу – малайҙар өсөн йәй көндәрендә өй мәшәҡәттәренән ҡотҡарыуы менән күңелгә иркенлек, рәхәтлек биргән һәм күп мыжыуҙарҙан һуң, теләнселәп тигәндәй яулап алынған ираклектә шөғөлләнер иң һәйбәт, иң өйрәнелгән кәсептәрҙең береһе. Түрбаштан бер телем икмәк сәлдереп кеҫәгә тыға-тыға сығып барғанда, солан башынан ынтылып ҡына йә үҙең генә белгән мөйөш бүрәнәһенә баҫып, кәкре-бөкрө муйыл сыбығынан әтмәләнгән ҡыуалды йәтеш кенә эләктереп алып, йүгереп барышлай, ҡармаҡ, ҡалҡыуыс, батырғыстары үҙ урындарындамы икәнде күҙ йүгертепме, һәрмәпме теүәлләп алаһың да, әсәй: "Ҡайҙа саптың тағы, зимагор, себештәреңде кем ҡарай?" – тип ҡыҫҡырмаҫ борон, эргәләге тыҡрыҡҡа сумаһың. Һорамай ҡасһаң да, әйләнеп ҡарағанда өйөң күренмәһә, намыҫың таҙа: почти рөхсәт алып киткәнгә һанала.**

**Үҙеңде бер ниндәй "ҡыйыш" эш башҡармаған гә-йепһеҙ кеше тип иҫәпләһәң дә була. Ауыҙың йырык, күҙҙәрең баш осондағы зәңгәр күк кеүек таҙа, сафтан-саф, торғаның менән – фәрештәһең инде. Кире өйгә ҡайтып инеүҙе, әсәй күҙҙәренә ҡалайтып ошо күк йөҙөнән дә саф күҙҙәрең менән ҡарауҙы уйлап та бирмәйһең әле. Ҡайтканда ла күҙҙәрең көләс, шат булырҙармы икән? Ай-һа-а-й!**

Алдан килешкән буйынса йә шул йүгереп барышлай, күрше-тирә малайҙар ҡысҡыра:

- Ҡайҙа киттең?
- Балыҡҡа!
- Тороп тор, мин дә барам! - тип, әсәһенең ҡороғонан ысҡынырын белер-белмәҫ, ҡысҡыра ла, ысҡынһа, тас ошоға тиклем мин эш-ләгәндәрҙе ҡабатлап,



арттан саба. Тәғәйен ҡайҙа барып ултырырға, мотлаҡ ниндәй балыҡ ҡармаҡларға һәм күпме тоторға тигән бурыс та, маҡсат та юҡ. Юл ыңғайында үҙәктән, үҙең белгән ерҙән таяғыңды табып, селәү ҡаҙып алаһың да, буш шырпы ҡабына инмәйем, тип, ҡаптың йә теге, йә был тишегенән һуҙылы-ы-ып төшөргә ҡыртлашкан селәүҙәрҙе кире төртҡөләп, ары китәһең.

Етеҙ малайҙар, эшлекле ҡиәфәт менән, электән һәр ҡайһыһына таныш һәм билгеле (ата-олатаһы биләп ҡалдырған ер тиерһең) урындарына барып төбәкләнә. Ул - ятыумы, ҡумырыҡмы, таш башымы - мөһим түгел! Электән ултырып өйрәнгән урын булһа булды. Унда балыҡ бармы, юкмы икәне лә мөһим түгел! Иң мөһиме - үҙ урыныңда мөһим эш атҡарып ултырыуыңды бөтә ҡиәфәтең менән күрһәтеп, йәнең-тәнең менән һиҙеп, ышаныу. Һәр хәрәкәтең теүәл, камил булыуы мөһим! Шул шарттарҙы үтәгәндә генә уңышҡа өлгәшеп була икәнен аңлауың мөһим! Ә, былай, әллә кем һымаҡ шәләй-вәләй генә йөрөһәң, балыҡҡа барам тип ауыҙыңды ла асма, кеше көлдөрөп. Сөнки малайҙарҙың үҙ тиңдәре араһында тотҡан дәрәжәһенә, уның башҡа "һөнәрҙәренә" ҡарағанда, балыҡ ҡармаҡлау оҫталығының тәьҫире хәтәр көслө. Ат тотоп йүгәнләү, менеп сабыу, арбаға егеү, туғарыу, тышаулау - улар малай кеше өсөн ябай, көндәлек өй эштәре лә һәр кемдең, хатта ҡыҙҙарҙың да ҡулынан килә.

Ҡыҙҙар кеүек көйәнтәләп һыу ташып йөрөү малай кешегә килешмәй, тип иҫәпләнһә лә, минең кеүек, апай-һеңлеләрең булмаһа, ҡаса-боҫа, көйәнтәһеҙ генә һыу ташырға тура килә. Көйәнтәһеҙ булғас, ул хәтлем оятҡа һаналмай, сөнки, көслө булһын өсөн ҡулдарҙы сыныҡтырам, тип ауыҙҙарын ябып була ҡайһы бер яуыздарҙың. Эттәр менән булышыу, бесәй баҫтырыу, ҡыйыҡтан һикереү, мунса мүгенән тәмәке төрөп тартыу, урыҫтарҙың кишер, шалҡанын утау, резина итек кейеп кәзә баҫтырыу - егеттәр араһында дәрәжәңә мәрәй өҫтәү генә түгел, ғүмереңә буйы юя алмаҫлыҡ тап төшөрөүе лә ихтимал.

Шуға күрә улары ла йүнле һөнәрҙәргә бик ҙур бәхәстәр аша, танау емереүҙәр аша ғына иҫәпләнеүе бар. Ә инде һин йәшәгән мәлдә бер кем дә, бер сеүәй ҙә тота алмаған сөмбәйҙән елле бәрҙе һөйрәп сығарһа-а-аң..! Бөтәһенең дә күҙен акшайтаһың. Малайҙар ғына түгел, бөтә ауыл һине һөйләп көнләшәсәк. Шунда уҡ дәрәжәң малайҙар алдында 10 мәрәйгә артып китһә, ҡыҙҙар күҙендә хатта 100 мәрәйгә лә иҫәп тота алаһың, ә өлкәндәр һаран, көнләшеүсән булыу сәбәпле, 2-3 мәрәй генә бирерҙәр.

Ярай, былары балыҡ ҡармаҡларға килгән малайҙың хыялдары ғына икән, ти. Әлегә йәтешләп кенә ултырып алайыҡ. Оса аҫты ҡоро булһын өсөн ялпаҡ таш, ерек түмәре йә бер-ике йыуаныраҡ ҡоро-һары ағас ботағы ла ярай. Уңайһыҙ ултырһаң, боттар арып тартыша башлай торған, етмәһә, мөкиббән мауығып китһәң. Ә шунһыҙ булмай! Етди эш бит. Ҡармаҡты ҡыуалдан тағатып, батырғысын ҡарап, ҡалҡыуысын кәрәкле тәрәнлеккә яйлап ҡуйғас, баяғы шырпы ҡабынан бер яп-яланғас селәүҙе осаһынанмы, башынанмы (уны кем белһен) эләктереп алып, бармаҡтар араһына ғына ҡыҫтырып, быҫҡылдатып уртаға өҙәһең дә, йәтешләп тотоп өҙөлгән еренән ҡармаҡҡа буйлатып кейҙерәһең. Өҙөп алынған яртыһы тубыҡты бысратып тулап- борғоланып ята бирә, уның ҡайғыһы юҡ әле, әҙерәк бушағас, кире ҡапҡа һалырбыҙ. Ҡармаҡтың ырғағы селәүҙең теге имен башынамы, осаһынамы барып етергә тейеш, сөнки селәүең ҡармаҡтан һәлберәп торһа, балыҡ шунан ғына тешләп, тартҡылап һыпырып ала йә сәйнәп иҙгеләп бөтһә, ҡармаҡтың осо күренә. Башынан һерәйеп ҡармаҡ осо күренеп торған ҡортто, һимеҙ, ялтыр, матур булһа ла, ниндәй алйот балыҡ ҡапһын. Хәҙер селәүгә тәмләп кенә, иртәнсәк картуфҡа ҡушып ашаған ҡаймаҡлы шайыкты төкөрәһең дә, бер ҡул менән ҡыуалдың осон, икенсеһе менән селәү кейҙерелгән ҡармаҡ эргәһенән генә ептән тотоп, шул арала ятыу өҫтөнән урын һайлап алған ергә һәлмәк кенә төшөрәһең. Әле генә, иң оҫта балыҡсы булып, урынына еткереп атҡарған ғәмәлдәрҙән ҡәнәғәтләнеү, алдағы табыш кисерештәренән ләззәт көтөп, ике күҙең менән ҡалҡыуысҡа бағып шым булаһың. Шул арала иптәштәр ҙә, башҡа мәшәҡәттәр ҙә, бөтә донъя онотолған. Ярҙа - һин, һыу өҫтөндә - ҡалҡыуыс, һыуҙа - бәрҙе! Донъяла һинең өсөн шуларҙан башҡа бер нәмә лә юҡ! Һыуҙа - бәрҙе! Фәҡәт - бәрҙе! Башҡа балыҡтар: ташбаш, сабаҡ, ҡыҙылғанат, ҡарағойроҡ, хатта, шамбы ла ҡыҙыҡтырмай беҙҙе. Тоткас, бәрҙе тотаһың. Ҡалғандарын, ана, ыуаҡ-төйәк, балыҡ тота белмәгән, малай-шалай ҡармаҡлаһын. Уларға ярай ул.

Ә мин бәрҙегә килдем! Йылға буйына килеп төшкәс тә, тиҙерәк һыуға тиҙерәк ҡармаҡ ташлау яйын ҡарайһың. Бәлки, һиңә тигән сүместәй бәрҙе фәҡәт ошо мәлдә, фәҡәт ошо ятыуҙа, фәҡәт һине көтөп яталыр. Һуңлаһаң - бөттөң. Ҡойороғон да күрә алмаҫһың. Шуға ла, һәр балыҡсы йәһәтләп йүнәтеп, ҡармағын һыуға ташлай һала ла, әҙерәк еңшәйеп тексәйеп, баяғы хыялын тикшереп ҡарай. Тиҙ һәм еңел бәхеткә ирешеүеңә өмөтө өҙөлөп, ҡәҙимге оса, аяҡтары ойой башлағас ҡына тороп, яр башынан сиңерткә эҙләргә керешә. Дөрөҫөн генә әйткәндә, хәйлә инде ул, йәнәһе, ас балыҡ, һин килгәндә генә көтөп ята ла, имеш, һинең бысраҡ селәүеңде көтөп ята. Ятмаһа ярар ине! Балыҡ көтөп тә ятмай (үҙ эштәре менән йөрөй микән?), ас та түгел, селәүеңә иҫе лә китмәй. Һыу таҙа саҡта күҙәтһәң, йыуан, һимеҙ (беренсе сорт!) селәү моронон ҡытыҡлап торһа ла, күҙҙәрен селт тә итмәй, миңә барыбер тигән кеүек ҡойроғон болғап, тик ята. Шул тиклем туйған микән, әллә һуҡыр микән? Ҡапһа була инде йән көйөгө! Шундай йомшаҡ, матур селәүҙән баш тарткас, хәҙер йәшел-мәшел, сатайботай, кәкере-бөкөрө, ҡоро һөйәк сиңерткә тотоп алып киләм. Әллә ниңә сиңерткә яраталар, нимәһе менән тәмле икән, аптыраҡ (Ғәжәп, йәнәһе)! Ҡыйлыҡ, емтек араһында йөрөгән йөнтәҫ, һөмһеҙ, һытһаң, эсенән әллә нәмәләре ҡойолоп торған, күҙҙәре аҡайған күгәүендә лә яраталарсы, ғәжәп! Уларҙың эсендә әллә бәрҙегә генә тәмле шәрбәт йә витамин бармы икән? Булһа ла, ул шәрбәт менән витаминды ҡайҙан белһен? Ҡуй, ул тиклем ғәләмәт уйҙарға бирелеп китмә әле. Ана, бар, йүгер сиңерткә артынан, юғиһә, малайҙар тота башларҙар ҙа, мәшәүлегеңдән күҙеңде лә астырмай көлөрҙәр...

**Урал МОСТАФИН.**

**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов 60-лап хеҙмәт алдынғыһына дәүләт наградалары тапшырҙы.

✓Бәләбәй башҡорт гимназияһы директоры Р. Ишмөхәмәтов Бөтә Рәсәй күләмендәге "Иң яҡшы мәғариф учреждениеһы директоры" конкурсында еңеп сыҡты. Директорҙы Башҡортостан Республикаһы Президенты оло еңеүе менән ҡотланы.

✓БР Хөкүмәтенең бәлиғ булмағандарҙың эше һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комиссияһы ултырышында хәрби-патриотик клубтарҙың эшмәкәрлеге һәм республика предприятиеларында һәм учреждениеларында эш урындарын квоталау буйынса эште ойоштороу мәсьәләләре ҡаралды. Ултырышты БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев алып барҙы.

✓Рәсәйҙә һайлау кампанияһы рәсми рәүештә старт алды - Рәсәй Президентының Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙы билдәләү тураһында Указы сыҡты. Һайлауҙар быйыл 2 декабрҙә үтәсәк. Унда 15 партия ҡатнашасаҡ. Күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, 7 процент тауыш йыйыу ышанысы әлегә "Берҙәм Рәсәй", КПРФ, "Ғәҙел Рәсәй" һәм ЛДПР-ҙа ғына.

✓24 августан 2 сентябргә тиклем Санкт-Петербургта үткән халыҡ-ара "Агрорусь" күргәҙмә-йәрминкәһендә "Башкорт балы" төбәк производство үҙәге алтын миҙал яуланы.

✓"Башинформсвязь" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, бөгөн республикала 2432 мәктәп Интернетҡа тоташтырылған. Был маҡсатта "Башинформсвязь" 350 миллион һум үҙ аҡсаһын тотонған һәм эш күләмен ваҡытынан алда - 17 сентябрҙә үк башҡарып сыҡҡан.

✓Сибай депутаттары былтыр Башҡортостанда беренселәрҙән булып һүгенеүселәргә ҡаршы көрәш башлағайны. Быны улар тағы ла яңы инициатива күрһәтте: был юлы улар бюрократтар һәм чиновниктар менән көрәшергә ҡарар итте. Сибай ҡала хакимиәтендә хәҙер йәмәғәт ҡабул итеүе эшләй башланы. Унда теге йәки был чиновник, предприятие етәксеһе һәм начальнигы адресына ялыу менән мөрәжәғәт итеп була. Тәнҡитләнгән етәксе ҡала хакимиәтендә бығаса тиклем ишетергә лә теләмәгән мәсьәләләр буйынса граждандарҙы ҡабул итеү ойоштора.

✔ *Ул «китапты» энтекләберәк, юлдар араһынан уҡыһаң, шуны күрергә мөмкин - илдә барған төбәктәрҙе берләштереү процесы Башҡортостанға ла етеп килә.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ГЕРОСТРАТ СИНДРОМЫ,

## йәки Баймаҡтағы сиркәүҙе үртәү кемгә кәрәк булды?

**Герострат (тыуған һәм вафат булған йылдары билдәһеҙ)– Эфес ҡалаһы кешеһе. Милләте буйынса – грек. Исемен мәңгеләштерер өсөн беҙҙең эраға тиклем 356 йылда Артемида Эфесская ҡорамына (донъялағы 7 мөғжизәнең береһе иҫәпләнгән) ут төртә. Риүәйәттәргә ҡарағанда, ҡорам Александр Македонский (Искәндәр) тыуған төндә яндырыла. Иония ҡалалары халҡының берҙәм ҡарары буйынса, Геростраттың исеме мәңгелеккә онотолоуға дусар ителә. Әммә боронғо грек тарихсыһы Феопомп (беҙҙең эраға тиклем 4 быуатта йәшәгән) Геростраттың был боҙоҡлоғо хаҡында яҙып сыға. Бөгөн, Герострат, тип, дан һөйөүселәргә, теләһә ниндәй юл менән исем яуларға ынтылған кешеләргә әйтәләр. (Ҙур Совет энциклопедияһынан).**

**Ошо мәҡәлә менән Баймаҡтағы янғын уңайы менән ойошторолған тикшереү эшенә ниндәйҙер ыңғай йәки кире йоғонто яһарға уйым да, теләгем дә юҡ. Бар маҡсатым – ошо янғын яҡтыһында асыҡыраҡ сағылған ҡайһы бер ижтимағи-сәйәси процестарҙы хәлдән килгәнсә асып һалыу.**

Ысынлап та, үртәгәндәрме ул аҙаплы сиркәүҙе? Әгәр үртәгәндәр икән, кемдең ҡулы күтәрелгән Алла йортона? Уға бит барыбер, кем һин - урыҫмы, татармы, әллә башҡортмо, христианмы, католикмы, әллә мосолманмы? Алла йорто бөтә диниҙәр өсөн бер үк бит. Исемдәре генә төрлөсә лә, биҙәлештәре айырыла. Унда кеше фани донъяла бик нык әҙләп тә таба алмаған һорауҙары менән бара, кәңәш итеп бара, өмөт итеп бара, күңел, йән тыныслығы эҙләй. Дөйөм алғанда, кеше алдында ҡайһы аллаға табыныу тигән һорау тормай, шикелле. Улар бит, Христосмы, Мөхәммәтме, әллә Буддамы, Юғары аңдың Ерҙәге һынлыштары ғына. Китаптары ла, төрлө телдә яҙылған булһа ла, бер үк нәмә хаҡында һөйләй һәм бер үк нәмәләргә өндәй - үлтермә, кешенекенә ҡаҡыма, күршенекенә күҙеңде һалма, гонаһҡа батма, урлама, уйнаш ҡылма...

Һис шикһеҙ, эске эштәр органдары, иртәме-һуңмы, ут төртөүсене (йәки ут төртөүселәрҙе) мотлаҡ табасаҡ. Әлегә иһә икенсе бер һорауға яуап эҙләргә кәрәктер - сиркәүҙең ут эсендә ҡалыуы кемгә кәрәк булған, һәм был янғын тирәләй тауыш, хатта шау-шыу күтәреү кемгә файҙалы?

Ғөмүмән, янғындар көн һайын, хатта көнөнә бер нисә тапҡыр булып тора. Уларҙың ҡайһы берҙәре хаҡында (урмандар янһа, йәки янғын һөҙөмтәһендә кешеләр һәләк булһа, йәки янғын ике баш ҡалабыҙҙың береһендә сыҡһа, йәки һөйләрлек башҡа һүҙ булмаһа) яңылыҡтар тапшырыуҙарында хәбәр итәләр, көл-күмергә ҡалған емеректәрҙе күрһәтәләр. Ҡыҙғаныска ҡаршы, бөгөн янғындар тормошобоҙҙоң ғәҙәти бер күренешенә әүерелеп бара. Нисек кенә иҫкәртмәһендәр, тыймаһындар, янамаһындар, ут менән шаярыусылар кәмемәй, эскән килеш түшәктә тәмәке тартыусылар табылып ҡына тора. Бынан тыш, сифатһыҙ электрүткәргестәр, электр ҡоролмалар, боҙоҡ көнкүреш приборҙар янғындар сығыуға сәбәпсе була. Ни эшләргә? Даими рәүештә иҫкәртергә, тикшерергә, абай һәм уяу булырға саҡырырға, янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен теүәл үтәүҙе талап итергә. Шул саҡта янғындар һаны ла кәмейәсәк, утта юҡҡа сыҡҡан биналар һәм йорттар, төрлө матди ҡиммәттәр һәм кеше ҡорбандары ла аҙайәсәк. Бөтәһе лә яҡшы беләбеҙ: ут - яуыз нәмә, иҡтисади йәһәттән кешеләргә лә, дәүләткә лә оло зыян килтерә, шуға ла президенттан алып ябай кешеләргә тиклем һәр бер аҙәм «Уттан һаҡланығыҙ! Янғын сығыуға сәбәпсе булмағыҙ!» тип тәкрарлап ҡына тора. Ут бит берәүҙе лә аямай. Ул кешеләрҙең сәйәси ҡараштарын, динен айырып тормай. Тоҡанып китһә, мәсете лә, синагогаһы ла, сиркәүе лә берҙәй ялпылдап яна ла, көлө күккә оса ла ҡуя. Бер ниндәй Алла ла, компартия ла, демократия ла ярҙам итмәйәсәк.

Үҙем күҙәткәнем бар - янғын сыҡҡан ергә уны һүндереүселәр һәм уларға ярҙам итеүселәр генә түгел, ут менән көрәшеүселәрҙең эшенә ҡарап тамаша ҡылыусылар, шул арала янғын һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән зыянды һанап сығарыусылар һәм шулар араһында ниндәйҙер сәбәп арҡаһында каза күреүселәргә үсәүселәр йыйыла. Ундайҙар күп булмай, әммә табыла. «Шул кәрәк уларға!» тиҙәр, ғәҙәттә, улар. Янғын буштан-буш сыҡмай, тимәк, ниндәйҙер ғәйептәре бар Алла алдында, тип өҫтәп тә ҡуялар. Быны шундайҙар иң ҡурҡыныс ла инде. Янғын барыбер һүндерелә. Әкесенең яуыз һүҙе, үсәүе әле бик оҙаҡ халыҡ араһында йөрөйәсәк. Күңелде уттан да былайыраҡ әрнетеп, йөрәкте ялҡындан да кеслерәк өтеп, йәнде осондан да әсерәк итеп һыҙландырып йөрөйәсәк.

Баймаҡтағы янғын сығарыусыларҙың эҙе (һәм айырыуса, уның осҡондарынан яңы, тағы ла ҡурҡынысыраҡ ут дөрләтергә маташыусы кеҫтәрҙеке) ҡайһылыр осо менән Башҡортостандан алыҫ ятҡан Кавказ тауҙары битләүенә, Ингуш иленә барып сыға. Юҡ, туранан-тура түгел, әлбиттә. Берәү ҙә ул тиклем ерҙән килеп ут һалып йөрөмәй бит инде. Уныһы асыҡ. Эш икенсе бер нәмәлә. Инде бер нисә ай был республикала тыныслыҡ юҡ. Шартлауҙар, атыш-үлтереш, үрт һалыу... Эске эштәр органдары ғына был болғанышты ауыҙлыҡлай алмағас, республикаға хәрби көстәрҙе индерергә мәжбүр булдылар. Билдәһеҙ енәйәтселәр башлыса урыҫ ғаиләләрен утҡа тота, үлтереп китә. Маҡсаттары асыҡ - урыҫ менән ингуштар араһына шина ҡағыу, Чечня һуғышынан һуң күсеп, ә ҡайһы осраҡта ҡасып киткән урыҫ ғаиләләренә республикаға кире ҡайтып төпләнергә мөмкинлек бирмәү. Ә иң мөһиме, республиканың етәкселеген милләтселектә, урыҫтарҙы яҡламауҙа, былай ҙа тере епкә генә ҡоршап ҡуйылған милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе емерергә, юҡҡа сығарырға - бына шул уларҙың теләге. Шуныһы - ингуштарға урыҫтарҙы ҡыуыу түгел, ә нисек тә булһа кире ҡайтарып алыу файҙалыраҡ. Һәм улар быны төрлө юлдар менән тормошҡа ашырырға тырыша. Төрлө программалар әҙерләнә, уларҙы тормошҡа ашырыуға аҡса бүленә, махсус рәүештә күсеп килеүселәр өсөн торлаҡ төҙөлә. Әммә кемгәләр республикалағы именлек оҡшамай. Кемдер уны теләһә ниндәй юлдар менән юҡҡа сығарырға тырыша. Бер юлы федераль үҙәккә республика етәкселегенең булдыҡһыҙлығын, төбәктә тәртип урынлаштырырға әшкинмәгәнлеген күрһәтергә теләй.

Ингушетия сценарийын бөгөн Башҡортостанда ла ҡабатларға теләүселәр юҡ түгел. Республикалағы хәлде, әлбиттә, Ингушетия менән сағыштырып та булмай. Милләттәр араһындағы тыныс мөнәсәбәттәр беҙҙә быуаттар буйына булдырылып килгән. Республикала оло байрамға - уҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуҙың 450 йыллығын билдәләргә әҙерләнә. Нисек кенә булмаһын, дүрт ярым быуат элек ҡабул ителгән ҡарар, дипломатик йәһәттән дә, сәйәси күҙлектән дә бик уңайлы һәм ике яҡ өсөн дә файҙалы булған. Әммә байрамға әҙерлек башланған осорҙа уҡ үҙҙәрен «оппозиция» тип атап йөрөүселәр (уларҙы «әтрәгәләмдәр» һәм «әпкәләйҙәр» тип атау дөрөҫөрәк булыр ине) төрлө яҡлап Башҡортостандың нигеҙен ҡаҡшатырға тотондолар. Ундайҙар менән осрашыу беренсегә түгел инде, республиканың яңы тарихында төрлө «оппозиционерҙар» булды. Әммә уларҙың берәһен дә республика халҡының тормошон яҡшыртыу ҡыҙыҡһындырманы. Бөтәһе лә республиканы ҡулға төшерергә маташты. Үҙҙәре өсөн булһа ярар ҙа ул, улар бит үҙәктәге ҡайһы бер бәндәләр өсөн тырышты.

Был юлы ла шул уҡ хәл ҡабатланырға тора. Әммә әлегә тиклем күберәк татар менән башҡортто талаштырырға теләгәйнеләр. Әле иһә урыҫ менән башҡорт араһына шина ҡағалар. Ҡағыпмы ҡағалар. Аҡсаларын йәлләмәй, «тарихи китаптар» сығаралар. Был һүҙҙәрҙе тырнаҡҡа алыуым аңлашылалыр - ул брошюраларҙың тарихилығы самалы. Ул китаптарҙы Интернетта рекламалайҙар. Ҡазанға барып, презентация үткәрәләр. Аҡ батша менән Килешеү төҙәлмәгән, Башҡортостан тигән территория булмаған, хатта ул саҡта Рәсәй ҙә булмаған, тип иҫбат итәләр. Быныһы тәүге китапта. Икенсеһе иһә Салауат Юлаев хаҡында. Был «тарихсылар» тарихҡа ревизия үткәреп маташа. Улар фекеренсә, Салауат - бур, урыҫтарҙы ҡырыусы, үртәүсе, үлтереүсе. Йәғни, нисек итеп уға һәйкәл ҡуйырға мөмкин? Нисек итеп уның хөрмәтенә байрам үткәрергә була? Улайға китһә, әйтәйек, башҡорт күтәрелештәрен баҫтырыуға, башҡорт ерҙәрен тартып алыуға, халыҡты ҡырыуға «тос өлөш» индергән (йәғни, туранан-тура бойороҡ биргән, указдарға ҡул ҡуйған) ҡайһы бер урыҫ императорҙары иҫтәлегенә Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта ҡуйылған һәйкәлдәр беҙгә оҡшамаһа, ни эшләргә тейешбеҙ икән? Тарихтан соҡоп сығарып, саңын ҡағып, халыҡты ҡаңғыртырлыҡ нәмә күп ул. Урыҫтарҙыҡы ла, беҙҙеке лә, башҡа халыҡтарҙыҡы ла. Урыҫтарҙыҡы хатта күберәктер. Ни тиһәң дә, тотош империяны булдырып, бер нисә быуат буйына тотоп торған милләт бит. Башҡа эш менән шөғөлләнмәй, үткәндәр өсөн иҫәпләшеп тик ултырайыҡмы былай булғас?

Әммә «оппозицияның» сираттағы брошюраһы донъя күргәс, уларҙың стратегик маҡсаттары асыҡтан-асыҡ беленде. Дөрөҫөрәге, уларҙыҡы түгел, ә Мәскәүҙән ултырып, ҡыҙыу күмерҙе сит ҡулдар менән ташларға теләүселәрҙеке. Китап ҡасандыр булған һәм Башҡортостан ойошторолғас, юҡҡа сығарылған Өфө губернаһы хаҡында. Ул «китапты» энтекләберәк, юлдар араһынан уҡыһаң, шуны күрергә мөмкин - илдә барған төбәктәрҙе берләштереү процесы Башҡортостанға ла етеп килә. Был «китап»тың авторы тап ана шуға ишара яһай. Йәғни, тарихи һәм фәнни нигеҙ әҙерләп ҡуя. Мәле килеп еткәс, килтереп сығарырға. Кәрәк урында кәрәк кешеләр алдында әйтергә, йәнәһе, буш урында булдырылмай яңы төбәк, тарихта булған, шул тергеҙелә, тиергә. Бер ыңғайҙан, сәйәси мәрәй туплярға. Ә, кем белә, бәлки яңы регионды етәкләүҙе ышанып тапшырырҙар, юғары урынға күтәреп ултыртырҙар.

**Ә Баймаҡтағы сиркәүҙе үртәү нимәгә кәрәк булды һуң, тип һорарһығыҙ. Ә бына нимә өсөн? Уға кем генә ут төртһә лә, «оппозиция»ға республиканың бөгөнгө етәкселеген урыҫтарҙың милли, христиандарҙың дини мәнфәғәттәрен ҡайғыртмауҙа ғәйепләргә юл асыла. Улар бит һуңғы ун ете йыл эсендә төҙөлгән, тергеҙелгән һәм асылған сиркәүҙәрҙе иҫәпләмәй. Улар ошо ваҡыт эсендә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында янып киткән бер сиркәүҙе күрә. Хатта ошо осор эсендә ситкә күсеп киткән кешеләрҙе иҫәпләп маташа һәм быны урыҫ милләтен ҡыуыу, тип аңлатырға тырыша. Һәм бөтәбеҙҙең күҙенә төртә. Геростраттың данын көҫәүселәр сиркәүгә ут төртмәй бөгөн, улар тотош төбәкте, республиканы утҡа һалмаҡсы.**

Таһир ИШКИНИН.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Республикала өс миллиондан ашыу тонна иген һуғып алынған. Иң ҙур уңыш Саҡмағош, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Ауырғазы райондарында. Республика буйынса уртаса гектар ҡеүәте 24,5 центнер тәшкил итә.

✔ Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә Ҡәҙим Аралбаевтың "Хәтеремдең тере ҡуҙҙары" тигән йыйынтығы донъя күрҙе.

"Ғилем" нәшриәтендә журналист Сәлимйән Бәҙретдиновтың "Башҡорттарҙа ғаилә ҡороу рәүеше" һәм "Бал ҡорто мөғжизәһе" тигән китаптары баҫылып сыҡты.

✔ 4 сентябрҙән 4 октябргә тиклем Башҡортостанда үтәсәк граждандарҙы яҡлау айлығы осоронда һәр кем Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре менән аралашыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Улар халыҡҡа хәүеф тыуғанда үҙеңде нисек тотоу, үҙеңә һәм бер-береңә ярҙам итеү ысулдарын өйрәтәсәк.

✔ Башҡортостан Хөкүмәте 2006 йылда бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уға ярҙам күрһәтеү буйынса эште яҡшы ойоштороусы иң яҡшы райондарҙы билдәләне. Халҡы 100 меңгә тиклем булған район-ҡалалар араһынан Учалы муниципаль районы - беренсе, Дим районы - икенсе, Сибай өсөнсө урын яуланы. "100 меңдән ашыу кеше йәшәүсе" номинацияһында Орджоникидзе районына - беренсе, Стәрлетамаҡҡа - икенсе, Октябрьский ҡалаһына өсөнсө урын бирелде. Муниципаль райондарҙан Шишмә районына - беренсе, Благоварға - икенсе, Бишбүләккә өсөнсө урын бирелде.

✔ Республикала 30 августан 12 сентябргә тиклем "Автобус" иҫкәртеү акцияһы бара. Акция барышында пассажирҙар автотранспорты шоферҙарының 2 меңдән ашыу юл ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтары теркәлгән. Ҡайһы бер автобустар дәүләт техник тикшереүе үтмәйенсә юлға сыға, ҡайһы берҙәре пассажирҙар автотранспортына ҡуйылған талаптарға бөтөнләй яуап бирмәй, водителдәрҙең пассажирҙар ташыу ҡағиҙәләрен үтәмәү осраҡтары ла етерлек.

✔ Башҡортостанда 30 сентябргә тиклем бурһыҡҡа һунар итергә рөхсәт ителде. Һунар исемле лицензияһар йә путевкалар буйынса үткәрелә.

✔ "Һинең турала, Рәсәй" тигән Бөтә Рәсәй балалар һүрәттәре бәйгеһендә Сибай ҡалаһынан Гүзәл Буләкәнова махсус бүләккә лайыҡ булған. Ул 14 сентябрҙә Мәскәүҙә Кремлдең Собор һарайында бүләкләү тантанаһында ҡатнашасаҡ.

**✓ Халыҡ хәтерендә әлегәсә ишетелмәгән йырҙар һаҡланыуы ихтимал. Улар был йырҙарҙың легендаһын яҙып ебәрһен. Хәҙер йәш быуын боронғо йырҙарыбыҙға битараф түгел.**



ШАҢДАУ

# Моң байрамым минең

Кемгә нисектер, БСТ каналында "Хазина" тапшырыуы эфирға сыҡкан көн минең өсөн моң байрамына әүерелә. Ни өсөн тигәндә, йыр-моң хазиналары рухымды нығыта. Халҡымдың ошондай ҙа илаһи йырҙар ижад итеүе ғорурландыра. Тапшырыуҙы алып барыусы Юлай Ғәйнетдинов бер мәл: "Йырҙың һүҙҙәре булмаһа, ул тауыш сығарыу ғына була", тигәнерәк мәғәнәлә әйтеп ҡуйғайны. Ысынлап та, йырҙың тыңлаусыны уйландырырҙай һүҙҙәре булмаһа, ул көй көйләү генә булыр ине. Ә башҡорт халыҡ йырҙарының һәр береһе фәлсәфәүи йөкмәткеле. Уларҙа тарих сағыла. Быуаттар төпкөләнән килгән йырҙарыбыҙҙың тарихын, тулы легендаһын, ҡайһы ерлектә тыуыуын белеү теләге тыуа.

Үткән быуат урталарында "Совет Башҡортостаны" (хәҙерге "Башҡортостан") гәзитендә "Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ" тигән рубрика була торғайны. Унда башҡорт халҡының йыр ижады тураһында мәғлүмәт бирелер ине. Тәкдимем шундай: "Киске Өфө" гәзитендә лә "Боронғо йыр" йәки "Боронғо йырҙың һүҙҙәрен боҙмай йырла" (йыр комарткыларыбыҙҙың һүҙҙәрен боҙоп йырлау осрактары юҡ түгел), тигәнерәк рубрика асһаҡ, ҡалай шәп булыр ине. Юлай Ғәйнетдиновҡа мөрәжәғәт итәйек, бәлки, рубриканы алып барыр. Уға үҙебеҙ ярҙам итәйек. Халыҡ хәтерендә әлегәсә ишетелмәгән йырҙар һаҡланыуы ихтимал. Улар был йырҙарҙың легендаһын яҙып ебәрһен. Хәҙер йәш быуын боронғо йырҙарыбыҙға битараф түгел. Мин, мәҫәлән, халҡыбыҙҙың йыр ижадын тәрәндән өйрәнеүҙең йәштәрҙе үҙ асылына ҡайтырға ярҙам итеренә ышанам.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# Тормош ҡәҙере

Мин тыл ветераны. Үҫмер сағым Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына тура килде. Ир-ат һуғышҡа китеп бөткәс, тылда эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар тураһында матбуғатта әүәлдән күп яҙылды. Ләкин ололар менән бер рәттән колхоз эшендә бил бөккән балалар яҙмышы тураһында мәғлүмәт һаран ғына бирелер ине.

Минең быуын, мәҫәлән, 13-14 йәшлек үҫмерҙәр, әсәй-оләсәйҙәребеҙ менән бергә ҡара таңдан тороп колхоз эшенә йөрөнөк. Аяҡ кейемебеҙ булмауҙан, ҡар яуғанға тиклем ялан аяҡ йөрөп эшләнек. Эш бала иңе күтәрә алмаҫлыҡ ауыр ине. Ашарға юҡ. Шулай ҙа беребеҙ ҙә, асыктым, арыным, тип мыжыманы. Ә бит ағыулы иген ашап, ғаиләләре менән ҡырылып ятып үлеүселәр аҙ булманы. Ҡар әрселә башлау менән тау битләүҙәренән йыуа, әтмәкәй һәм башка ашарға яраклы үләндәрҙе йыйып ашанык. Бала ғына көйө нисек тә астан үлмәҫкә тип, үҙебеҙҙе хәстәрләргә өйрәндек. Йәшәргә тырыштык. Тормош ҡәҙерен белеү, рухыбыҙҙы, ихтыяр көсөн нығытты. Ул йылдарҙа күргән михнәттәрҙе һөйләп тә, яҙып та бөтөрлөк түгел. Илебеҙҙә Бөйөк Еңеүҙе килтереү өсөн ололар менән бер ҡатар бөтөн көсөбеҙҙе һалып эшләнек. Шул замандарҙа иҫән ҡалып, ошо көнгә килеп еткәнемә шөкөр итеп йәшәйем.

Бөгөн тормоштоң һәйбәтләнә барыуына ҡыуанырға кәрәк. Илдәр тыныс булһын. Эшләгән, тырышҡан кешегә бөтә мөмкинлектәр бар. Намыҫлы хеҙмәтең менән тир түк тә - байы. Йәштәр донъя ҡәҙерен белеп, матур ғүмер итергә тырышһын. Ә беҙ, тыл ветерандары, әлеккесә, ныҡ булайык, рухыбыҙҙы һындырмайык. Илгә именлек, халҡыбыҙға сабырлыҡ, бәхет теләйек.

**Гәлиә АЙЫТБАЕВА.**

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАҠЛЫ БУЛДЫҠ

**Өфө ҡала округ Советының сираттағы XXVI ултырышында Өфө ҡалаһының байрағы тураһында ҡарар ҡабул ителде.**

Депутаттар Өфө флагы тураһында ҡарар ҡабул иткәндән һуң, округ Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин: "Байраҡ Өфө ҡала округының рәсми символы һәм халҡының берҙәмлек билдәһе булып тора. Өфө тарихта беренсе тапкыр яңы геральдик символ - байраҡка эйә булды",- тине.

Өфө ҡалаһының байрағы 2:3 ҙурлығындағы тура мөйөшлә полотноны хасил итә. Аҡ һәм йәшел төҫтәрҙән торған ике горизонталь һыҙыҡлы. Дөйөм киңлегенән 7/10 киңлектәге өҫкө аҡ һыҙығында йүгереп барыусы көрән-һоро төҫөндәге кеш һүрәтләнгән.

Байраҡ урындағы идара һәм Өфө ҡала округынан ситтәге рәсми вәкиллек биналары ҡаршыһында даими елберҙәп торасаҡ. Ҡаланың яңы символы шулай уҡ урындағы идара органдарының ултырыштар залына, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының һәм Совет рәйесенең эш кабинеттарына ҡуйыласаҡ.

Байраҡ Дәүләт байрамдары көндәрендә һәм урындағы идара органдары тарафынан уҙғарылған рәсми тантаналар ваҡытында Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт байраҡтары менән бергә торасаҡ.



**Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт байраҡтары менән бергә урынлаштырғанда, Өфө байрағы Рәсәй байрағының уң яғынан урын аласаҡ.**

**Булат ЮЛБАРИСОВ. "Башинформ".**

... ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

# Төртөлә лә тора ошо хата

**Быйыл октябрҙә милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың скульптор Сосланбәк Тавасиев эшләгән данлыҡлы һәйкәле асылыуға 40 йыл тула.**





Ошо йылдар эсендә был монументаль һәйкәлде күреп һоҡланмаған кеше ҡалмағандыр. Ҡыҙғаныска ҡаршы, милли батырыбыҙҙың исемен әле булһа хатаһыҙ ғына, дөрөҫ итеп яҙып, тактаташ ҡуйғаныбыҙ юҡ. Был фотола ул ҡулдан төҙәтелгән. Таштағы яҙыуҙы төҙәтеп була тиме ни? Был хатаны төҙәтергә, йәғни бөтөн донъяға билдәле милли батырыбыҙҙың исеме матур һәм дөрөҫ итеп яҙылған яңы тактаташ ҡуйырға ваҡыттыр һәйкәл эргәһенә. Икенсенән, һәйкәл тактаташына ултырып, һыра эсеүсе тәрбиәһеҙ әҙәмдәргә ҡаршы ла сара күрергә кәрәк ине.

**Әмир АБДРАЗАКОВ, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

ҮӘТ, ӘЙ!

**Сәйәсмәндәргә таянған социнвесторҙар, акционерҙар, аҡса һалыусылар берҙәмләшеп, көстәрен үҙ хоҡуктарын яулауға йүнәлтте.**

# Алданған кешеләр...

## аҡсаһын кире ҡайтарасаҡ

90-сы йылдарҙа "МММ", "Хопер", "Социаль инициатива" кеүек тыштан бик етди конторалар меңәрләгән рәсәйҙәрҙе "тишек кәмә"гә ултыртты. Фатирһыҙ һәм аҡсаһыҙ ҡалған кешеләр властар алдап алынған аҡсаларын кире ҡайтарыуҙа ярҙам итһен өсөн митингылар, протест белдереүсе акциялар ойоштороҙо, асығыуҙар иглан итте. Алданған кешеләр, ярҙам килеүҙән өмөттәрен өҙөп, йылдам рәүештә сәйәси эшмәкәрлеккә тотондо. "Зыян күргән инвесторҙарға ярҙам итеү ассоциацияһы" ағзаларының Бөтә Рәсәй конференцияһына йыйылыусылар ошо ойошманың президенты булыуын үтенеп, Федерация Советы спикеры Сергей Мироновҡа мөрәжәғәт итәләр.

Улар Мироновты яҡлап, ике миллион ҡултамға йыйырға һүҙ бирә! Сергей Миронов ойошманың президенты булыуҙан баш тартһа ла, алданған кешеләр менән хеҙмәттәшлек итергә әҙерлеген белдерҙе.

- Алданған рәсәйҙәр алдындағы бурыстар - Донъя финанс клубтарының бурыстары менән тиң,- тине ул конференция ағзаларына.- Хөкүмәт улар менән, һис шикһеҙ, иҫәпләшергә тейеш!

Хәҙер төрлө финанс пирамидалары корбандары үҙҙәренең проблемаларын парламент кимәлендә хәл итә ала. Урланған аҡсаларын кире ҡайтарыу ышанысы ла ҙурырак.

**Сергей РЕШЕТОВ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығы байрамына әҙерлек саралары тураһындағы мәғлүмәттәр тыңланды. Мәғлүмәттәр менән хакимиәт башлығы урынбаҫарҙары Владимир Федоров, Рәмил Хәлимов, Миҙхәт Мәмбәтов, Алексей Ощепковтар сығыш яһаны.

☑ Юбилейға әҙерлек барышында ҡала урамдарында, ихаталарҙа төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү эштәре башкарылған һәм улар 25 сентябргә тиклем тамамланырға тейеш. Юбилей объекттары ла ваҡытында файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

☑ Юбилейҙы байрам иткән көндәрҙә Өфөлә үтәсәк мәҙәни сараларҙың төп майҙандары - Дуҫлыҡ монументы һәм Ағиҙел йылғаһы яры буйы, шулай уҡ Ленин исемендәге майҙан буласаҡ. Боҙ һарайында билбаулы көрәш буйында донъя чемпионаты буласаҡ, "Динамо" стадионы асыласаҡ, "Аҡбуҙат" ипподромында ат бәйгеһе уҙасаҡ.

☑ 27-28 сентябрҙә Өфөлә баш ҡалалар һәм эре ҡалалар Халыҡ-ара ассамблеяһының XI сессияһы үтәсәк. Унда Рәсәй һәм БДБ илдәренең иң эре ҡалалары, РФ Президенты Хакимиәте, Федерация Советы, Дәүләт Думаһы, РФ Хөкүмәте, Мәскәү хөкүмәте вәкилдәре ҡатнашасаҡ. Пленар доклад менән Ассамблея президенты, Мәскәү мэры Юрий Лужков сығыш яһаясаҡ.

☑ Октябрҙә Нариман Сабитов исемендәге VII асыҡ музыкант-башкарыусылар конкурсы үтә. Былтырғы конкурста Рәсәй һәм БДБ илдәренән 80 музыкант ҡатнашҡайны. Был конкурстың халыҡ-ара кимәлдәге абруйы тураһында һөйләй.

☑ Баш ҡалала "Башагропродукт" дәүләт унитар предприятиеһы ойошторған ҡусмә аҙыҡ-түлек магазины эшләй башланы.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы ҡарары менән 29 сентябрҙә дөйөм ҡала өмәһе үткәреләсәк. Ә 8 сентябрҙән 8 октябргә тиклем Өфөлә санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса айлыҡ үтә.

☑ Баш ҡала майҙандарына күҙәтеү камералары ҡуйыла башланы. Байрам көндәрендә милиционерҙар бигерәк тә Дуҫлыҡ монументы, Салауат Юлаев һәйкәле һәм Ҡала советы майҙандарын күҙәтеүгә аҫтына аласаҡ. Барлығы 63 видеокамера ҡуйыу планлаштырыла.

✓ ***Был ҡаласыҡтың IV быуаттарҙа уҡ булғанлығы, XIV быуаттарға тиклем йәшәгәнлеге, уның бик эре сәйәси, сауҙа үҙәге булғанлығы тураһында бер шик тә юҡ.***



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# "ХӘҠИҠӘТТЕ ҠАҘЫП СЫҒАРҘЫҠ..."

## Хәҡиҡәтте хәҙер Мәскәүҙең абруйлы ғалимдары ла раҫлай

**(Башы 1-се биттә).**

Шул уҡ ваҡытта Өфө-II ҡаласығы юғары ҡатмарлылыҡ категорияһындағы археологик объекттарҙан һанала һәм археологик ҡаҙыныу эштәрен тиҙ арала ғына тамамлау мөмкинлеге юҡ.

Өҫтәүенә, Өфө-II археологик ҡомартҡыһы үҙенсәлекле юридик статусҡа эйә - ул региональ әһәмиәттәге ҡомартҡы (Башҡортостан Республикаһының Юғары Совет президиумы Указы - 12.05.1992 йыл).

"Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының мәҙәни мираҫ объекттары (тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡылары) тураһында"ғы Федераль законға ярашлы, былдай категориялы объекттар дәүләт тарафынан һаҡланырға тейеш. Археологик объекттар - боронғо заман ҡомартҡылары, улар дәүләт милке һанала һәм милли фондты тәшкил итә.

Алда әйтеп үтелгәндәрҙән сығып, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә һәм Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһына ошо мәсьәләләрҙе ҡарарға тәҡдим итә:

1. Археология ҡомартҡыһын - IV-XVI быуаттарға ҡараған Өфө-II ҡаласығын тәҙәлеш һәм башҡа хужалыҡ эштәре территорияһынан сығарыу, шулай уҡ мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау зонаһы проектын эшләү, ҡаласыҡтың һаҡланыуын тәьмин итеү маҡсатында, айырым көйләнеүсе кала төҙәлеше эшмәкәрлеге объекты буларак, мәҙәни мираҫ объекты территорияһы сиктәрен билдәләү.

1. Өфө-II ҡаласығын музей элементтары менән туристик маҡсаттарҙа файҙаланыу өсөн архитектура-терәк проекты планы, ер участкаһының планлаштырыу схемаһын эшләп сығарыу.

2. Археология белгестәренең көсөн Өфө-II ҡаласығын планлы, бөтә яҡлап һәм комплексы өйрәнеүгә йүнәлтеү һәм ҡомартҡы базаһында тәбиғи-фәнни дисциплиналар ҡатнашлығында халыҡ-ара экспедиция ойоштороу.

Заманса ҡаланың үҙәгендә ошондай бик яҡшы һаҡланғанлығы, асыҡ рельефе менән айырылып торған ҡомартҡы булыуы Өфө ҡалаһын Рәсәйҙең иң төп тарихи ҡалалары иҫәбенә индерә".

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# БАШҠОРТ ТИГӘН ҠАЛА БУЛҒАН...

**Әлеге Өфө-II ҡаласығы урынында Башҡорт тигән ҡала булғанлығы ағалы-энеле Пициганолар, Меркатор карталары буйынса ла, Әл-Иҙриси юлъяҙмалары, Петр Рычков кеүек рус тарихсылары, хатта Өфө градоначальнигы Волков яҙмалары аша ла билдәле. Ләкин бөгөн килеп архив кэштәләрендә генә ятмаған, ә яҙма тарихи материалдарҙа ла урын алған хәҡикәтте аяҡ терәп таныуға теләмәйҙәр. "Нисек инде, күсмә тормош алып барған башҡорттоң шундай ҡалаһы булыуы мөмкин?" тип аптырашалар. Әммә, кемдер берәү әйтмешләй, факттар - үҙһүҙле әйбер ул. Уны инкар итеү өсөн хис, тойғо, буш һүҙ генә етмәй. Кире ҡағырлыҡ яҙма материалдар кәрәк. Әммә ундай материалдар юҡ. Хәҙер инде бына хәҡикәтте архивтарҙан түгел, ер аҫтынан ҡаҙып сығарҙылар. Үҙебеҙҙең археологтар раҫлағанға Рәсәй кимәлендәге тарихсы-ғалимдар мисәт һуғып ҡуйҙы. Шундай ғалимдарҙың береһе, билдәле археолог-ғалим Игорь ҠЫЗЛАСОВ менән әңгәмә ҡороу бәхете тейҙе хәбәрсебеҙгә.**

- Археология фәнендә шундай тәртип бар: айырыуса ҡатмарлы археологик материалды өйрәнгәндә бойондороҡһоҙ эксперттарҙы саҡырырға кәрәк. Башҡорт археологтары шулай итте лә. Мәскәүҙән Өфөгә юлға сыҡҡанда, бында шундай уникаль күренештең шаһиты булырмын, тип башыма ла килтермәгәйнем. Башҡорт археологтары бик етди һәм һәр һүҙен үлсәп һөйләүсән, ә мин уларҙың асышы хаҡында ауыҙ тултырып һөйләй алам. Был иң юғары ҡатмарлыҡтағы һәм өйрәнеүе анһат булмаған ҡомартҡы - IV быуат тирәләрендәге бик боронғо ҡала ҡалдыҡтары. Социаль әһәмиәте буйынса былдай ҡомартҡының бөтә Рәсәйҙә, Көньяҡ Уралда ғына түгел, ә Көнсығыш Европала тиңе юҡ. Ҡаласыҡтар табыла тора ул. Ләкин улар Өфө II ҡаласығы кеүек бик оҙаҡ, меңәр йыллап йәшәмәгән. Башҡорт археологтарының бында алып барған ҡаҙыныу һөҙөмтәләре шул тиклем ышандырырлыҡ, был ҡаласыҡтың IV быуаттарҙа уҡ булғанлығы, XIV быуаттарға тиклем йәшәгәнлеге, уның бик эре сәйәси, сауҙа үҙәге булғанлығы тураһында бер шик тә юҡ. Ҡаласыҡта табылған алтын, көмөш әйберҙәрҙең ҡайҙандыр ситтән килтерелгәне, әлбиттә, бында йәшәгән кешеләрҙең әллә ниндәй тарафтар менән сауҙа бәйләнеше тураһында һөйләй. Ләкин ул алтын-көмөш әйберҙәрҙең ошонда, урында етештерелгәндәре лә бар бит - тимәк, бында алтын әйберҙәр етештергән оҫтаханалар булған. Ә ул замандарҙа алтын производствоһы бары тик юғары үҫешкән административ үҙәктәрҙә генә булған.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Көнсығыш Европала тиңе булмаған был ҡаласыҡта табылған археологик материалдарҙы хәҙер ентекләп тикшерергә, һығымталар яһарға кәрәк. Был республикала ғына түгел, ә Рәсәй әһәмиәтендәге ҡомартҡы һәм бында табылған материалдар беҙҙең, Рәсәй тарихсыларының, иртә Урта быуаттар, Урта быуаттар тураһындағы ҡуҙаллауҙарҙы байытасаҡ, тулыландырасаҡ ҡына түгел, ә яңы төҙәтмәләр ҙә индерәсәк, тип уйлайым.**

*ӨС БЫУЫН ФЕКЕРЕ*

# Ғәм алдында үбешмә

**Урамдарҙа, йәмәғәт урындарында ҡосаҡлашыу-үбешеүҙәр хәҙер инде ғәҙәти күренешкә әйләнде. Башта ғәжәпләнеп, аптырап ҡараһаҡ, бөгөн иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Әммә быуындар араһындағы фекерҙәр ҡаршылығы был хахта бәхәстәр тыуҙыра. Төрлө быуын кешеләренең фекере менән ҡыҙыҡһынып, һеҙҙең иғтибарға ла тәҡдим итәбеҙ.**

**Әнүәр ӘМИРОВ, 45 йәш:** Кеше алдында үбешеү-ҡосаҡлашыу - ахырызаман яҡынлауҙың тәүге билдәһе, ти китап. Тәүге аҙым (әлегә үбешеү генә) яһалған, икенсе аҙымды баҫыу ауыр түгел. Бер 20-30 йылдан иң оятһыҙ енси бәйләнештәрҙе лә урам буйҙарында күреүебеҙ мөмкин. Грециялағы янғын, Италиялағы вулкан кеүек тәбиғәт "ярһыуҙары", фажиғәле күренештәр халыҡтың ана шундай оятһыҙ рәүештә шашыныуынан ул. Унда бит ысынлап та йәмәғәтселек алдында иң оятһыҙ, иң бәйһеҙ мөнәсәбәттәрҙе күреү ғәҙәткә әйләнгәйне. Ислам динендә мосолмандарға кеше алдында хатта үҙ ҡатыны (ире) менән үбешеү ҙә оло гонаһ. Никахтары боҙола. Уны яңыртыу, йәғни киренән уҡытыу мотлаҡ. Ә беҙ бөгөн никах уҡытып, туй үткәргән саҡта "Ур-р-ра!" ҡысҡырышып, йәштәрҙе үбештереп ҡыҙығабыҙ. Ысын һөйөү хисе әҙәм балаһына Хоҙай тарафынан бирелә. Урам буйында үбешеп ултырыу - мөхәббәтте демонстрацияларға тырышыу, тигәнде аңлата. Ысын хистең булмауынан улар шулай ҡылана. Кеше алдында, йәғни әллә күпме шаһиттар алдында үбешеп, улар үҙ-үҙҙәренә яратыуҙы иҫбатлап маташа. Икәүҙән-икәү ҡалғанда нисек икән улар? Моғайын, шул тиклем тупаҫ, кеҙе, мөхәббәтһеҙҙәрҙер. Урын булмағандан түгел, оятһыҙлыҡтың, мәғәнәһеҙлектең сигенә сыҡыуҙан шулай ҡыланалар.

**Марсель ВАҺАПОВ, 24 йәш:** Кеше алдында үбешеү түгел, яраткан ҡыҙымды ҡосаҡларға ла ҡыймайым. Атай-әсәйем, туғандарым янында хатта етәкләшмәйбеҙ ҙә. Башҡа дуҫтарым бер кемдән дә оялмайса, үбешәләр, ҡосаҡлашалар. Ә мин улай ҡылана алмайым, нисектер, уңайһыҙ. Бөтән кеше тик беҙгә генә ҡарап торалыр һымаҡ. Бәлки, тәрбиә шулай бирелгәндер. Һөйгәнем илгәҙәгерәк, тәүге мәлдә кеше алдында ла һыйынып-наҙланып ҡына ултырырға ярата ине, тик минең ундай нәмәне үҙһенмәүемде аңлағас, ул да тыйылды. Яратышыу икәүҙән-икәү ҡалғанда ғына азат һәм татлы булырға тейеш. Кеше алдында тартына белмәү, йәғни уларға иғтибар ҙа итмәү - үҙеңде уратып алған тормошҡа ғына түгел, үҙ-үҙеңә лә битараф булыуҙандыр ул.

**ЛИАНА, 17 йәш:** Ниндәй мәғәнәһеҙ һорау! Хәҙер ул хаҡта һорашып тороу үҙе уҡ тормоштан артта ҡалғанлыҡ билдәһе. Минә кешеләрҙең фекере кәрәк түгел, кеше аҡылы менән йәшәр өсөн тыумағанбыҙ. Атай-әсәйемдән башҡа бер кемдең дә аҡыл һатыуын тыңламайым. Һәр кемдең донъяға үҙ ҡарашы һәм үҙ яҙмышы. Тормошто беҙ үҙебеҙ нисек теләйбеҙ, шулай ҡорабыҙ. Мин һәр ваҡыт үҙем ни теләйем, шуны эшләйем. Үбешкем килә икән - үбешәм, килмәй икән - юҡ! Ә эргә-тирәләгеләрҙең ни уйлауы мине ҡыҙыҡһындырмай. Минең өсөн улар бар ни, юҡ ни!

**Шулай итеп...**

**Шунан, йәмәғәт, уйланырға урын бармы? Бар! Уныһын һеҙгә ҡалдырабыҙ. Әммә быуаттар дауамында аҫыл асылы юғалмаған шундай хәҡикәт хәтергә килә: әҙәмде яҡшы йәки яман итеүсе заман да, нәҫел дә түгел - тәрбиәләр. Ҡыйыш ултыртылған ағастың ҡыйыш булып үҫеүенә ғәжәпләнергә түгел инде шулай булғас.**

**Әлфиә ҒАЙСАРОВА яҙып алды.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С

### БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ

**Парфенон**

Грециялағы бөтөн донъяға билдәле Парфенон ҡорамы беҙҙең эраға тиклем V быуатта төҙөлгән. Фарсыларҙы еңеү хөрмәтенә ҡаланың изге урыны Акрополдә һалынған был мөһабәт ҡорам алиһә Афинаға арнала. Грецияның баш ҡалаһы исемен йөрөтөүсе алиһә Афинаны хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалай, тип ышанғандар. Шулай уҡ Эрехтейон, Ареопаг һәм Афина-Ника ҡорамдары ла Акрополдә.

Беҙҙең көндәргәсә һаҡланған Парфенон боронғо грек ҡорамдарының классик өлгөһө булып тора. Архитектураһы бик үҙенсәлекле. Үҙәк өлөшө бөтөн яҡтан да мәрмәр колонналар менән уратып алынған. Боронғо грек төҙөүселәре эстәге колонналарҙың һәр береһе, тыш яҡтағыларынан берәүгә артыҡ булырға тейеш, тип иҫәпләгән һәм оҙонлоғо бүйлап 17, ә арҡырыға 8 колонна ҡүтәргәндәр. Ҡорамдың стеналарын һәм ҡәрниздәрен дә мәрмәрҙән эшләйҙәр. Тик ҡыйығы ғына ағастан эҙерләнә.



Ул әстән икегә бүленә: бәләкәйендә А ф и н а республикаһының дәүләт ҡаҙнаһы һаҡлана, ә ҙурына Алиһә Афина Парфенос (Афина Ҡыҙ) статуяһын урынлаштыралар һәм ҡорамдың исемен Парфенос һүҙенән алалар. Статуяны ул дәүерҙәрҙәге атаҡлы скульптор Фидий эшләй.

Парфенон үҙ ғүмерендә бик күп һынауҙар кисерә. Көслө ер тетрәүҙәре уны өлөшләтә емерһә лә, нигеҙенән юҡ итә алмай. Эске биҙәлешендә төрлө диндәрҙең әҙе ҡала. Ул католик, православие ҡорамы, хатта мосолман мәсете булып та хеҙмәт итә. XVII быуатта осман төрөктәре уны дары складына әүерелдерә һәм ҡаланы венециандар камап алғанда ул шартлай. Тик XIX быуатта ғына ҡорамды өлөшләтә реставрациялайҙар. Реставрация ваҡытында ҡорамдың әсен биҙәгән бик күп скульптураларҙың урланыуы билдәле була. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Акрополдә мәрмәр колонналары ҡояшҡа емелдәп, әллә ҡайҙарҙан күренеп ултырған боронғо төҙәлештәрҙең аҫыл бер ҡомартҡыһы Парфенонды күрер өсөн Грецияға ер шарының бөтөн тарафтарынан туристар ағылыуы туктамай.

✓ *Ябай һыу гигиеник йәһәттән таҙа түгел һәм әле ныҡынып етмәгән организм өсөн зарарлы булыуы мөмкин. Шунлыҡтан, бары тик әсә һөтөндәге һыу ғына бала өсөн файҙалы була ала.*



ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Аллаһы Тәғәлә Ер йөҙөндәге барлыҡ йән эйәләрен туйындырырлыҡ ризыҡ бирә һәм бары тик ул ғына теге йәки был организмға ниндәй аҙыҡ кәрәк икәнлеген белә. Аллаһ Ҡөрьәндә бына нимә тип хәбәр итә: "Әсәләр балаларын ике йәш тулғансы имеҙә. Был - имеҙеүҙе туктатырға теләүселәр өсөн..."("Әл-Баҡара" сүрәһе, 2/233), "Беҙ кешегә ата-әсәһен хөрмәт итергә васыят иттек. Әсәһе уны ҡыйынлыҡтар кисереп, күтәреп йөрөткән. Баланы ике йәше тулғас, күкрәктән айырырға кәрәк" ("Лоҡман" сүрәһе, 31/14).**

# КҮКРӘК ҺӨТӨ СЕРЕ

Аяттағы һүҙҙәрҙе фән дә иҫбат итә. Белеүегеҙсә, баланың төрлө ауырыуҙарға ҡаршы торорлоҡ иммун системаһы ике йәше тулғанға тиклем формалаша. Ике йәшкә тиклем бала әсә һөтөндәге файҙалы матдәләргә мохтажлыҡ кисерә. Табиптар сабыйҙы күкрәк һөтө менән туҡландырырға кәңәш итә. Бигерәк тә сабыйға тәүге айҙарында күкрәк һөтөн имеҙеү зарур. Яһалма балалар аҙығын әсә кешенең күкрәк һөтө булмаған осраҡта ғына ҡулланырға мөмкин. Нимә һуң ул, күкрәк һөтө?

Әсә һөтөндә файҙалы матдәләр, витаминдар, гормондар һаҡлана. Ул иҫ киткес бер үҙенсәлеккә эйә: ваҡыт үткән һәм бала үҫкән һайын, һөт составындағы файҙалы матдәләр ҙә үҙгәрә бара. Шулай уҡ һөт составы баланың ваҡытында йәки унан алдараҡ тыуғанына ҡарап алмашына. Бала иртәрәк тыуҙы икән, тимәк, әсә һөтөндә натрий, хлор, тимер, май проценты күберәк. Әсә һөтө иҫкермәй, ҡулланылған осраҡта һәр ваҡыт кәрәкле температурала була. Һөттәге глюкоза һәм майҙар баланың мейеһе үҫешендә ҙур роль уйнаһа, кальций һәм башҡа файҙалы матдәләр һөйәктәрҙең дөрөҫ үҫешенә булышлыҡ итә.

Уны беҙ әсә һөтө тип атарға күнеккәнбеҙ, ә һөттөң 90 проценты һыуҙан тора. Әйткәндәй, туҡланыу менән бер рәттән, бала таҙа һыуға ла бик ныҡ мохтаж. Әммә ябай һыу гигиеник йәһәттән таҙа түгел һәм әле ныҡынып етмәгән организм өсөн зарарлы булыуы мөмкин. Шунлыҡтан, бары тик әсә һөтөндәге һыу ғына бала өсөн файҙалы була ала.



Күп йыллыҡ фәнни эҙләнеүҙәр шуны иҫбат итте: хатта ваҡытынан алда тыуған балаларҙың, әгәр ҙә улар күкрәк һөтө менән туҡлана икән, иммунитеты ла, күреү һәләте лә яһалма балалар аҙығын ҡулланған йәштәштәренә ҡарағанда юғарыраҡ. Американың Кентукки университеты белгесе Джейм Андерсон һүҙҙәренә ҡарағанда, күкрәк һөтөн эйгән балаларҙың интеллект кимәле яһалма балалар аҙығын шешә аша ҡабул иткәндәрҙекенә ҡарағанда 5 балға күберәк. Сөнки күкрәк һөтө менән туҡланған баланың интеллекты тәүге алты айҙа үҫешә. Ә күкрәк һөтө менән 8 айҙан да кәмерәк туҡланған бала унан бер ниндәй ҙә файҙа алмаясаҡ.

Американың Цинцинати университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, әсә һөтөндә адипонектин тип исемләнгән аҡһымдың проценты юғары. Был аҡһым организмда оҙаҡ йылдар һаҡлана, йөрәк сирҙәренә һәм инфарктка ҡаршы көрәшә. Был аҡһымдың организмда аҙ миҡдарҙа йәки бөтөнләй булмауы һимеҙлеккә, йөрәк ауырыуҙарына килтерә. Күкрәк һөтөнә туйынып үҫкән балаға ундай ауырыуҙар янамай.

Күкрәк һөтөндә булған йәнә бер гормон лептин тип атала. Ул матдәләр алмашыныу процесына йоғонто яһай. Лептин гормоны организмда информацион функция үтәй, йәғни әгәр ҙә ҡанда май күләме норманан артыҡ күтәрелһә, мейегә шуның тураһында белдерер, импульстар ебәрә. Күкрәк һөтө менән бергә был гормонды етерлек итеп алған организм һимеҙлек, шәкәр диабеты кеүек ауырыуҙарға ҡаршы торорлоҡ көскә эйә буласаҡ.

Күкрәк һөтөн тикшергән ғалимдар фекеренсә, ул ракка ҡаршы тора алырлыҡ үҙенсәлектәргә эйә. Швецияның Лунда университеты табиптары күкрәк һөтөндә ошо яман сиргә ҡаршы тылсымлы ҡорал барлығы хаҡында иҫбат итте. Онкология клиникаларының берәһендә үткәрелгән эксперимент шуны күрһәтте: әсә һөтө организмдағы рак күҙәнәктәрен табып ала һәм шундуҡ юҡ итә. Күкрәк һөтөнөң ракка ҡаршы тора алырлыҡ аҡһымлы матдәһе альфа-лакт тип атала. Был хаҡта йөҙәрләгән ғилми мәҡәлә яҙылған, әммә күкрәк һөтөнөң ракка ҡаршы булған механизмын тулылыҡса аңлай алыусы юҡ.

Бөгөнгө көн фәне күкрәк һөтөн өйрәнеү буйынса ҙур эштәр алып бара. Ә заманса йыһазландырылған лабораторияларҙа яһалма балалар аҙығының яңынан-яңы технологияһын уйлап табалар. Ләкин күкрәк һөтө уларҙан күпкә файҙалыраҡ та, ышаныслыраҡ та. Баш китерлек бит: әсә организмында бала өсөн бөтә яҡлап та яҡшы булған файҙалы һөт эшкәртелә, ә ул үҙе был процестың нисек барғанын, һөт составының ниндәй матдәләргә бай булыуын белмәй.

**Ләйсән САБИТОВА әҙерләне.**

тәҙәү. Ислам әхләге нигеҙҙәре кеше тәбиғәтенең юғары күрһәткестәрендә төҙөлгән. Алла Илсеһе: "Имандың етмештән ашыу ботағы бар. Уларҙың иң юғарыһы "Лә иләһи илләллаһ" тиеү, иң бәләкәйе - кешеләрҙең йәнен көйҙөргән нәмәне юлдан алып ташлау. Оялсанлыҡ та - Иман ботаҡтарының береһе", ти

Ислам ғалимдары "Иман ботаҡтары"на ентекле тикшереү үткәрә, һөҙөмтәлә улар "мосолман шәхесе"н иң нескә деталдәрҙә тасуирлай: ғәҙеллек, намыҫ һәм дәрәжә, түбәнселек, уртасалыҡ, яҡшылыҡ; эскерһеҙлек, киң күңеллелек, уҙ мөмкинселегендән ҡәнәғәтлек, аҡыл, тыңлай белеү һәм килешеүсәнлек, яҡшылыҡта ярышыусанлыҡ, үлсәгәндә, бүлгәндә ғәҙеллек, алсаҡлыҡ, олпатлылыҡ, ҡыйыулыҡ һәм ҡаһарманлыҡ; ышанысы булыу, я ҡ ш ы л ы ҡ ҡ а өндәгәндә ныҡышмаллыҡ, яуыҙлыҡты тыйыусанлыҡ; туғандар менән яҡшы мөнәсәбәт, ололарҙы хөрмәтләү, кескәйҙәрҙе ҡайғыртыу, ғаилә ағзаларының хоҡуҡтарын һаҡлау, әсә-атаны тыңлау; яҡшы күршелек, бурысҡа биреү, бурысты ҡайтарыу, кешеләрҙе яраштырыу, башҡалар өсөн дуа эшләү, уҙ-ара ярҙам, туғанлыҡ, дуҫлыҡ, мөхәббәт, инсафлыҡ; дөрөҫлөк, яҡшы мөғәмәлек, ҡунаҡсыллыҡ, оялсанлыҡ, Алланан ҡурҡыу, үкенеү, әҙәп, тыйнаҡлыҡ, изге күңел, рәхмәтлелек, Аллаға рәхмәтле булыу, әйткән һүҙгә тоғролоҡ, сер һаҡлау, кәңәшләшеү, кәңәш бирә белеү, кешеләргә рәхмәтлелек, ғәфү итеү, дуҫлыҡҡа тоғролоҡ, оптимислыҡ, ирлек, ҡорбан килтереүсәнлек, Тыуған илгә һөйөү, ҡаҡшамаҫ булә белеү һәм донъя рәхәтлектәренә йәбешеп ятыусан булмау, тышҡы һәм эске матурлыҡ...

Ошондай сифаттарға эйә халыҡ нисек күҙ алдына килә һәм беҙ бөгөн кемдәрҙе күрәбеҙ? Аяуһыҙ, асыулы, рәхмәтһеҙ, эше, һүҙе менән дә бысраҡ кешеләрҙе. Кеше бөгөн тупаҫҡа әйләнде, ул оло менән кесене айырмай, күршеләре һәм туғандары менән бәйләнешен, ҡыйыулығын, сабырлығын, изге күңеллелеген юғалтты... Ундайҙар арткандан-арта бара, хатта дингә ышаныуы кәмеүҙән үҙенең дәрәжәләренән мәхрүм булып, Ислам берләшмәләре лә упҡынға тәгәрәй. Былай барһа, кешене кем ҡотҡарыр? Әгәр Алла теләһә, ке-шеләрҙе упҡынға тәгәрәүҙән үҙендә кешелек дәрәжәһен һаҡлаған, "фадылят"ҡа эйә булыусылар ғына ҡотҡара аласаҡ.

* * *

Бер мәл Муса әфәнде бәләкәй хажға Мәккәгә килгәндә төндәр бик һыуыҡ була. Муса Әфәнде ярҙамсыһы Фәҙел бейгә: "Фәҙел, улым, юлда килгәндә туннелдә йөкләргә ҡалған кешеләрҙе к ү р е ү е б е ҙ ҙ е хәтерләйһеңме? Ә беҙ бында, йылы ҡунаҡханала... Беҙ улар өсөн яуаплы түгелме ни? Хәҙер уҡ күп итеп юрған һатып ал да, уларға илтеп бир", тип, ярҙамсыһына аҡса бирә. Тегеһе бик күп юрғанды йөк машинаһына тейәп, туннелгә килтереп, хажға барыусыларға тарата. Шулай итеп, юлаусылар был төндә Кеше Изгелегенә төрөнөп, йылынып йоҡлай.

* * *

Һалҡын ҡыш була. Конья ҡалаһын ап-аҡ ҡар ҡаплай. Конья-Анкара трассаһында ем эҙләгән ҡошсоҡтар елеп үткән автомобилдәргә тапалып үлә. Быны күргән доктор иптәштәренә: "Ярлыларҙың өйөнә шәм тоҡандырыуҙан тыш, беҙгә бөгөн тағы бер яҡшы эш эшләргә кәрәк. Оло юл буйындағы ҡоштарҙы аслыҡтан ҡотҡарайыҡ", тип, егеттәргә ем һатып алырға аҡса бирә. Юлаусылар яҡындағы киосктан ем алып, уны оҙон юл буйына һибеп, ҡоштарҙы үлемдән ҡотҡара...

* * *

Кемдер өшөп туңа яҙған кешеләрҙе абайлай, бәғзеләре күрмәй. Кемгәлер аслыҡтан үлгән ҡоштар тынғы бирмәй, башҡалар ул хаҡта уйлап та бирмәй. Кем бөтәһен дә күрә, абайлай, борсола - улар "фадылят"ты, йәғни Кешелек дәрәжәһен һаҡлаған. Был донъяла кеше алдында ике юл бар. Береһе түбәндең дә түбән йән эйәһе итер өсөн меҫкенлек упҡынына илтә. Икенсеһе Бәйғәмбәрҙәр дәрәжәһенә эйә булып, Илаһилыҡҡа ярашлы ғүмер итер өсөн уҙ-уҙе менән көрәш юлына баҫтыра.

Кешенең иң төп өҫтөнлөгө - ул "тәҡүә", йәғни Алланан ҡурҡа белеү, тиҙәр. Ә бөтөн булған башҡа өҫтөнлөктәр уның эҙемтәһе. Алланан ҡурҡыу - ул Аллаға тоғролоҡ һаҡлау, Уның ихтыярын, бөтөн ботаҡтары һәм емештәре менән бергә Иман ағасын юғалтыуҙан ҡурҡыу, тигәнде аңлата.

Аллаһы Тәғәлә иманыбыҙҙы, дингә ышаныбыҙҙы, Алланан ҡурҡыуыбыҙҙы нығытһын, бәйғәмбәрҙәр юлынан алып барһын һәм кешенең ысын дәрәжәһе - фадылят бүләк итһен! Амин!

БОРОН-БОРОН...

## Бәйғәмбәрҙәр тарихынан

## Лут бәйғәмбәр

Тарихтың улы һарандың Лут исемле улы була. Ибн Ҡасир әйтеүенсә, ул Ибраһим бәйғәмбәрҙең яҡын туғаны. Лут Ибраһим менән хушлашып, Содомға китә. Ундағы халыҡ Аллаға ышанмауы һәм боласыл булыуы менән билдәлелек ала. Улар кешелек тарихында беренсе булып енәйәттәрҙең иң ерәнгесе - содомия менән шөғөлләнгән. Өҫтәүенә, был ерәнгес шөғөлөн бөтөн халыҡ алдында ғәмәлгә ашырырға ғәҙәтләнгәндәр.

Лут бәйғәмбәр уларҙы бер генә Алла булыуына ышанырға һәм фәҡәт Уға ғына ышанырға, ошоға тиклем ҡылған ҡот оскос енәйәттәренән баш тартырға өндәй. Ә теғеләр бәйғәмбәрҙең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға ла уйламай, уға ҡарышып, аҙғынлыҡ менән шөғөлләнеүҙәрен дауам итә. Ерәнгес гонаһ ҡылыуҙарҙан тыш, Луттың халҡы оло юлдарҙа кеше талау менән дә шөғөлләнгән. Күпләп йыйылған урында һәр саҡ яман һүҙҙәр ҡулланалар һәм күмәк кеше алдында ла содомия менән шөғөлләнергә тартынмайҙар. Әхләҡи яҡтан аҡыл йөрөтә белмәгән хайуандарҙан да түбәнерәк кимәлгә төшәләр.

Алла: "Беҙ Лут бәйғәмбәрҙе халҡын Берҙәм Аллаға ышанырға һәм йәмәғәтселекте аҙғын гонаһлыҡтан арындырырға кәңәш бирһен өсөн оҙаттыҡ. Һеҙ кеше тәбиғәтенә һис тап килмәгән ҡәбәхәтлекте ҡылыуҙы дауам итерһегеҙме икән ни? Һеҙ тыумыштан кешенең булмышына хас булмаған был әшәкелектә бөрәү ҙә һеҙҙе уҙҙыра алмаған ҡәбәхәтлегегеҙҙе һаман ҡылмаҡсыһығыҙмы? Енси теләктәрегеҙҙең йүгәнһеҙлеге арҡаһында, хатта хайуандар ҙа ҡылмаған нәмәне - ҡатын-ҡыҙ урынына ирҙәрҙе файҙаланып, кеше тәбиғәтенә ҡаршы килеп бөтөн сиктәрҙе аша атлап сыҡтығыҙ", ти.

Лут был боҙоҡ халыҡты Аллаға яҡынайырға өндәһә лә, барыһы ла уны мыҫҡыллап көлгәс, "Алла һеҙгә яза бирәсәк", ти. Тегеләр: "Алланың хаҡ булһа, тиҙерәк беҙгә язаһын бирһен", тип мыҫҡыллауын дауам иткәс, Лут Алланан ер йөҙөнә әшәкелек таратыусы был хәшәрәттәрҙе еңеүҙә ярҙам һорай. Алла Луттың үтенестәрен ишетә һәм ергә фәрештәләр ебәрә. Фәрештәләр осоп килешләй Ибраһимға ла ҡағыла һәм үҙҙәренең Алланы тыңларға теләмәгән ҡот оскос бысраҡлыҡҡа батҡан аҙғын халыҡты, асылы ниҙә булыуын Алла ғына белгән балсыҡ таш менән бәреп юҡ итергә, улар араһына ебәрелгән Лутты һәм уның ғаиләһен ҡотҡарырға Содомға китеп барыуҙарын, Ибраһимдың тиҙҙән данлы улдың атаһы буласағын хәбәр итә.

***✓ Беҙ күп кенә осраҡта балаларға белем бирәбеҙ, тәрбиәләйбеҙ, тип яңылыш уйлайбыҙ һәм яңылышабыҙ. Хәҙерге замандың мәғлүмәти дауылы солғанышында ҡалған балаға белем биреү кәрәкмәй.***



# БАЛАҒА БЕЛЕМ ... ә белем алыу

**Мәктәптәрҙә тел уҡытыуға бәйле башланған әңгәмәләр йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Мәрйәм Бураҡаева менән Вәкил Хажиндың «Тел теорияһын ғына уҡытыу милләтебеҙ алдындағы енәйәт ул» (23-сө һан) тигән әңгәмәһе менән башланған был һөйләшеү Фирҙәүес Хисаметдинова менән Кәрим Булатовтың «Грамматика ғына уҡытһаҡ, атһыҙ һыбайлы булмаҫбыҙмы?» тигән әңгәмәлә дауам ителде. Ике әңгәмәлә лә дәрестәрҙә тик тел теорияһын, грамматиканы ғына уҡытыу дөрөҫ булмаған методик ысул, тип табылды, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса сығарылған дәреслектәр, асылда, яраҡһыҙ тип табылды.**

**Был юлы тел уҡытыу хаҡындағы һөйләшеүҙе педагогия фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Рафаэль АҘНАҒОЛОВ менән Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ейәнсура районы Яңыбай урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, «Йыл уҡытыусыһы-2005» конкурсы еңеүсеһе Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ дауам итә.**

► **Дәүләттең ниндәйҙер законын, хөкүмәт ҡарарын бойомға ашырыу өсөн махсус шарттар һәм алдан әҙерлек талап ителә. Әҙерлек булмаған осраҡта законды, ҡарарҙы үтәүселәр күҙ буяу, формализм юлына баҫырға мәжбүр. Ошо йәһәттән, дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен республика мәктәптәрендә уҡытыуҙы башлағанда ла быға күп урындарҙа әҙер булмауға бәйле проблемалар барлығы асыҡланды. Һеҙ уларҙы низә күрәһегеҙ?**

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Беҙ һаман да бер ярҙан икенсе ярға һуғылабыҙ. Дәррәү тотоноп, дәртләнеп китеп, бер эште башлайбыҙ ҙа, ташлайбыҙ. Сәпәкәй итәбеҙ. Шунан икенсеһенә тотонабыҙ, уныһын да онотабыҙ. Ҡыҫҡаһы, башлаған эшебеҙҙе системалы итеп, аҙағына тиклем еткерә белмәйбеҙ. Шуға күрә лә бик күп яҡшы башланғыстар, идеялар онотолоп ҡала, тарих сүплегенә ырғытыла. Дәүләт теле булараҡ, республика мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһендә лә беҙгә шулай уҡ системалылыҡ етешмәй. Беҙ күп нәмәгә әҙер булмайынса, алдан шарттар тыуҙырмайынса, был эште ҡапыл башлап ебәрҙек. Бының менән беҙ күп кенә балаларҙы, ата-әсәләрҙе туған телебеҙҙән биҙҙереп ҡуймаһаҡ ярар ине, тигән ҡурҡыныс, хәүеф бар. Кадрҙар мәсьәләһенә килгәндә, был эш тә үҙағышына ҡуйылған. Университеттар, институттар уҡытыусы кадрҙары әҙерләй. Әммә уларҙың күбеһенең мәктәпкә барғыһы килмәй. Уҡытыусыны социаль яҡтан яҡлау мәсьәләһен хәл итмәй тороп, эш хаҡын арттырмай тороп, йәштәр мәктәпкә килмәйәсәк. Юғары уҡыу йорттары кемгәлер диплом тапшырыусы учреждение ролен үтәүсе генә булып ҡала бара. Юғары белем менән тормош араһында тура пропорциональ бәйләнеш юғала.

Үҙем күреп йөрөйөм: күп кенә мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары етмәгәнлектән, физика, математика, химия, рус теле уҡытыусылары өҫтәлмә дәрес итеп, башҡорт телен уҡытып йөрөй. Тел һәм әҙәбиәт уҡытыуҙы һәр кем башҡара алырлыҡ, әллә ни ҙур яуаплылыҡ талап итмәгән «разнорабочий хеҙмәте» итеп ҡарайҙар. Беҙ туған телебеҙгә шул тиклем битараф халыҡмы ни?

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Дәүләт теле – ул дәүләтебеҙҙең төп мәғәнәһе, төп асылы. Шуға күрә дәүләт телен дәүләт теле юғарылығы кимәлендә өйрәнергә кәрәк. Дәүләт теле – ул закон, ә закон үтәлергә тейеш. Теге йәки был граждан ошо дәүләттә йәшәй икән, теләйме-юҡмы, ул ошо ерҙең телен өйрәнергә тейеш. Законға буйһоноу кешенең теләк-ихтыярына ҡарамай.



Беҙ күп кенә осраҡта балаларға белем бирәбеҙ, тәрбиәләйбеҙ, тип яңылыш уйлайбыҙ һәм яңылышабыҙ. Хәҙерге замандың мәғлүмәти дауылы солғанышында ҡалған балаға белем биреү кәрәкмәй. Беҙ балаларға белем һәм тәрбиә алыу юлдарын күрһәтеп бирергә генә бурыслыбыҙ. Ни өсөн рус теле бөгөн мәҙәни аспектта үҫешмәй, сөнки ул рус халҡының мәҙәни, культурологик аспектында өйрәнелмәй. Беҙ иһә телебеҙ менән бергә милли мәҙәниәтебеҙҙе лә өйрәнәбеҙ. Һәр бер һүҙҙең өс формаһы бар. Беренсеһе – өн һәм хәрефтән торған тышҡы формаһы, икенсеһе – эске формаһы, беҙ уны асыл тип өйрәтәбеҙ һәм бөтә этномәҙәниәт һүҙҙең эске формаһында ята. Өсөнсөһө – һүҙҙең мәғәнә формаһы. Беҙ мәктәптәрҙә һүҙҙең беренсе һәм өсөнсө формаһына ғына иғтибар бирәбеҙ, ә һүҙҙең эске формаһы уҡытыусының күҙ уңынан төшөп ҡала. Һүҙҙең икенсе формаһында күркәм телмәр саралары ята. Уны телмәр ҡалыптары, телмәр этикеты тип тә йөрөтәләр. Мәҫәлән, «алтын» һүҙе. Уның тышҡы формаһы – ул биш хәрефтән тора, мәғәнәһе – ул ҡиммәтле металл. Рауил Бикбаевтың «Ҡырҙарында алтын үҫтерҙек» тигән шиғыр юлдарында «алтын»дың икенсе формаһы, асылы «иген» тигән мәғәнәне бирә. Бында ябай ғына һүҙ ҡанатлыға, образлыға әйләнә лә китә. Беҙҙең тел ғилеме методологияһы боҙолған. Унда тел – аралашыу ҡоралы һәм эшмәкәрлек тип ҡарала. Был хата фекер. Тел – ул телмәрҙең һөҙөмтәһе генә. Тимәк, иң беренсе урында телмәр, шунан һуң ғына тел тора. Ғалимдар ҙа тел менән телмәрҙе бутай.

***Дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен уҡытыу өсөн, минеңсә, тик алдынғы, ҙур тәжрибәле уҡытыусыларҙы ғына йәлеп итергә кәрәк ине. Ғәмәлдә иһә, күп урындарҙа башҡорт телен тел белгәне лә, белмәгәне лә эш урыны булған өсөн генә уҡытып йөрөй. Дәүләт телен бойомға ашырыу эшһеҙҙәрҙе эшкә урынлаштырыу мәсьәләһен хәл итеү өсөн хеҙмәт итергә тейеш түгел. Күп кенә уҡытыусылар хатта класс журналына башҡортса яҙа белмәй, тип зарлана методистар. Бының менән дәүләт теленең әһәмиәтен түбән төшөрәбеҙ. Ҡайһы урындарҙа башҡорт теле уҡытыусылары телде уҡыусыларына ҡарағанда ла насарыраҡ белә. Борайҙың бер мәктәбендә, мәҫәлән, башҡорт телен татар милләтле уҡытыусы уҡыта. Дәресенә индем. Күп кенә һүҙҙәрҙе татарса ысҡындыра. Һуңынан дәресенә анализ яһаным, етешһеҙлектәрен әйттем. Дәүләт телен уҡытыу туған телде уҡытыуға ҡарағанда күпкә юғары сифатлы булырға тейеш. Сөнки уның сәйәси, донъяуи һәм халыҡ-ара әһәмиәте бар.***

Вәкил Хажиндың «Грамматиканы ғына өйрәнеү милләтебеҙ алдындағы енәйәт ул» тигән фекерендә тәрән мәғәнә ята. Ул мәғәнәне беҙ дәреслек авторҙарына һәм уҡытыусыларға төшөндөрөргә тейешбеҙ. Беҙ грамматика ятлатып ҡына баланы әсә теленә лә, дәүләт теленә лә өйрәтә алмайбыҙ. Бының өсөн телмәргә нигеҙләнгән дәреслектәр кәрәк. Ҡағиҙә - ул теория, ә беҙ уны иң тәүҙә практик аралашыуҙа, йәғни телмәрҙә башларға тейешбеҙ. Кем башҡорт телен төптән, тәрән итеп өйрәтергә теләй, шунда ғына ул грамматикаға мөрәжәғәт итергә тейеш.

► **Бына һин, Ғайса, мәктәптә уҡытыусы булып эшләйһең. Хәҙерге дәреслектәрҙә, практик булараҡ, ниндәй етешһеҙлектәр бар тип уйлайһың?**

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Беҙҙә уҡытыусылар менән ғалимдар араһында ныҡлы бәйләнеш юҡ. Был йәһәттән уҡытыусы менән ғалим икеһе ике ярҙа тора һәм улар бер-береһен аңламай һәм ишетмәй. Беҙ грамматика буйынса ҡағиҙә уҡытып, балаларҙы телдән биҙҙерәбеҙ, уларҙың мейеһен серетәбеҙ. Уҡытыусы план төҙөп, ҡалыпҡа ингән дә, шунан ситләшә алмай. Мин үҙем дәрес планы төҙөйөм, әммә унда уҡыусыларға еткерергә кәрәкле иң мөһим урындарҙы ғына теркәйем. Ғөмүмән, хәҙерге ваҡытта дәрес планы системаһы дөрөҫ түгел. Сөнки план төҙөгән уҡытыусылар уҡыусыларҙы ғына түгел, үҙен дә ҡалыпҡа индерә һәм унан йылдар буйына сыға алмай. Әгәр ҙә дәрес планынан ситкә китмәһәң, уҡыусылар менән йәнле аралашыу килеп сыҡмай. Дәреслектәр, Рафаэль ағай, бигерәк ғилми күҙлектән яҙыла. Уны яҙыусы ғалимдар хәҙерге мәктәпте, уҡыусыларҙың психологияһын бөтөнләй белмәй. Әҙәбиәт буйынса, мәҫәлән, материал күп, ә дәрестәр һаны сағыштырмаса бик аҙ. Бындай шарттарҙа әҙәби әҫәрҙәрҙе төптән һәм ентекле өйрәнеү бөтөнләй мөмкин түгел. Уҡыусылар башҡорт яҙыусыларының киң билдәле әҫәрҙәрен, классиканы өҫтән-мөҫтән генә үтә.

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Башҡорт теле буйынса дәреслектәрҙәге биремдәр баланы бөтөнләй уйландырмай, ҡыҙыҡһындырмай. Әгәр ҙә бала үҙаллы уйланырға өйрәнмәһә, ул телде нисек өйрәнә ала һуң? Совет осоронда конкурстарҙа еңеп сыҡҡан дәреслектәрҙе һаман да яңы быуын дәреслектәре, тип һаташабыҙ. Дәреслектәрҙең тышына хатта шул хаҡта яҙып ҡуйырға ла оялмайҙар. Бөгөнгө уҡытыусы дәреслекте тәнҡит күҙлегенән баһаламай. Һәр уҡытыусының үҙ концепцияһы, үҙ методикаһы, үҙ программаһы булырға тейеш. Ә беҙ Мәғариф министрлығы әҙерләгән программаларҙан, дәреслектәрҙән бер аҙым да ситкә китә алмайбыҙ, сөнки уҡытыусы ижади эшләмәй. Дәреслектәр шулай булырға тейештер, тип ҡараған осраҡта ла, әгәр ҙә уҡытыусы ижади эшләһә, мәсьәлә ул тиклем ҡырҡыу тормаҫ ине.

Уҡытыусының дәүләт стандартынан алыҫлашмаған үҙ методикаһы, үҙ программаһы булыуы мотлаҡ.

► **Рафаэль ағай «Хәҙерге замандың мәғлүмәти дауылы солғанышында ҡалған балаға белем биреү кәрәкмәй. Беҙ балаларға белем һәм тәрбиә алыу юлдарын күрһәтеп кенә бирергә бурыслыбыҙ», тигән бик ҡыҙыҡлы фекер әйтте. Был фекер уҡыу-уҡытыуҙың йөкмәткеһен һәм сифатын үҙгәртеүҙе генә түгел, шулай уҡ яңыса мәктәп зарурлығын да талап итә кеүек...**

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Хәҙерге заманда балалар ата-әсәләрҙән дә, уҡытыусыларҙан да күп йәһәттән алдараҡ бара. Дөрөҫөн әйткәндә, күп кенә уҡытыусылар компьютер, кеҫә телефоны менән ҡуллана белмәй, ә өйҙәге биш йәшлек бала барыһын да белә. Беҙ алда барырға тейеш булһаҡ та, уҡыусыларға эйәрә алмайбыҙ. Эйәрә алмағас, беҙ уларға белем дә бирә алмайбыҙ. Шуға күрә, Рафаэль ағайҙың фекере бик хаҡ. Ҡулымдан килһә, мин уҡыу-уҡытыу системаһын тамырынан үҙгәртеп ҡорор инем. Бала теләйме-теләмәйме, уға кәрәкме-юҡмы, һәр уҡытыусы уҡыусынан үҙенең предметын ныҡлы һәм төплө белеүен талап итә. Был дөрөҫ түгел. Профилле уҡытыу хаҡында әллә ҡасандан бирле һөйләйбеҙ, тик боҙ урынынан ҡуҙғалмай. Беҙ әле уҡыусыларыбыҙҙың нимәгә һәләтле булыуын да белә алмайбыҙ, шул һәләтен үҫтереү буйынса ла эшләмәйбеҙ.

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Профилле уҡытыуға килгәндә, был мәсьәләне әле Мәғариф министрлығында ла аңлап бөтмәйҙәр кеүек. Бер нисә мәктәптә генә бары унынсы синыфтан ғына башлағандар, буғай. Унынсы синыф бик һуң, сөнки беҙ баланың рухиәтен, психологияһын беренсе синыфтан уҡ өйрәнә башлайбыҙ. Бала беренсе синыфҡа килгәндә килештәрҙе, заттарҙы бутамайынса, үҙенең ата-әсәһе, ғаилә ағзалары, йорт хайуандары тураһында тәтелдәп һөйләй белә. Беҙ ана шул беренсе синыфҡа килгән уҡыусының белеменә йүнәлеш бирмәйбеҙ, баланы һөйләндермәйбеҙ. Күп дәрестәргә инеп ултырам. Уҡыусы һөйләй башлай ҙа, теманан аҙ ғына ситләшһә, уҡытыусы уны шып

**✓ Бала теләйме-теләмәйме, һәр укытыусы укыусынан үҙенең предметын ныклы һәм төплө белеүен талап итә. Был дөрөҫ түгел. Профилле укытыу хаҡында әллә ҡасандан бирле һөйләйбеҙ, тик боҙ урынынан ҡуҙғалмай.**

# БИРМӘ, юлын күрһәт

туктатып: «Һин дөрөҫ әйтмәйһең», - тип, уның битен йырта. Туктатырға кәрәк булған осракта ла: «Афарин, һинең үҙ фекерең бар икән, әйҙә, икенсе иптәшеңде лә тыңлап ҡарайык әле»,- тип уны матур ғына итеп туктатып була. Дөрөҫ һөйләмәгән осракта ла, хаталы булһа ла, укыусы дәрес проблемаһына ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен аңлата, шуға күрә уны туктатмау хәйерлерәк. Баһалау кәрәк, әммә «икеле» ҡуйып, баланың йөҙөн синыфташтары алдында кәмһетеү ярамай. Яңы мәктәптә яңыса баһалау системаһы индереү ҙә өлгөрөп еткән мәсьәлә.

«Өйгә эш»те лә бөтөн укыусыларға тигеҙ итеп бирәбеҙ. Был – дөрөҫ түгел, минеңсә. Сөнки укыусыларҙың дәресте үҙләштереү кимәле лә төрлөсә. Теманы яҡшы үҙләштергән укыусыларға ижади өйгә эш биреү маҡсатка ярашлы булыр ине. Укыусының үҙе уйлап яҙған бер һөйләме күсереп яҙған ике-өс күнегеүҙән дә ҡиммәтлерәк. Ниңәләр дәрес пландарында укыусыларҙың теге йәки был материалды үҙләштереү кимәлен тигеҙләү мәсьәләһе ҡуйылмай.

**► Республикала дәүләт теле һәм туған тел булараҡ, башкорт телен һәм әҙәбиәтен укытыуҙың ижтимағи әһәмиәтен күтәреү зарурлығы республика яҙмышын хәл итеүгә тиң мәғәнәгә әүерелергә тейештер...**

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Дәүләт теле булараҡ, башкорт телен укытыу өсөн, минеңсә, тик алдынғы, ҙур тәжрибәле укытыусыларҙы ғына йәлеп итергә кәрәк ине. Ғәмәлдә иһә, күп урындарҙа башкорт телен тел белгәне лә, белмәгәне лә эш урыны булған өсөн генә укытып йөрөй. Дәүләт телен бойомға ашырыу эшһеҙҙәрҙе эшкә урынлаштырыу мәсьәләһен хәл итеү өсөн хеҙмәт итергә тейеш түгел. Күп кенә укытыусылар хатта класс журналына башкортса яҙа белмәй, тип зарлана методистар. Бының менән дәүләт теленең әһәмиәтен түбән төшөрәбеҙ. Кайһы урындарҙа башкорт теле укытыусылары телде укыусыларына карағанда ла насарырак белә. Борайҙың бер мәктәбендә, мәҫәлән, башкорт телен татар милләтле укытыусы укыта. Дәресенә индем. Күп кенә һүҙҙәрҙе татарса ыҫкындыра. Һуңынан дәресенә анализ яһаным, етеш-һеҙлектәрен әйттем. Дәүләт телен укытыу туған телде укытыуға карағанда күпкә юғары сифатлы булырға тейеш. Сөнки уның сәйәси, донъяуи һәм халыкара әһәмиәте бар.

Дәүләт теле булараҡ, башкорт телен укытыу бигерәк тә ҡала ерҙәрендә ауыр бара. Бында инде икенсе проблема килеп сыға: дәүләт телен рус телендә өйрәтергәме, әллә башкорт телендә өйрәтергәме? Ябай ғына бер миҫал килтерәм. Бер нисә йыл элек Өфөлә Башкорт-төрөк лицейы эшләне. Шунда русса бер һүҙ ҙә белмәгән төрөк укытыусылары башкорт һәм башка милләт балаларына төрөк телен өйрәтте. Уларҙың тел өйрәтеү технологияһы ябай ғына. Укытыусы өҫтәлгә бер әйбер һала ла, шул әйберҙең исемен әйтә. Шунан һуң «Хәҙер мин шул әйберҙе өҫтәлдән алам», тип төрөксә әйтә. Шунан һуң «Мин был предметты кулыма алдым», ти. Ғәжәп, ярты йылдан һуң бөтә укыусылар төрөксә һөйләшергә өйрәнде. Әгәр ҙә министрлык тәкдим иткән программалар, методикалар, дәреслектәр башка милләт вәкилдәренә башкорт телен өйрәтеү өсөн кулайһыҙ икән, төрөктәр кеүек ошо ябай ғына ысулды ла кулланырға була бит. Барыһы ла укытыусынан тора.

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Башкорт телен һәм әҙәбиәтен укытыуҙың ижтимағи әһәмиәтен күтәреүҙә укытыусының социаль хәлен яҡшыртыуҙан башлау иң дөрөҫө булыр ине. Мин аҙнаһына 18 сәғәт башкорт телен укытам. Шунда ла аҙна аҙағына арып, хәлдән таям. Ә бына ҡалалағы аҙнаһына 40-50 сәғәт укыткан укытыусылар нисек эшләйҙәрҙер, мин быға аптырайым. Социаль шарттарға килгәндә, Өфөләге мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ башкорт телен укытыу өсөн ауылдарҙан бик күп укытыусылар килеп, йәшәргә урындары булмағанлыктан, кире кайтып китеүҙәре хаҡында ла белдек. Дәүләт законын бойомға ашырыр булғас, был хәстәрлекте ни өсөн дәүләт үҙ елкәһенә алмай һуң? Әллә дәүләт үҙ законына үҙе ҡаршымы? Әйтәйек, бына Өфөнөң үҙендә тик башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусылары өсөн айырым йорт, ятаҡ төҙөп ултыртып булмаймы ни? Республика бюджеты өсөн был йорт саң бөртөгөнә лә тормаясак бит.

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Ни өсөн башкорт теле укытылыуының мәғәнәһен дә укыусыларға аңлатып еткермәйбеҙ. Быны укытыусының үҙе лә белмәй. Республикабыҙҙа йәшәгән башка милләт вәкилдәре үҙҙәре йәшәгән ерҙәге халыктың телен, этномәҙәниәтен белергә тейеш. Мин Ырымбур өләкәһенең Ҡыуандыҡ районынан, Сурай мәктәбендә укыным. Элек беҙҙә эшләгән барлык сит милләт вәкилдәре башкортса өйрәнә торғайны. Колхоз рәйесе рус милләтле Ганин олатай беҙҙең ауылға килеп, башкортса доклад һөйләй торғайны. Беҙҙең бераү: «Ганин бабай, һин нишләп русса һөйләмәйһең ул?» - тип һораны. «Мин һеҙҙең барлык шатлыктарығыҙҙы, ауырлыктарығыҙҙы, проблемаларығыҙҙы үҙегеҙҙең телдә аңлатып бирһәм, һеҙҙең менән уртаҡ телде тиҙерәк табам. Яҙғы мәлдә колхоз малдары күтәртеп яткан сакта һеҙҙән бесән һораһам, бер сана бесәнегеҙҙе колхоз ихатаһына үҙегеҙ алып килеп ауҙарып китәһегеҙ бит. Мин шуға күрә һеҙҙең менән башкортса һөйләшәм», тип яуапланы Ганин. Табиптар Вишневский менән Кравченко башкорттарға «бисмилла» әйтеп укол һала торғайнылар. Кравченконың ҡатыны Вера апай ҙа башкортса ҡаңғылдап тора торғайны. Үҙең йәшәгән ерҙәге халыктың телен белеү һинең мәҙәниәтле булыуыңды күрһәтә. Ул сағында башкорт теле рәсми рәүештә дәүләтселегебеҙ теле булып иғлан ителмәһә лә, ошондай юғары мәҙәниәтле рус кешеләренең аҡылында һәм ғаҡылында ул дәүләт теле функцияһын үтәй ине.



**Беҙҙә укытыусылар менән ғалимдар араһында ныклы бәйләнеш юк. Был йәһәттән укытыусы менән ғалим икеһе ике ярҙа тора һәм улар бер-береһен аңламай һәм ишетмәй. Беҙ грамматика буйынса ҡағиҙә укытып, балаларҙы телдән биҙҙерәбеҙ, уларҙың мейеһен серетәбеҙ. Укытыусы план төҙөп, калыпка ингән дә, шунан ситләшә алмай. Мин үҙем дәрес планы төҙөйөм, әммә унда укыусыларға еткерергә кәрәкле иң мөһим урындарҙы ғына теркәйем. Ғөмүмән, хәҙерге ваҡытта дәрес планы системаһы дөрөҫ түгел. Сөнки план төҙөгән укытыусылар укыусыларҙы ғына түгел, үҙен дә калыпка индерә һәм унан йылдар буйына сыға алмай. Әгәр ҙә дәрес планынан ситкә китмәһәң, укыусылар менән йәнле аралашыу килеп сыкмай. Дәреслектәр, бигерәк ғилми күҙлектән яҙыла. Уны яҙыусы ғалимдар хәҙерге мәктәпте, укыусыларҙың психологияһын бөтөнләй белмәй.**

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Мәктәп кимәлендә лә башкорт теленең ижтимағи әһәмиәтен күтәреү зарур. Әйтәйек, беҙ 45 минут буйы башкорт телендә балаларға матурлык тураһында һөйләйбеҙ, уларҙан һөйләтәбеҙ. Тәнәфес булып, коридорға сығыу менән башкорт теле кабинет эсендә ятып ҡала. Кайһы сак шулай ҙа уйлайһың: тик дәрестә һөйләшер өсөн генә кәрәкме ни телебеҙ?

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Был осракта мәктәп етәкселеге махсус ҡарар сығарырға тейеш. Ул мәктәп уставында ла теркәлергә тейеш. Ул мәктәптең «Берҙәм орфоэпик режимы» тип атала. Ул беҙ укыған сакта була торғайны. Мәктәп территорияһында булғанда бала башка телдә һөйләргә тейеш түгел. Мәктәптәрҙә укыусыларҙың һаулык һорашыуы ла шундай уҡ режимға инә.

**► Хәҙер төрлө инновациялар, системалар һәм технологиялар күбәйеп китте. Уларға ҡарашығыҙ нисек?**

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Тикшереү барышында укытыусыларҙан «Һин кемдең технологияһы менән эшләйһең?» тип һорайҙар. Был осракта укытыусы кемдеңдер технологияһы менән эшләү мотлаҡ, тип уйлап, ишетеп кенә белгән кешенең фамилияһын әйтергә, артабан шул йүнәлештә эшләргә мәжбүр. Бөтөнләй башкорт менталитетына тап килмәгән, ҡолакка яткыһыҙ системалар, технологиялар күбәйеп китте, улар беҙгә яраҡһыҙ. Укытыусы үҙе үк ижади лаборатория булырға тейеш. Укытыусыларҙы һаман да традицион алымдар менән эшләйһегеҙ, тип әрләйҙәр. Минеңсә, нәк традицион алымдар менән укытҡан ваҡытта алынған белем төплөрәк булған бит. Тағы ла... Хәҙер дәрестә компьютер кулланыу-кулланмауға ҡарап, укытыусының дәресен баһалай башланылар. Мәҫәлән, әҙәбиәт дәресендә иң беренсе урында һүҙ тора, матурлыкты ла тик ошо сара аша укыусыға еткерергә мөмкин. Компьютерлаштырыуға, ғөмүмән, мин һаҡ ҡарайым. Уның менән артык мауығырға ярамайҙыр, тием. Хәҙерге дәрестәргә йәнле аралашыу етмәй. Балалар роботты, машинаны хәтерләтә.

Тағы ла бер мөһим мәсьәлә: нисек кенә аңлатма, балалар «Урал батыр»ҙы әкиәт тип ҡабул итә, был әҫәргә етди ҡарамай. Кисекмәҫтән эпос буйынса йәнһүрәт төшөрөп, DVD дискыларға күпләп яҙып, таратырға кәрәк. Хәҙер хатта ауыл балаларының да өйҙәрендә компьютер, DVD плеерҙары бар. Балаларыбыҙҙың зауығы япон, йәһүд, Дисней йәнһүрәттәренә тамырланһа, киләсәктә беҙ күп нәмәне юғалтырға мөмкинбеҙ.

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Һәр төрлө дәүләт учреждениелары, ойошмалар иң беренсе сиратта фәкәт мәктәпкә эшләргә бурыслы. «Киләсәгебеҙҙе балаларыбыҙҙың йөҙөндә күрәбеҙ», тип трибуналарҙан әйтергә яратабыҙ, тик киләсәгебеҙҙе тәьмин итерлек шәхестәр тәрбиәләй алмайбыҙ әле. Технологияларға килгәндә, мәҫәлән, бөгөн киң билдәле психологтар В. В. Давыдов менән Д. Б. Эльконин үҙҙәренең технологияһында алгебра һәм академик грамматика элементтарын индереүҙе күҙ уңында тота. Әгәр ҙә беҙ уларҙы үҙебеҙгә индерһәк, дәрестәребеҙ абстракт дәрескә әйләнәсәк. Ә балаға абстракт белем кәрәкмәй, уға конкрет, анык белем кәрәк. Шуға күрә мин был системаға каршымын. Беҙҙекеләр ошо концепцияға нигеҙләнгән дәреслектәр сығарҙы. Дәреслек ниндәйҙер концепцияға таянып төҙөлергә тейеш түгел, ул нейтраль булырға тейеш. Әгәр ҙә укытыусы ниндәйҙер концепция, технология эсендә ҡайнай икән, шул осракта ғына ул нейтраль дәреслектән ситкәрәк сыға ала.

Дәүләт телен өйрәнеүҙе лә беҙ әҙерлекһеҙ башланык. Иң тәүҙә уның бер нисә вариантта программаһы, методикаһы төҙәлөргә, дәреслектәре сығарылырға тейеш ине. Бер нисә районда бер нисә мәктәбендә һынау үткәндән һуң ғына был программаны һәм методиканы үҙ эсенә алған дәреслектәр укытыуға ярашлы булып ҡабул ителергә тейеш ине. Беҙ ана шундай әҙерлек осорон үтмәнек.

**Ғ. ИШМӨХӘМӘТОВ:** Дәреслектәргә килгәндә, башкорт яҙыусыларының китаптары беҙҙең мәктәп китапханаларына килеп етмәй. Ә бына Мәскәүҙең «Феникс», «Дрофа» нәшриәттәре сығарған китаптар килеп тулды. Улар өсөн кем акса түләгән һуң?

**Р. АҘНАҒОЛОВ:** Ул нәшриәттәр сығарған китаптарға ышанырға ярамай. Сөнки улар акса эшләү маҡсатында баҫтырылған. Кем түләй тиһеңме? Үҙең уйлап ҡара...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**«Һеҙ дөрөҫ яҙаһығыҙ, ысынлап та, республикабыҙ мәктәптәрендә дәүләт теле һәм туған тел булараҡ, башкорт телен һәм әҙәбиәтен укытыу мәсьәләһе шулай тора. Әммә һеҙ яҙғандан ғына бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк, шундай уҡ дәрес биреүҙәр дауам итәсәк, шул уҡ дәреслектәр баҫылаcаҡ», тип тә әйтеүселәр бар. Беҙҙеңсә, Рафаэль ағай хаҡлы: «Дәреслектәр шулай булырға тейештер, тип ҡараған осракта ла, әгәр ҙә укытыусы ижади эшләһә, мәсьәлә ул тиклем кырҡыу тормаҫ ине...».**

**Хәкикәт бәхәстә тыуа. Һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ.**

***✓ Мин йәштәргә сәбәпһеҙ бәйләнмәнем, ҡул күтәрмәнем, улар алдында аҡырып-баҡырып йөрөмәнем. Шуның өсөндөр ҙә дембелгә мине бөтә рота менән прапорщик етәкселегендә вокзалға тиклем оҙатып ҡалдылар.***

# Әрме-IX



## ПОСТАҒЫ ҺЫНАУҘАР

Яҙға яңылар килде. Ҡоттары осҡан кешеләй, күҙгә генә ҡарап торалар. «Беҙ ҙә шулай булдыҡмы икән?» тип Зиннур менән һөйләшәбеҙ. Беҙҙе ҡарауылға йөрөтә башланылар. Унда күпкә еңел, ял итеп алырға мөмкин. Мин 1-се поста, йәғни полк флагын ҡарауыллайым. Флаг махсус быяла һауытта, полк штабына ингән ерҙә айырым, сынйыр менән кәртәләүле тора. Көндөҙ штабҡа килгән һәр офицер алдында үрә ҡатып тороп, аяҡтар тала. Ә кис үҙ яйыңа торһаң да була. Һирәк-һаяҡ часть буйынса дежур офицерҙар, полк командиры, уның урынбаҫары, штаб начальнигы төнгө тикшереүгә килә. Бер мәл шулай штаб начальнигы майор Моторин килеп инде. Бик үҙенсәлекле, йор һүҙле ҡыҙыҡ ҡына кеше ине ул. Ул миңә «Хәлдәр нисек, һалдат? Йоҡо килмәйме, арытмаймы?» тигән һорауҙар яуҙыра. Үҙе сынйырҙарҙы төҙәткеләгән булып, бәләкәй ҡапҡанан эскә инмәксе итә. Өндәшмәйем. Моторин ҡапҡаны асып, бер аяғын эскә баҫыу менән яурынымдағы автоматымды төшөрҙөм һәм «Туҡта!» тинем. Ул туҡтаны ла: «Ә-ә-ә, һалдат, бурысыңды беләһең икән, молодец!» тине.

Икенсе юлы штабта поста торғанымда тағы бер ҡыҙыҡ хәлгә юлыҡтым. Кискә табан офицерҙар һирәгәйгәс, штабҡа граждандар кейемендәге урта йәштәрҙәге бер ир килеп инде. Дежур сержанттар, посылнойҙар ҡайҙа булғандыр, ишек төбөндә бер кем дә юҡ. Был залға үтте һәм минең ҡаршымда туҡтаны. Һаулыҡ һораша, яуап бирмәйем, тағы ла полк командирын, штаб начальнигын һораша, өндәшмәйем. Ахырҙа түҙмәнем: «Гражданин постовойға һорау бирмәйҙәр, ишек төбөндә көтөгөҙ!» - тинем. Шуны ғына көткәндәй, штаб начальнигы Моторин минең уставты боҙоуым хаҡында ҡысҡырып, бүлмәһенән килеп сыҡты. Баҡтиһәң, ул мине шулай һынаған икән.

## ШАТЛЫҠ ИЛАТА ИКӘН

Ашау, йәшәү яғы ярарлыҡ, тик әлеге лә баяғы «бабайҙар»ҙың юҡ-бар менән бәйләнеүе эсте бошора. Ҡыҫҡаһы, йәш һалдатҡа йоҡо бик самалы эләгә. Етмәһә, тәмле-татлы ризыҡ ашағы килеп йонсота. Быныһын хеҙмәттә булған һәр кем раҫлар. Әрменең көн һайын бер төрлө булған тупаҫ ризығы һалдатты тиҙ бүктерә. Ҡара икмәктән һәм тары бутҡаһынан көйгән үҙәк һаман да бөтмәгән әле.

Шулай ҙа түҙәбеҙ, беҙҙең урамға ла байрам килер әле, тибеҙ. Етмәһә, ротала йәш һалдаттарҙан Зиннур менән икебеҙ генә ҡалдыҡ. Ҡырҡлап «бабай»ға – ике «дух». Әйтерең бармы? Әммә бирешмәнек. Мартта учебканан сержанттар килде. «Һеҙ икәү үҙ бурысығыҙҙы атҡарҙығыҙ, инде ял итеп алһағыҙ ҙа була. Ана, етлекмәгән сержанттарҙы йомшарбыҙ хәҙер», тип көлә «бабайҙар». Ләкин өс сержанттың береһе яҡташыбыҙ булып сыҡты. Ишембай районы егете Камил Әхмәтйәнов. Өҫтәүенә, Камил бүһерле лә икән. Зиннур менән уның хәленә инергә тырыштыҡ. Камилға ярҙам итеүебеҙҙе күреп ҡалған «бабайҙар» тағы ла беҙгә бәйләнә.

Сираттағы саҡырылыш йәштәре килгәс инде, тын алыуы бөтөнләй иркенәйеп ҡалды. Мин йәштәргә сәбәпһеҙ бәйләнмәнем, ҡул күтәрмәнем, улар алдында аҡырып-баҡырып йөрөмәнем. Шуның өсөндөр ҙә дембелгә мине бөтә рота менән прапорщик етәкселегендә вокзалға тиклем оҙатып ҡалдылар. Поезд ҡуҙғалып киткәс тә, хеҙмәттәштәрем вагон артынан байтаҡ ҡына йүгереп килделәр. Мин бит уларҙы бүтән бер ваҡытта ла күрә алмаясаҡмын. Шул саҡта күҙемә йәштәр тығылды.

Шатлыҡ илата икән. Хеҙмәтемдең тәүге айҙарында иңемә күтәргеһеҙ ауырлыҡтар ятып, һыҙланғанымда илау хаҡында уйлап та бирмәгәйнем, хәҙер килеп...

Аллаға шөкөр, ҡайһы бер «бабайҙар» кеүек, дембелгә ҡасып-боҫоп, йәшенеп ҡайтманым. Командирҙарым, хеҙмәттәштәрем менән кешесә, бик йылы һәм дуҫтарса һаубуллаштым. Юғиһә, йәштәрҙе ыҙалатҡан, уларға көн күрһәтмәгән ҡайһы бер дембелдәрҙе, ҡайтыр саҡта ҡабырғаларын һанап, матур итеп «биҙәп» оҙаталар ине. Шул рәүешле, күгәргән күҙ, емерелгән ҡаш менән ҡайтыуҙың ғәрлеге ни тора!

Әрменән вагондарға, самолеттарға ултырып, минең кеүек дуҫтарың тарафынан матур итеп оҙатылып ҡайтыуы күңелле лә ул. Тик бына Чита өлкәһендә полигонда бергә йөрөгән хеҙмәттәшем, автorota водителе, кесе сержант Виталий Михалченко бөгөнгөләй күҙ алдымда тора. Новосибирскийҙан ине ул. Әсәһе үлгән, атаһы икенсе ҡатын менән ҡайҙалыр сығып киткән. Минән ярты йылға алдараҡ хеҙмәткә саҡырылғайны ул. Полигонда көн дә ул миңә: «Төшөмдә апайымды күрҙем. Ҡайтҡанмын икән, апайымды ҡосаҡлайым, тиһәм, уянам да китәм. Нимәгә булыр икән, Мотал?» - тигәйне. Нимә тип әйтәһең инде. Бер аҙнанан Михалченконы ауыр хәлдә госпиталгә алып килгәндәр. Лебедканың тросы һуҡҡан үҙенә. Өсөнсө көн Виталийҙың мәйетен килтерҙеләр. Почетлы ҡарауылда миңә лә торорға тура килде. Дуҫымды юғалтыуы бик ауыр булды. Уны цинк табутҡа һалып, 200-сө йөк менән тыуған яғына оҙаттыҡ. «Насар төш күргәнһең, үҙеңде һаҡла», тип әйтергә кәрәк булған да бит үҙенә.

Үҙебеҙ менән бергә хеҙмәткә алынған яҡташ егетебеҙҙе лә юғалттыҡ. Фамилияһы Низамов, Миәкә районынан ине булһа кәрәк. Бик баҫалҡы, эш өсөн үлгән егет ине. «Имен-һау хеҙмәт итеп ҡайтһам, Ишембайға буровойға эшкә китәм», тип хыяллана торғайны. Ата-әсәһе юҡ, өләсәһе тәрбиәһендә үҫкән. Ул тәүҙә хужалыҡ ротаһында хеҙмәт итте. Бик ауыр ине шикелле Низамовҡа. Һуңғы тапҡыр ашхана алдында күргәнемдә туҡмалыуҙан шешенгәйне, күгәренеп киткәйне. «Дивизионға күсереүҙәрен һораным, түҙер әмәл ҡалманы, тип торҙо. - Йоҡо ла юҡ, тамаҡ та туймай...»

Мин үҙебеҙҙең хәлдең арыу ғына икәнлеген әйткәс, бик көнләште. «Һеҙ бәхетле!» - тине. - Арҡа терәр иптәштәрегеҙ бар, ә мин йыйын «бабайҙар» араһында бер үҙем. Һау булһаҡ, осрашырбыҙ әле, гел генә бөгөнгө ише булмаҫ...»

Ә бер айҙан дивизионға күсерелгән Низамовтың үлем хәбәрен алдыҡ. Поста торғанында автоматтан йөрәгенә очередь менән атылып һәләк булған. Аңлашылды, яҙылмаған әрме законы яҡташыбыҙҙың башына еткән. Тик ғәйеплеләр язаһыҙ ҡалды. Бер саҡ килеп, выждан ғазабы уяныр әле үҙҙәрендә. Кешене донъялыҡтан китергә мәжбүр итерлек итеп рәнйеткән кеше, барыбер, ике донъяның береһендә булһа ла, язаһыҙ ҡалмай, тиҙәр бит. Хәйер, әрмелә иҫ киткес хәлдәр күп була инде ул. Тик һәр береһен теҙеп яҙыуҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Иҫке яраларҙы ҡуҙғатыуҙан хәҙер ни файҙа?

## «БАБАЙЛЫҠ» КӘРӘКМЕ?

Һуңғы йылдарҙа әрмеләге бабайлыҡ касафаттары, уларҙы булдырмау тураһында бик күп һөйләйҙәр һәм яҙалар. Ә мәсьәлә һаман да ҡала килә. Ысынлап та, әллә күпме йылдар дауамында тамыр йәйгән яҙылмаған ҡанунды юғарынан бирелгән күрһәтмәләр һәм улар нигеҙендә күрелгән саралар менән генә бөтөрөп булмайҙыр ул. Тик, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, бабайлыҡты бөтөнләй үк юҡҡа сығарыу кәрәкме икән ул? Үҙебеҙ йәшәгән йәмғиәттә лә барыһы ла ал да гөл түгел: етешһеҙлектәрҙе, кәмселектәрҙе күпме генә йәшерергә, яһалма биҙәктәр менән матурлап күрһәтергә теләһәк тә, улар тулып ята һәм йылдар дауамында үҙҙәренең хәл ителешен көтә.

Минеңсә, «бабайлыҡ»тың кире яҡтары менән бер ҡатарҙан, ыңғай мәлдәре лә бар. Әйтәйек, ҡоро уставҡа таянып ҡына әрмелә егеттәрҙән ысын ил һаҡсыһы тәрбиәләүе бик ауыр. Миҫал эҙләп алыҫ китергә түгел. Әрме хеҙмәтен үткән егеттәр быға үҙҙәре шаһит. Учебкала ярты йыл буйы устав буйынса ғына йәшәргә һәм эшләргә күнегеп килгәндәргә ҡарағанда, һалдат бутҡаһын төп часта ауыҙ иткәндәр әрме донъяһын күпкә тиҙерәк һәм күберәк үҙләштерә. Сөнки бында уларҙы «устав талап итеүселәр» менән бергә арттарынан ҡайыҙлап тороусылар барыһына ла етеҙерәк төшөндөрә. Һәлкәүлеккә, һәпрәлеккә бер ҙә генә урын ҡалдырмайҙар шул «бабайҙар». Дөрөҫ, гражданкала әҙергә-хәҙер булып өйрәнгәндәргә, атай менән әсәй, туғандар елкәһендә йәшәп күнеккәндәргә бик ауырға тура килә. Ни тиһәң дә, әрмелә һине берәү ҙә әпәүләп, иркәләп тормай шул. Унда «теләмәйем», «белмәйем», «эшләгем килмәй», «яратмайым» ише һүҙҙәрҙе телмәрҙән бөтөнләй алып ташларға кәрәк. Булдыра аламы-юҡмы, әрмелә һалдат, бигерәк тә йәш һалдат, барыһын да эшләргә, һис юғы, эшләргә тырышырға бурыслы. Унан килеп, әрме хеҙмәте айырыуса «бабайлыҡ» ҡанундары илкеһалҡылыҡҡа кәртә ҡуя, теүәллеккә, етеҙлеккә өйрәтә, сыҙамлыҡ һәм сабырлыҡ тәрбиәләй.

Ә инде юҡтан ҡыҙыҡ табып, үҙенән көсһөҙҙәрҙән көлөп, уларҙы мыҫҡыл итеп, төрлөсә йәберләүселәргә ҡарата закон нигеҙендә ҡаты яза бирелергә тейеш. Йәш һалдатты туҡмау, хатта уны үлем хәленә еткереү осраҡтары мин хеҙмәт иткән ерҙә лә булды. Ләкин ғәйеплеләр ғәйебенә күрә еңел яза менән – 4-5 йылға иркенән мәхрүм ителеү менән генә ҡотолдо. Бына ундайҙарға закон ҡатыраҡ булһын ине. Юғиһә, ултырып сыҡҡан әҙәм тағы ла зәһәрерәк буласаҡ бит.

Ә әрмегә барасаҡ егеттәргә нәсихәтемде полк командиры подполковник Никифоровтың һүҙҙәре аша еткерәм: «Егеттәр, һеҙҙе атай-әсәйегеҙ ил һаҡларға ебәргән, һеҙгә ышаныс белдергән. Еңел аҡыллылыҡ, уйламай эш итеү арҡаһында уларға ҡайғы килтермәгеҙ. Иҫегеҙҙән сығармағыҙ: өйҙә һеҙҙең иҫән-һау һәм үҙ ваҡытында ҡайтыуығыҙҙы көтәләр. Кемдеңдер баш-баштаҡлығы менән икенселәрҙең яҙмышы селпәрәмә килмәһен, әсәйҙәрегеҙҙең күҙ йәше түгелмәһен...»

Бөгөн әрме хеҙмәтенән нисек тә баш тартып, төрлө һылтауҙар менән ситләшеп ҡалырға тырышҡан егеттәрҙе һәм уларҙы ҡурсалап йөрөгән әсә-аталарҙы аңламайым. Беҙ ҙә атай-әсәйҙәребеҙҙең ғәзиз һәм аяулы балалары инек, әммә улар бер ҙә, ҡуй, әрмегә барма, юллайым, ебәрмәйем, тимәнеләр. Сөнки улдарының һалдат мәктәбен үтеп ҡайтыуы улар өсөн ҙур ғорурлыҡ булды һәм әрмегә бармағандар үҙҙәрен кәм хис итте.

Әле килеп, әрменән ҡайтыуыма 22 йыл ваҡыт үтеп китте. Шул йылдар эсендә юғары белемгә эйә булдым. Рәсәй Журналистар союзына индем. Мәктәп һәм һөнәрселек училищеһында балалар менән эшләп тә, байтаҡ маҡтауға лайыҡмын. 2002 йылда һөнәрселек училищелары араһында республикала «Йыл тәрбиәсеһе» исемен яуланым. 1999 йылда Сибай ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһындағы бәйгелә Гран-при яуланым. 2005 йылда Бәләбәй ҡалаһында үткән «Илһам шишмәләре» төбәк-ара шиғриәт бәйгеһендә лауреат булдым. Шөкөр, тигән көнөм бар. Был уңыштарымдың һәммәһендә лә миңә әрме хеҙмәтендә алынған һабаҡтарым ярҙам итмәй ҡалмағандыр, тием.

Әрме йылдары бөгөнгөләй күҙ алдымда. Сыҙамлыҡҡа, тормош ауырлыҡтары алдында бөгөлөп төшмәҫкә һынау йылдары булды улар. Нәҡ әрме хеҙмәте мине аҡты ҡаранан, яҡшыны ямандан айырырға өйрәтте. Бик күп нәмәгә күҙем асылып ҡайтты минең әрменән.

Дөрөҫ, тормош һынауҙары йылдары йөрәккә уңалмаҫ яралар ҙа һалды. Атайым Зәкирйән, ағайым Батырйән, еҙнәйем Риф нәҡ шул йылдарҙа йәшләй генә баҡый донъяға күстеләр.

Ә хеҙмәттәш дуҫтарым менән яйы сыҡҡан һайын осрашып, күрешеп торабыҙ. Зиннур Хәлимов, Вәғиз Аллаяровтар әле килеп ғаилә дуҫтарыбыҙға әүерелде. Ваҡытһыҙ фажиғәле рәүештә арабыҙҙан киткән Әхмәтйән Солтанғужинды ла телгә алмай ҡалғаныбыҙ юҡ.



**Мотал РӘМОВ.**

**(Аҙағы. Башы 35-се һанда).**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*



# ҺАЛДАТ ЛАҠАПТАРЫ ҺӘМ...

## Зәбихә инәй...

### Лейтенант погонлы капитан

Бер мәл беҙ хеҙмәт иткән дивизияла бер капитан командировканан ваҡытынан алдараҡ ҡайтып төшә. Таң менән өйөнә ҡайтып инеп, кителен ишек яндауына элеүе була, йоҡо бүлмәһенән ярым шәрә ҡатыны йүгереп килеп сыға ла:»Бар, срочно госпиталгә йүгереп барып, «скорый» саҡырт, йөрәгемә приступ булды!» - ти хәле бөтөп, йөрәген тотоп. Әле итеген сисеп өлгөрмәгән капитан былдай мәлдә юғалып ҡалмай, хәрбиҙәрсә хәрәкәт итә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, өйҙәрендә телефон да булмай. Ул ярым ҡараңғыла әле генә сисеп элгән кителен кире алып кейә лә, йәнфарманға госпиталгә йүгерә. Килгәс тә ыш-быш килеп дежурный фельдшерға ашығыс рәүештә хәбәр итә: “Ҡатынымдың йөрәгенә приступ булды, тиҙ генә өйөмә «скорый» ебәрә һалығыҙ!»

-Иптәш лейтенант, һеҙ үҙегеҙ медик бит. Ниңә ҡатынығыҙға үҙегеҙ генә ярҙам күрһәтмәйһегеҙ, - ти дежурный фельдшер тегенең петлицаһындағы медицина эмблемаларына күрһәтеп.

-Какой мин һеҙгә медик, какой лейтенант, - ти капитан үҙенең кителендәге погондарына, петлицаһына текәлеп.

Эштең ниҙә барғанын аңлап өлгөргән капитан, саҡ-саҡ йөрәгенә приступ булмай, капыл һикереп тороп, өйөнә ҡарай йүгерә. Ҡайтҡас, өйөндә ни булғаны хаҡындамы? Әйе, иң ҡыҙығы шунда шул: был хакта белһә, донъялағы өс кенә кеше беләләр, моғайын. Капитан, лейтенант һәм теге йөрәгенә приступ булған ҡатын.

### Бесәй – штаб начальнигы

Беҙҙең хәрби частың штаб начальнигы полковник Кот ине.

Бер мәл мин госпиталдә дежурҙа ултырғанымда телефон шылтыраны.

-Дежурный врач Фәләнов слушает, - тием трубкаға устав талабы буйынса.

Дивизия командиры генерал Захаров шылтырата икән. Тауышында хәүеф ноталары ла сағыла. Йөрәгемдә ус эсемә алып тыңлайым. Генерал һынлы генерал тигенгә генә шылтыратмаҫ бит инде...

-Хирургтар урынындамы? - ти теге.

-Так точно... Ни булған? - мин әйтәм.

-Кот с балкона упал, - ти генерал, - хирургтар ярҙам итә алмаҫмы икән?

-Хәҙер иптәш генерал, - тип адресын һорашып алып, тиҙ генә реанимация һәм хирург бригадаларын йый-ҙым да, күрһәткән адрес буйынса ебәрә һалдым.

-Штаб начальнигы балкондан ҡолап төшкән, тиҙерәк бара һалығыҙ. Һуңлаһағыҙ, баштан һыйпамаҫтар, - тием.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң бригадабыҙҙағы егеттәр көлешә-көлешә генералдың бохар бесәйен носилкаға һалып госпиталгә алып киләләр.

### Зыянлы шуҡлыҡ

Беҙҙә Еременко фамилиялы бик шуҡ бер майор бар ине. Шуҡлығы менән күптәрҙе төп башына ултырта, ҡайһы саҡ үҙе лә уңайһыҙ хәлгә ҡала торғайны. Шулай бер заман, офицерҙар эш хаҡы алған көндә эштән автобус менән ҡайтып, туҡталышта төшә башлаған майор кеҫәһенән бер пачка йөҙләктәрҙе кеше күрмәгәндә генә ергә ташлай ҙа, табып алған кеше булып һөрән һала: «Кем аҡсаһын юғалтты?».

Офицерҙар барыһы ла «минеке түгел» тигән ишара менән яурынын һелкетә.

Әммә бер көн иренең табышы хаҡында ҡатыны Оксана ишетеп ҡала ла: “Һине бер пачка йөҙлөк тапҡанһың, тип һөйләйҙәр, ҡайҙа тапҡан аҡсаң?» - тип бәйләнә башлай. Ҡатынынан нисек ҡотолорға белмәгән майор теге туҡталыш янына шаһиттар алып килеп, көскә ҡатынын ышандыра ала. Үҙенең шуҡлығына үҙе ҡаба Еременко.

### Төнгө дежурҙа

Йәш офицерҙар дөйөм ятағында ғаиләләре лә бар ине. Лейтенант Спиридонов кискә ҡарай ҡатыны менән хушлашып, портупеяһын, кобураһын тағып, итектәрен ялтыратып ала ла, төнгә дежурға китә. Китә лә... ике бүлмә аша ғына йәшәгән, ысынлап та, дежурҙа булған өлкән лейтенанттың ҡатынына «ҡунаҡҡа» инә һәм шунда ҡунырға ҡала.

Ярайһы ғына төшөрөп, «ҡунаҡ» булып алған Спиридонов төнгө сәғәт өстәрҙә коридорҙағы бәҙрәфкә сыға. Әлбиттә, эске кейемдә генә була ул. Йомошон йомошлағас, әле йоҡоһо ла асылып бөтмәгән лейтенантыбыҙ элекке ғәҙәте буйынса үҙе йәшәгән бүлмәгә ишек туҡылдата һәм ярым шәрә «дежурный по части»нә үҙенең хәләл ефете ишек асып ҡаршы ала.

### Ауыр тупрағың...

Күрше ауылыбыҙҙа Зәбихә тигән оло ғына йәштәрҙәге бер инәй бар ине. Уның Кәлимулла исемле бер күршеһе бик ҡаты ауырып ятканын ишеткәс, боронғо ғөрөф-ғәҙәт буйынса инәй күршеһенә инә. Бер аҙ хәл-әхүәл һорашҡас, Зәбихә инәй ауырыу менән хушлашып сыға башлай.

- Ярай, Кәлимулла күршем, хуш-һау булып тор, ауыр тупрағың еңел булһын...

Бер нисә көндән һуң Кәлимулла ағай, ысынлап та, донъя ҡуя. Ләкин инәйебеҙҙең «яҡшы» теләге уны ни өсөндөр бер ҙә йыуата алмаған тип һөйләйҙәр.

### Ҡыуаныс

Инәйебеҙҙең улы килене менән һарай тирәһендә икәүләшеп ниҙер эшләп йөрөйҙәр икән. Бер мәл инәйҙең ейәне йөҙә ағарып өйгә йүгереп килеп ингән дә:

-Ҡартәсәй, әсәйемдең башына һайғау төштө, - тип һөрәнләгән.

-Ярай әле, Әптеләхәтемдең башына төшмәгән, - тип үҙ-үҙен тынысландырып ҡуйған Зәбихә инәй.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКӨВ.**

Сибай ҡалаһы.

# УЙҘАР ХИС БУЛЫП ЯНҒАНСЫ,

## Бер шиғыр булһын, тинем...



**Башҡорт дәүләт университетында уҡыу минең хыялым ине. Тәүҙәрәк үҙемде журналист буларак күҙ алдына килтерҙем. Һуңғараҡ әҙәбиәт йүнәлеше менән китергә уйлай башланым. Был юлға мине Ишембай районы Әхмәр урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Хәлимә Ҡотошова күндерҙе. Уның етәкселегендәге төрлө-төрлө әҙәби сараларҙа, түңәрәктәрҙә ҡатнашып, күңелдә әҙәбиәткә, шиғриәткә һөйөү нығынды. Әйткәндәй, үҙемдең тәүге шиғырҙарымды ул етәкләгән шиғри түңәрәктә ижад иттем. Был эштең нескәлектәрен шунда өйрәндем. Шунлыктан мин башҡорт филологияһы бүлегенә уҡырға инергә булдым.**

**XI синыфты көмөш миҙалға тамамланым. Шуға күрә, әңгәмәләшеү нигеҙендә дөйөм конкурстан тыш уҡырға индем. Инеүе еңел булды, тиһәм, дөрөҫ булмаҫ. Сөнки донъяла бер нәмә лә еңел генә бирелмәй. Ошо осорҙа ғына мин үҙем кеүек бик күп үҫмерҙәр, фекерҙәштәр менән танышып алдым. Университетта улар бик күп икән! Сөнки мин ижади берлекте хуп күрәм. Башкаларҙың һинең әҫәреңә биргән баһаһы, тәнҡите ижади үҫешкә юл ҡуя. БДУ-ла мин, һис шикһеҙ, мәҙәни-әҙәби сараларҙа әүҙем ҡатнашасаҡмын.**

**Һеҙҙең иғтибарға һуңғы арала яҙған бер нисә шиғырымды тәҡдим итәм.**

### ЯТАҠТА ТЫУҒАН УЙҘАР

Таң ата ла, һай, кис була
Беҙҙең дөйөм ятаҡта.
Шиғыр яҙмай мөмкинме һуң
Бына шундай ваҡытта?

Шиғыр яҙам, ул бит минең
Күңелемә дәрт бирә.
Илһам менән тормош тулып,
Йөрәккә елкендерә.

Ни тураһында яҙаммы?
Уйҙар күп әле минең.
Улар хис булып янғанса,
Бер шиғыр булһын, тинем.

Уйҙар хис булып янғансы,
Бер шиғыр булһын, тинем.
Тормоштар тыныс булһасы,
Донъялар торһон имен.

Бына шулай иртә-кисен
Уйҙар тыуа ятаҡта.
Таралһынсы ошо уйҙар
Алыҫтарҙан - алыҫҡа!

### ХУШ!

Бөгөн киләсәккә аяҡ баҫтым,
Гиҙермен мин оло тормошто.
Әйтерһең дә миңә тапшырҙылар
Әле яҙылмаған яҙмышты.

Ҡуй, уйҙарым, ҡыҙғанығыҙ мине,
Әле генә үтте баласаҡ.
Саф миҙгелдән мәхрүм булдым мин дә,
Баласаҡ тик уйҙа ҡаласаҡ.

Ә шулай ҙа донъя ҡуласа бит,
Ғәмһеҙ сағым кире әйләнмәҫме?
Мин бер малай, ялан аяҡ ҡына.
Юҡ, башкаса уйнап йөрөмәҫмен.

Ғүмер шулай үтә, үтә, үтә...
Үткәндәрҙе һағынып барлау - баш.
Киң офоҡҡа илтә тормош юлым,
Ғәзиз сағым - баласағым, хуш!

### АУЫЛЫМ

Беҙҙең ауыл урынлашҡан Торатау итәгендә,
Йылғаһы ла бар, урман да - һәммәһе етә генә.

Шул ауылда тыуып үҫтем, һыу индем йылғаһында,
Сағылынан еләк өҙҙөм, татыным барыһын да.

Ауылдаштар тир түгәләр халыҡ өсөн, ил өсөн.
Киләсәккә юл ярырға һис йәлләмәҫ ир көсөн.

Мин дә шулай юл ярамын, ауылым бар үрнәккә.
Тапалған юлдан барырға, минеңсә, һис кәрәкмәй.
Ауылымдың урамдары, урау-урау юлдары,
Минең ғүмерем дә шулай - үтер юлда йылдарым.

### ИМАН

*Иң әүүәл кәрәк нәмә - иман, тигән,*
*Әхирәт эштәренә иман, тиген.*
*"Хоҙай, кисер!" - тигән менән эш бөтмәйҙер,*
*"Иман шарты"н өйрәнмәһә - Иван, тиген.*
**Аҡмулла.**

Тиҫтерҙәрем дөрөҫ юлдан яҙған,
Ҡулдарында һыра, "төтөнө".
Изге рухлы, ихлас ниәттәге
Саф егеттәр, ҡыҙҙар бөттөмө?

Бәғзеләргә иман - һыуһыҙ ҡомған...
Иман менән тәүфиҡ килә бит.
Яҙмыш яҙғандарҙан уҙмыш булмаҫ,
Быны һәммәһе лә белә бит.

Бәғзеләргә иман - төпһеҙ упҡын...
Төпһеҙ упҡын - ул бит наҙанлыҡ.
Ут-ялҡындан алыҫ булған кеүек,
Шул бәләнән алыҫ булайыҡ -
Әҙәпһеҙлек ҡоло булмайыҡ!

### КЕШЕ БУЛАМ

Бала саҡта уҡытыусым
Һорау бирҙе үҙемә:
"Үҫкәс, һин кем булаһың?" - тип,
Текләп бакты күҙемә.

Оҙаҡ уйлап тормайынса,
Ғорур сөйҙөм башымды.
Яуаплап "Кеше булам", тип,
Баҙаттым һораусымды.

Үҫә төшкәс, Хоҙай ҡушһа,
(Камил быға иманым).
Мотлаҡ Кеше буласаҡмын,
Шулай булһынсы! Амин!

**Булат КӘРИМОВ.**

ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРЕНӘН

# Тәмәке баҙарында... ҡайһы бер тыйыуҙар

● Тәмәкене пропагандалаусы рекламаларға ҡарата төрлө саралар күрелә. Ә 2007 йылдың беренсе ғинуарынан спиртлы эсемлектәрҙе техник ҡулланмалар ярҙамында рекламалау ҡәтғи тыйылды. Быны өсөн 4000 меңдән 500 000 меңгә тиклем штраф ҡаралған.

Ҡабына һатыу хаҡы, эшләнгән айы, йылы яҙылмаған фильтрлы тәмәке эшләп сығарыу һәм импортлау 2007 йылдың беренсе ғинуарынан Рәсәй Федерацияһы территорияһында тыйыла. Шул уҡ ҡағиҙәгә 1 июлдән фильтрһыҙ тәмәке етештереүсе предприятиелар ҙа буйһонасаҡ.

● Яңы уҡыу йылында студенттарҙы тағы ла бер күңелле яңылыҡ көтә: юғары уҡыу йорттарында, ПТУ-ла, техникумда уҡыусыларҙың стипендияһы бер ярым тапҡырға артты. Был, әлбиттә, ҡыуанысл яңылыҡ, ләкин беренсе стипендия алғанға тиклем генә. Сөнки арттырылған стипендия ла йәшәү өсөн етмәй әле. Шуға күрә, фән тауына үрләүселәргә, элекке кеүек, атай-әсәй елкәһендә ятырға йә үҙҙәренә эшләргә тура киләсәк.

● Беренсе сентябргә тиклем техникумдарҙа стипендия 210 һум булһа, хәҙер ни бары 315 һум тәшкил итә. Юғары уҡыу йорттарында иһә стипендия 600 һумдан 900 һумға ҡәҙәр артты. Был аҡса менән ай буйына йәшәп ҡара. Ҡайһы бер сағыштырмаса хаҡтар арзан булған төбәктәрҙә лә йәшәү минимумы ике тапҡырға юғарыраҡ, ә баш ҡала тураһында әйтеп тә тораһы түгел.

● Әлбиттә, студенттар бер ҡасан да етеш йәшәмәне. Ләкин сирек быуат элек ҡайһы бер студенттар атай-әсәй ярҙамынан тыш та йәшәй ала ине. Ул саҡта юғары уҡыу йорттарының стипендияһы уртаса эш хаҡының өстән бер өлөшөн тәшкил итә ине (120 һумдан 45 һум). Ул саҡта бер һумға төшкө аш, ә илле тингә иртәнге аш ашарға мөмкин ине. Бөгөнгө көндә уртаса эш хаҡы 12-13 мең һум. Ә юғары уҡыу йорттарында стипендия күләме быны ете-һигеҙ, техникум, ПТУ-ларҙа ни бары ике-өс процентын ғына тәшкил итәсәк. Был сумма нимәгә иҫәпләнгәне лә билдәһеҙ. 315 һумға утыҙ буханка икмәк йә ун ҡап һөт алырға мөмкин. Хәҙерге көндә илебеҙ ҡытлыҡ кисергән юғары квалификациялы хеҙмәткәрҙәрҙе ата-әсәһе үҙ елкәһендә әҙерләргә тейеш була.

● Шуны ла әйтергә кәрәк, беренсе сентябрҙән алып квалификацияһы булмаған эшселәрҙең, бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең һәм беренсе разрядлы хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡтары күтәрелде. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә хеҙмәт итеүсе санитар һәм лаборанттарҙы ла эш хаҡы күтәрелеү ҡыуанысы көтә. Финанс министрлығы иҫәпләүенсә, һәр кеше биш мең һумдан юғарыраҡ эш хаҡы аласаҡ.

● 31 август Лондонда принцесса Дианаың фажиғәле һәләк булыуына ун йыл тулыуын иҫкә алдылар. Урындағы гвардеецтар сиркәү ваҡыты менән төшкө ун икелә Букингем һарайы янындағы Веллингтон казармаһында иҫкә алыу үткәрҙе. Был сараны Дианаың улдары принцтар Уильям һәм Гарри, шулай уҡ уның ағаһы граф Спенсер ойоштorҙо. Иҫкә алыуҙа Бөйөк Британия королеваһы Елизавета икенсе, Дианаың элекке ире принц Чарльз, премьер-министр Гордон Браун, принцесса менән хеҙмәттәшлек итеүсе Тони Блэр һәм Джон Мейджор, принцесса үҙе тере саҡта етәкләгән 100 хәйриә йәмғиәте ҡатнашты. Чарльздың хәҙерге ҡатыны герцогиня Корнуэльская иҫкә алыуҙа ҡатнашыуҙан баш тартты.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЯҠШЫ УҠ ӘМӘЛ ТҮГЕЛ,

## әммә йод селтәре ярҙам итә

**Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла ауыртҡан еренә йод селтәре эшләмәгән кеше юҡтыр. Арҡабыҙ ауыртамы, бәрелеүҙән берәй еребеҙ күгәрәме, йәки укол аша алған дарыу организмға таралмаймы - шул урынға мотлаҡ йодтан селтәр яһайбыҙ. Ләкин уның файҙаһы бармы? Ғөмүмән, йод селтәре эшләү кәрәкме?**

Билдәле булыуынса, йод бынан 200 йыл элек Францияла, йәғни Наполеон императорлыҡ иткән заманда, дарының яңы технологияһын эҙләү барышында табыла. Ул замандарҙа дарыуҙар күп булмау сәбәпле, Европаның йәш медицинаһы һыҙлауыҡтарҙы һәм сиҡандарҙы бөтөрөү маҡсатында сирле урынға йодтан селтәр һыҙыу ысулын ҡуллана башлай. Ә һалҡын тейеүҙән барлыҡҡа килгән сирҙәргә һәм сәсәк ауырыуына ҡаршы берәр тамсы йод һалып әҙерләнгән спирт төнәтмәһе эсереп, ә сәсәк өҫтөнә селтәр яһап, көрәшергә өйрәнгәндәр.

Был яңы дарыуҙың бөтөн сирҙәргә ҡаршы торор көсө сикһеҙ булыуына ышанған табиптар ауырыуға йод быуы һулатып, туберкулезды дауаларға ла маташҡандар. Һөҙөмтә трагедия менән тамамлана. Йод быуын һулаған сирлеләр үпкәләре шешенеүҙән ғазапланып үлә. Шулай итеп, йодтың микроорганизмдар тыуҙырған сирҙәрҙе еңеп кенә ҡалмай, ә кеше тәненең күҙәнәктәрен дә "еңеүе" асыҡлана һәм ҡағиҙә булараҡ, йодтың даны ла юғарынан түбәнгә тәгәрәй.

Хирургтар уны яңынан XIX быуаттың икенсе яртыһында ғына иҫкә төшөрә һәм тағы ла был дарыу тирәләй шау-шыу ҡуба. Ни өсөн тигәндә, йодты хирургияла ҡулланыу, эренләүҙән барлыҡҡа килгән өҙлөгөүҙәрҙе 20 процентҡа кәметә. Шул мәлдән бәләкәй яра ситтәрен, төрлө шешек һәм сиҡандарҙы йод менән өй шарттарында эшкәртергә лә мөмкин, тигән һығымтаға киләләр. Шулай уҡ йодты 5 тамсынан артыҡ эсергә ҡушмайҙар.

Шул дәүерҙә йод селтәре яһауҙы ла иҫкә төшөрәләр. Ләкин Рәсәйҙә йодтан селтәр яһауҙы XX быуат башында Петербургта йәшәүсе билдәле табип И.С. Колбасенко арҡаһында ҡулланырға өйрәнәләр. Ул шулай уҡ йод менән "эстән дауалау", йәғни дарыуҙы һөткә, крахмалға ("күк йод") ҡушып эсеү ысулын уйлап сығара. Әйткәндәй, уның терапияһы, бөгөнгөсә әйткәндә, альтернатив медицина төркөмөнә эләгә. Ә рәсми медицина йод төнәтмәһен фәҡәт дезинфекциялаусы ҡулланма, тип иҫәпләне һәм һаман да шулай иҫәпләй.

### Йод селтәре яһау кәрәкме?

Был һ о р а у кешеләрҙе тулҡынландырмай ҡалмай. Бөгөн дарыуханалар прилавкаһында ниндәй генә дарыуҙар емерелеп ятмаһын, кешеләр барыбер бер-бер хәлгә тарыһа, мотлаҡ йодка үрелә. Шул тиклем яҡшы ярҙам итәме? Йод бик ныҡ ярҙам итә, тиеүселәр, моғайын, үтә тәьҫирләнеүсән кешеләрҙер. Улар йодтан шифа көтөп, үҙ-үҙҙәрен ышандырғас, ярҙам килә. Һоро-ҡара быяла эсендәге был шыйыҡса, ысынлап та, тылсымлы матдәме?

### Белгестәр нимә ти?

Ғәҙәттә, күгәргән урынға, арҡаға, быуындарға йәки инъекциянан һуң ауыртыу барлыҡҡа килгән урынға йод селтәре яһайҙар. Ә теләһә ниндәй шешеү, күгәреү этаплап үҫә. Ауыртҡан урын тәүҙә ҡыҙара, шешә, күгәрә һәм күгәреү йәйлап төҫһеҙләнә барып бөтә. Травма алған урын ҡан йүгереү һөҙөмтәһендә ҡыҙара, ул үҙе менән инфекцияға ҡаршы көрәшеү өсөн кәрәкле күҙәнәктәрҙе ҡуҙғыта. Ә травма урынының шешеүе көрәш барған был урынға организмдағы шыйыҡса йыйылыуынан барлыҡҡа килә. Быны "һуғыш яланын" үҙенсәлекле бер таҙартыу, тип атарға мөмкин, сөнки шыйыҡса травма һәм инфекция менән "көрәш" һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән токсиндарҙы шыйығайта һәм организмдан сығарып ташлауҙы еңеләйтә. Ә күгәреү "һуғыш"тан һуңғы ҡалдыҡтарҙың организмдан сығарып ташлана торған ҡан ағышына ҡушылыуынан төҫһеҙләнә һәм йәйлап бөтә. Шулай итеп, әгәр йод селтәре кәрәк, тиһәгеҙ, уны һуңғы стадияла, йәғни күгәреү төҫһеҙләнә башлағас ҡына яһарға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, йод ҡайһы ергә һөртәләр, шул тапҡырҙағы ҡан тамырҙарын киңәйтеү үҙенсәлегенә эйә. Һөҙөмтәлә, ҡан әйләнеше лә көсәйә. Күгәреү төҫһеҙләнә башлағанда йодтан селтәр яһау токсиндарҙың сығыуын тиҙләтә һәм күгәреү ҙә тиҙ уңа. Ә йод селтәрен травма алғас та яһау шешеүҙе һәм һыҙлауҙы көсәйтә генә.

Ҡайһы берәүҙәр травма алһа, шул урынға ҡыҙҙыра торған май һөртөргә ярата. Был да дөрөҫ түгел, сөнки ҡыҙҙырыусы майҙар ҡан йөрөшөн йодҡа ҡарағанда ла көслөрәк тиҙләтә. Ғөмүмән, йодты ла, ҡыҙҙырыусы майҙарҙы ла дөрөҫ ҡулланмағанда, икеһе лә кире йоғонто яһап, сирҙе ярһыта ғына. Шулай ҙа бындай осраҡта иң яҡшыһы - вена ҡан ағышын көсәйтеү өсөн күптән билдәле троксивазин тигән майҙы файҙаланыу.

Арҡала ауыртыуҙар барлыҡҡа килһә, ҡул аҫтында бер дарыу ҙа булмағанда ғына йод селтәре яһарға мөмкин. Тик ни өсөн йодты селтәрләп һөртөргә һуң? Уның мәғәнәһе шунан ғибәрәт: әгәр йодты тәнгә тигеҙ һөртһәң, тирене яндырырға мөмкин. Ә селтәрләп һөртөү был бәләнән ҡотҡара.

### Боронғо һәм файҙалы ысул

Йод ҡан әйләнешен көйләй. Ләкин уның тап ошо үҙенсәлеге йәрәхәтте ярһытыуы мөмкин. Шуға күрә, травма алған урынға дозаһын көсәйтә барып, 72 сәғәт буйы һалҡын ҡуйырға кәрәк. Иң яҡшыһы, таҫтамалға төрөп боҙ һалыу. Боҙҙо 10-15 минут үткәс алып, йәрәхәтте ярты сәғәт тыныс тотҡандан һуң, процедураны яңынан ҡабатлау мөһим.

Әгәр ҡул аҫтында боҙ булмаһа, полиэтиленға һалып, һыуытҡыста туңдырылған теләһә ҡайһы аҙыҡты ҡулланырға мөмкин. Тик уны ла йоҡа таҫтамалға төрөп һалырға кәрәк. Кемдең һыуытҡысы юҡ, һалҡын һыуҙы, һис юғында тимер аҡсаны ҡулланырға мөмкин, сөнки ҡан тамырҙарын ҡыҫыу мөһим. Әлбиттә, бөгөн йәрәхәттәрҙе дауалау өсөн дарыуҙар күп, шулай ҙа кемдер йод селтәрен хуп күрә икән, уны ике-өс көн үткәс кенә яһаһын.

Әгәр ҙә травманан түгел, ә күп эшләүҙән быуындар һыҙлаһа йәки арҡа ауыртһа, йод селтәре яһағыҙ. Ул һыҙлауҙы баҫа һәм тәнде йылыта. Йод ябай ғына элемент түгел. Ә организмдағы күп процестарҙы, шул иҫәптән матдәләр алмашыныуын да көйләгән ҡалҡан биҙе йодты ҡандан тиҙ һурып ала. Ә күҙәнәктәрҙең энергетик ресурсын файҙаланыуы ҡалҡан биҙе эшмәкәрлегенән тора һәм был процеста йод ҙур роль уйнай. Ул ҡыҫҡаса ғына Т3 һәм Т4 тип аталған айырым бер гормондарҙы эшкәртеп сығарыуҙа ҡатнаша. Спортсыларҙың ярышҡа әҙерлеген билдәләү өсөн табиптар тап ошо гормондарҙың күләменә тест үткәрә. Мәҫәлән, футболистарҙың организмында был гормон күп икән, улар яҡшы уйнаясаҡ, ә аҙ булһа - йод селтәре яһайҙар. Был, әлбиттә, боронғо ысул, ләкин допинг түгел, ә энергия ресурсына идара итеүсе ҡалҡан биҙенә бәләкәй генә ярҙам. Ул йодты тиҙ үҙләштерә.

**Рима ҒӘББӘСОВА әҙерләне.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Йодты күп файҙаланырға ярамай. Әгәр физик ауыр эштә эшләһәгеҙ, ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа үксәгә йод селтәре яһау файҙалы. Ә инде йод селтәрен йоҡлар алдынан табанға яһаһағыҙ, төндө йоҡлай алмай үткәрәсәкһегеҙ**...

ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР

# Һаулыҡ - ҙур байлыҡ

Йәш саҡта һәр кем һөйкөмлө.
Ҡартлыҡ - аҡһаҡаллыҡ һөйкөмө.

* * *

Мунса тәнгә шифа,
Йылы һүҙ йәнгә шифа.

* * *

Эштән кеше үлмәй,
Эшлектән сығыуҙан үлә.

* * *

Эшләп ашағандың ашы тәмле.
Матур ғүмер һөргәндең эше йәмле.

* * *

Кешегә бер генә бирелгән ғүмерҙе
берәгәйле итеп йәшәргә ине.
Һәләтеңә яҡын һөнәрҙәрҙе
бына тигән итеп эшләргә ине.

* * *

Уңған нисек итеп ваҡыт еткерергә белмәй,
Ялҡау нисек итеп ваҡыт үткәрергә белмәй.

* * *

Әҙ йоҡо - тәмле йоҡо,
Күп йоҡо - ғәмле йоҡо.

* * *

Тәмле йоҡо - тән аҙығы,
Күп йоҡо - йән ҡаҙығы.

* * *

Яҡшы һүҙ дауалай,
Яман һүҙ яралай.

* * *

Малды табып була,
Һаулыҡты табып булмай.

* * *

Ҡырҡта эш менән маҡтаналар,
Иллелә көс менән маҡтаналар,
Алтмышта аҡыл менән
маҡтаналар,

***✓ Башҡортостанда үрсетелгән аттарҙың башҡорт аттары менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ, сөнки мин күргән арғымаҡ уларға бер тамсы ла оҡшамаған ине.***



*УЙЛЫҒА – УЙ*

**"Киске Өфө"лә баҫылған "Атһыҙ башҡорт башҡорт түгел " исемле мәҡәләмә беренсе шаңдау булып гәзиттең 35-се һанында Әмир Ғүмәровтың "Ат тояғы тауышы" исемле сығышы баҫылып сыҡты. Мәҡәләмде яуапһыҙ ҡалдырмағаны өсөн уға рәхмәтлемен.**

# МИН КҮРГӘН АРҒЫМАҠТЫҢ...

## арҡы аяҡтары оҙон ине

Һүҙ юҡ, Әмир тарихи документтарға һәм шаһиттар күрһәтмәләренә таянып эш иткән, ә шулай ҙа уның яҙғандары менән тулыһынса килешеп етмәйем. Килешмәүемдең беренсе сәбәбе мин күргән арғымаҡҡа (ә мин уны күҙаллауымда ғына күреп ҡалманым, ә ысынбарлыкта телевизор аша ла күрҙем) ул һынландырған образдың бик үк тап килмәүе. Бында тарихи документтарҙы ла кеше яҙыуын иҫәптән сығарырға ярамай. Белеүегеҙсә, кешегә хаталаныу хас күренеш, әлбиттә, шулай уҡ минең дә хаталаныу мөмкинлегем бар. Ә шулай ҙа мин күргән арғымаҡтың башҡорт аттарының боҙолмайынса һаҡланған тоҡомо икәнлеге файҙаһына логик дәлилдәр килтереп ҡарайым. Әмир энциклопедияға таянып :"Арт һаны бер аҙ һалынҡы" ти, тимәк аттың арҡы аяҡтары бик үк оҙон булмаҫҡа тейеш. Ә мин күргән арғымаҡтың арт һаны ҡәҙимге аттарҙыҡына ҡарағанда күтәренке ине, әлбиттә, арҡы аяҡтары ла оҙон ине. Эш тап бына ошо арғымаҡты арғымаҡ иткән арҡы аяҡтарҙың оҙон булыуында шул. Ни өсөн тигәндә, ат сапҡан ваҡытта арҡы тояҡтары менән этәрелеп, кәүҙәһен алға ташлай, тимәк, арҡы аяҡтар ни тиклем оҙонораҡ булһа, ул кәүҙәһен шул тиклем оҙонораҡ арауыҡҡа ырғытасаҡ, ә был сабыу тиҙлеген арттырасаҡ. Тимәк, арғымаҡ өсөн арҡы аяҡтарҙың бейек булыуы мотлаҡ, ә был үҙ сиратында уның арт һанын бейегерәк яһаясаҡ.

Элекке арғымаҡтарҙың тап шундай булыуын атайым да таныҒайны. Ул үҙенең күпте хәтерләүе, һәр ваҡыт дөрөҫөн һөйләүе менән уны белеүсе кешеләр араһында билдәле ине. Хәтерем яңылышмаһа, атайымдың һөйләүенә ярашлы:"Аттарҙың бер бөртөгөн дә ҡалдырмай, йыйып алып киттеләр", тиеүе, Ә Ғүмәровтың:"Айғырҙарҙы алып китеп, ҡалған бейәләргә Үзбәкстан һәм Владимир йөк аты айғырҙарын ҡушыу һөҙөмтәһендә башҡорт аттары тоҡомон боҙғандар", тигән фаразына ҡаршы килә. Аналитика күҙлегенән ҡарағанда башҡорт аттарының тоҡомон боҙоу Совет хөкүмәтенә кәрәк булғанмы, тигән һорау тыуа. Шундай яугир, сыҙамлы арғымаҡтарҙың генын боҙоу ғына түгел, ә һаҡлап алып ҡалыу аҡылы булған кеше өсөн стратегик яҡтан дөрөҫөрәк булыр ине. Бындай аттар яҡын киләсәктә һуғыш була ҡалһа, тағы ла кәрәк булыуы ихтимал бит. Икенсенән, бында аттарҙың бит бер тарын тартып алып булһа ла, сәйәсмәндәр үҙҙәрен тынысландырыу сараһын күргәндәрҙер.



Иманым камил, әгәр ҙә 1992 йылдың август айында күрһәтелгән яңылыҡтар программаһы телевидение архивында һаҡланған булһа һәм мәҡәләлә хәтеремә алған, күпер өҫтөнән ҡара арғымаҡты етәкләп килеүсе малай күренешен эҙләп табыу мөмкинлеге булһа, саф башҡорт аттарының ниндәй булыуын тамашасыларға күрһәтергә булыр ине. Ҡыҙғаныска ҡаршы, минең быны эшләү мөмкинлегем юҡ. Бәлки бындай мөмкинлектәре булған, башҡорт арғымаҡтарының яҙмышына битараф булмаған кешеләр ҡыҫылышы ла юҡ, эш уларҙың шундай уҡ яугир холоҡло хужаларында. Уларҙың баш күтәреү ихтималлығын күҙ уңында тотоп, арғымаҡбыл эште башҡара алыр? Ул сағында миңә ул эпизодты таныу, әлбиттә, бер ни ҙә тормаҫ ине. Шулай уҡ урындағы халыҡтан һорашып ул аттарҙың килеп сығыу тарихын да белергә булыр ине. Кем белә, шул сағында бәхәстәр өсөн дә урын ҡалмаҫ ине, ә? Энциклопедия мәғлүмәте: "Башҡорт аты ҡырҡыу континенталь климат шарттарында йыл әйләнәһенә көтөүлектә йөрөү хәләтендә барлыҡҡа килгән", тип фаразлай. Бының менән дә килешмәйем, сөнки бала сағымда "Мәғлүмәт сығанағы" биргән мәғлүмәткә ярашлы, боронғо замандарҙа Уралды ҡырағай аттар төйәк иткән булған. Башҡорттар уларҙы ҡулға эйәләштерергә тырышып ҡараған, тик ирекле йәшәргә өйрәнгән ҡырағай аттар баш бирмәгән, кешеләрҙең бар тырышлыҡтарын юҡҡа сығарып ғорур рәүештә Урал буйҙарын гиҙеп йәшәүҙәрен дауам иткән. Шундай ғәйрәтле аттарҙы ҡулға эйәләштереүҙән тамам өмөттәрен өҙгәс, кешеләр икенсе сара уйлап тапҡан, ҡулға эйәләшкән ябай аттарҙы ҡырағай аттар өйөрөнә ҡушҡан. Тик шунан һуң ғына ҡан ҡатнашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡолондарҙы ҡулға эйәләштерә алғандар. Бына шулай барлыҡҡа килгән яугир холоҡло башҡорт арғымаҡтары. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡырағай аттарға туҡтауһыҙ һунар арҡаһында улар юҡҡа сыҡҡан, ә шулай ҙа кешеләр уларға ҡарап, ирек һөйөп йәшәргә өйрәнгән. Кем белә, башҡорттарҙың атһөйәр булыуы ла ата-бабаларының шул баш эймәҫ ғорур ҡырағай аттарға ҡарап һоҡланыуынан тамырланғандыр. Бәлки, башҡорт аттарының шул ҡырағай аттар тамырынан булыуын иҫбат итеү мөмкин түгелдер, ә шулай ҙа уйланырға урын бар.

Нисек кенә булмаһын, бөгөнгө көндә Башҡортостанда үрсетелгән аттарҙың башҡорт аттары менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ, сөнки мин күргән арғымаҡ уларға бер тамсы ла оҡшамаған ине, ә уның башҡорт атының боҙолмайынса һаҡланған тоҡомо булыуына шигем юҡ.

Бер аҙ ишәккә тартым Урта Азия алашаларын менеп, һабан туйҙарҙа "елдереүебеҙҙе" күрһәләр, ата-бабаларыбыҙ көлөрмө, әллә илар инеме икән?

**ӘҘҺӘМ.**

Етмештә йәш менән маҡтаналар,
Һикһәндә һуш менән хушһыналар,
Туҡһанда йүн юҡтан юҡһыналар.
Йөҙҙә кем белә лә кем юҡ.

* * *

Аҡса юғалтыу әллә ни түгел,
Ваҡыт юғалтыу - күпте юғалтыу,
Һаулыҡ юғалтыу - барыһын юғалтыу.
Һаулыҡ - байлыҡ
Аҡса - бер айлыҡ.

* * *

Әйберҙе һатып алып була,
Һаулыҡты һатып алып булмай.

* * *

Һау саҡта һаулыҡтың ҡәҙере юҡ,
Һаулығың киткәс, үҙеңдең ҡәҙерең юҡ.

* * *

Һау башта - һау аҡыл,
Ауырыу башта - ыу аҡыл.

* * *

Шәкәр ашауға тәмле,
Шәкәр ауырыуы тәмһеҙ.

* * *

Бәғзе берәү ауырыуын иркәләр,
Тик ауырыуы ғына үҙен иркәләмәҫ.

* * *

Ауырыуға дөрөҫ диагноз,
Һаулығыңа иң беренсе аҙым.

* * *

Кеше ауырыуҙарын күреп,
Үҙ һаулығыңды самаларһың.

* * *

Кешегә бирәһең юҡ - шатлыҡ,
Кешенән алаһың юҡ - һөйөнөс,
Ауырыу-хәстәң юҡ - оло бәхет.

* * *

Ауырыуҙың яҡшыһы - яманы юҡ.
Уның китмәҫкә килгәне яман.

* * *

Ауырыу-хәстәгә түҙеп була,
Үлеменә түҙеп булмай.

* * *

Ҡарт кеше сирләһә, балаға әйләнә,
Өҙләкһеҙ ауырыһа, бәләгә әйләнә.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# Һәр саҡ хыяллан

Биш йәшлек ҡыҙыҡай әсәһе янына йүгереп килә лә уны уятып: "Әсәй, үҫкәс һин кем булырға хыялланаһың?", тип һорай. Әсә ҡыҙы яңы уйын уйлап тапҡандыр, тип уйлай һәм:

- Әсәй булырмын, тип уйлайым,- тигән.

- Һин әсәй була алмаясаҡһың, сөнки әсәйһең бит инде,- тип ҡаршы төшә ҡыҙыҡай. - Кем булғың килә?

- Ярай, һинеңсә булһын, уҡытыусы буласаҡмын,- ти әсә.

- Дөрөҫ түгел. Һин былай ҙа уҡытыусы.

-Ҡыҙым, ғәфү ит мине, нимә тип яуап ҡайтарырға ла белмәйем.

- Киләсәктә кем булырға теләүеңде генә әйт. Һин кемдер була алаһың даһа? - тип ныҡыша бала.

Һуңғы һорауҙан әсә барыһын да аңлай. Ләкин ҡапыл башына килгән был фекерҙән шаңҡып, балаһына ни тип яуап бирә алмай. Әллә ни әһәмиәтле булмаған һөйләшеү уны ҡыҙы алдында үҙен киләсәктә лә кемдер була алырҙай кеше итеп күрһәтә ләһа. Ысынлап та, ул тормошонда тағы ниндәйҙер баҫҡыс яулай ала түгелме? Ҡатын өсөн ғәҙәти булған көндәлек ығы-зығы, ике баланы ҡарау, эшкә йүгереү, ғаиләне хәстәрләү - барыһы ла юҡҡа сыға. Ҡыҙы уның һаман да хыял йөрөтә алырына һәм киләсәге лә аныҡ ҡына билдәле булмауына ышана. Ул һаман да үҫергә тейеш. Киләсәктә эшләйһе эштәре лә байтаҡ икән дә.

Кем булырға теләү һәр кеше өсөн иң мөһим һорау. Кемдеңдер: "Был мөмкин түгел",- тиеүенә ҡолаҡ һалма. Был һүҙҙе тағы әллә нисәмә кешенең әйтеүе бар. Тик уны бер генә кеше - үҙең әйтмә. Бер ваҡытта ла "Эй, үтте инде был ғүмер!", тип тормоштан төңөлмә. Әгәр хыялыңды тормошҡа ашырырға теләмәһәң, уны һинең өсөн бер кем дә эшләмәйәсәк. Ҡай берәүҙәр: "Әле яҡты хыялдар ҡороп ултырыр ваҡыт түгел, мәле еткәс, эшләрмен әле", тиергә ярата. Шуны иҫтә тот: яңы эш башлар өсөн бер ваҡытта ла идеаль мәл булмай. Уны көтөп, пландарыңды кисектергән һайын, хыялдарыңдан да алыҫлашасаҡһың. Шуның өсөн рух күтәренкелеген юғалтма. Кеше нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, хыялдарын ғәмәлгә ашырырға ынтылырға тейеш. Шул сағында ул тормоштоң быҒаса күҙ алдыңа ла килтермәгән яҡтарын асасаҡ. Хатта артабан йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ һымаҡ тойолорҙай фажиғәләргә юлыҡһаң да рухыңды һындырма. Фажиғәләрҙә лә киләсәккә өмөт уятырҙай көс йәшеренеүен табырға өйрән.

**Бодо ШЕФЕР.**

**15.00 Новости (на русск. яз.).**
**15.15 "Законы привлекательности". Комедия. США, 2004 г.**
**16.50 "Афарин".**
**17.30 "Тарзан". Молодежный сериал.**
**17.55 "Страна троллей". Мультсер.**
**18.30 "Куласа".**
**19.00 Новости (на башк. яз.).**
**19.30 "Йадкар".**
**20.15 "Сэнгелдэк".**
**20.30 "Здорово".**
**21.00 "Формула успеха".**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Автоклуб".**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**22.50 "Побег из Шоушенка". США.**
**По окончании: погода.**

## НТВ-4 (Орбита)

6.00 "Сегодня утром".
9.00 "Наше все!"
10.00, 13.00, 16.00 Сегодня.
10.20 "Особо опасен!"
11.00 "Таксистка-2". 1-я и 2-я серии. Комедийный сериал. Россия, 2005 г.
13.30 "Бешеная". 7-я серия. Остросюжетный сериал.
14.30 "Эра Стрельца". 7-я серия. Детектив.
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие".
16.30 "Возвращение Мухтара-2". "Загадка русского пейзажа", "Мобильный лохотрон". Детективный сериал.
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие".
19.00 Сегодня.
19.40 "Бешеная". 8-я серия. Остросюжетный сериал.
20.40 "Эра Стрельца". 8-я серия. Детектив.
21.45 "Опера. Хроники убойного отдела". "Автокоп". 2-я часть.
22.45 Сегодня.
23.10 "Бальзаковский возраст, или Все мужики сво...". 8-я серия. Комедийная мелодрама.
00.15 "Кабаре "Сто звезд". Шоу Бобы Грека.
01.20 "Наш Футбол" на НТВ".
02.30 "Ядовитый плющ-2". Детектив. США, 1995 г.
04.15 "Криминальная Россия".
04.45 "Аэропорт". Мелодр. сериал.
05.35 "Альф". Мультсериал.

## ТВ-Центр

6.00 "Настроение".
8.30 События.
8.50 "Петровка, 38".
9.05 "История государства Российского".
9.10 Нина Ургант и Борис Токарев в фильме "Вступление".
11.10 "История государства Российского".
11.15 "Петровка, 38".
11.30 События.
11.45 В центре внимания. "Бойцы рекламного фронта".
12.20 "Одно дело на двоих". Телесериал.
13.30"Дело было в Гавриловке". Телесер.
14.30 События.
14.45 "Марш-бросок".
15.15 "Репортер" с Михаилом Дегтярем".
15.30 "А зори здесь тихие..." Телесериал.
16.30 Новое "Времечко".
17.30 События.
17.55 "Деловая Москва".
18.15 "Спроси у мэра".
18.45 "Моя Уфа".
18.50 "Завтрак на завтра".
19.00 "Уфимское время". Итоги дня.
19.20 "Приемная на колесах".
19.30 "Десятка лучших".
19.35 "Здоровые новости".
19.40 "Завтрак на завтра".
19.50 "История государства Российского".
19.55 "Раскольников". Фильм из цикла "Доказательства вины".
20.30 События.
20.55 "Дело было в Гавриловке". Телесериал.
21.50 "А зори здесь тихие..." Телесериал.
22.50 "Ничего личного". Закон Божий или история религии?
23.45 События.
00.10 "Петровка, 38".
00.25 Фанни Ардан в фильме Франко Дзеффирелли "Каллас навсегда".
02.35 "Одно дело на двоих". Телесериал.
03.35 "Вот так тигр!" Мультфильм.
03.45 "Свет в конце тоннеля". Художественный фильм.
05.15 "Улица твоей судьбы". Засекреченный город.

# ПЯТНИЦА, 14 сентября

## Первый канал

5.00 "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Малахов+".
10.30 "Модный приговор". Ток-шоу о моде и стиле.
11.20 "Контрольная закупка".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Агент национальной безопасности". "Сделка". Детективный сериал.
13.20 "Детективы".
14.00 Другие новости. Новости без политики.
14.30 "Фабрика звезд" дома".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Лолита. Без комплексов". Ток-шоу.
16.20 "Понять. Простить".
17.00 "Федеральный судья". Судебное шоу.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым.
19.00 "Поле чудес". Телеигра.
20.00 "Татьянин день". 131-я серия. Мелодраматический сериал.
21.00 Время.
21.25 Юбилейный концерт Иосифа Кобзона.
00.20 "Фабрика звезд" дома".
00.50 "Несколько хороших парней". Драма. США, 1992 г.
03.30 "Миллионы Брустера". Комедия. США, 1985 г.
05.20 "Битва за Галактику". Фантастический сериал.

## БТВ-РТР

5.00, 5.52, 6.22, 6.52, 7.22, 7.53 "Доброе утро, Россия!"
5.45, 6.15, 6.45, 7.15, 7.45 "Местное время. Вести - Башкортостан".
8.00 "Мой серебряный шар". Актриса Вера Марецкая.
8.55 "Мусульмане".
9.05 "Возвращение Турецкого". 15-я и 16-я, заключительная, серии. Криминальный сериал.
10.45 "Вести. Дежурная часть".
11.00, 14.00 Вести.
11.30, 13.40 "Вести - Башкортостан".
11.50 "Суд идет".
Телеканал для детей и юношества "Бибигон"
12.50 "Бэтмен". Мультсериал.
13.15 "Рэдволл". Мультсериал.
14.10 "Своя команда". "Военная хитрость". 10-я серия. Сериал для подростков.
14.40 "Сразись с нацией".
15.10 "Игра воображения".
15.40 "Мачеха". 10-я серия.
16.30 "Кулагин и партнеры". Детективный сериал.
17.00 Вести.
17.20 "Вести - ПФО.
17.40 "Ангел-хранитель".
18.40 "Держи меня крепче". 5-я серия.
19.40 "Вести - Башкортостан".
20.00 Вести.
20.15 "Пятая студия" с Сергеем Брилевым.
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.05 Юбилейный концерт Иосифа Кобзона.
00.10 "Устрицы из Лозанны". Комедия. Россия, 1992 г.
02.40 "Дорожный патруль".
03.20 "Горячая десятка".
03.00 "Закон и порядок". Детективный сериал. США.
03.45 "Большая любовь". Мелодр.сериал.
04.35 Канал EuroNews на русском языке.

## БСТ

**7.00 "Салям".**
**9.00, 13.00 Новости (на башк. яз.).**
**9.20, 20.05 "Полезные новости".**
**9.30 "Профессия - врач". Др. фильм.**
**10.25, 13.50, 17.20 "Телемагазин".**
**10.35, 18.10 "Йома". Нравственные ценности ислама.**
**11.00, 15.00 Новости (на русск. яз.).**
**11.15 "Всадник на золотом коне". Сказка. СССР, 1980 г.**
**12.35 "Хазина".**
**13.15 "Теплый дом".**
**14.00 "Хорошее настроение".**
**15.15 "Возвращение Ходжи Насретдина". Комедия. СССР, 1989 г.**
**16.50 "Телекомпас".**
**17.30 "Тарзан". Молодежный сериал.**
**17.55 Мультфильм.**
**18.30 "Любимые мелодии".**
**19.00 Новости (на башк. яз.).**
**19.30 "С заботой о людях".**
**20.15 "Сэнгелдэк".**
**20.30 "На своей земле".**
**21.00 "Райхан". Программа на тат. яз.**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**22.50 "Криминальный спектр".**
**23.05 "Побег из Шоушенка". Драма.**
**По окончании: погода.**

## НТВ-4 (Орбита)

6.00 "Сегодня утром".
9.00 "Наше все!"
10.00, 13.00, 16.00 Сегодня.
10.20 "Лихие 90-е".
10.55 "Таксистка-2". 3-я и 4-я серии. Комедийный сериал.
13.25 "Бешеная". 8-я серия. Остросюжетный сериал.
14.30 "Эра Стрельца". 8-я серия. Детектив.
15.30 "Обзор. Спасатели".
16.30 "Возвращение Мухтара-2". "Квартира", "С днем рождения, дедушка!"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие".
19.00 Сегодня.
19.40 "Следствие вели..."
20.40 "Обзор. Чрезвычайное происшествие".
21.05 "Бумер". Криминальная драма. Россия, 2003 г.
23.20 "Идеальное убийство". Триллер. США, 1998 г.
01.25 "Семь". Триллер. США, 1995 г.
03.45 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал.
05.14 "Альф". Мультсериал.

## ТВ-Центр

6.00 "Настроение".
8.30 События.
8.50 "Петровка, 38".
9.05 "История государства Российского".
9.10 "Застава в горах". Художественный фильм.
11.10 "История государства Российского".
11.15 "Петровка, 38".
11.30 События.
11.45 Фильм. "Невестка".
13.30 "Дело было в Гавриловке". Телесериал.
14.30 События.
14.45 "Опасная зона".
15.15 "История государства Российского".
15.30 "А зори здесь тихие..." Телесериал.
16.30 Новое "Времечко".
17.30 События.
17.55 "Деловая Москва".
18.15 "Узелок на память".
18.20 "СтильНО!"
18.25 "Узелок на память".
18.30 "Уфимское время".
18.40 "Десятка лучших".
18.45 "Завтрак на завтра".
18.50 "Книжная лавка".
19.00 "Уфимское время". Итоги дня.
19.20 "СтильНО!"
19.25 "Музыка на канале".
19.35 "Завтрак на завтра".
19.40 "Испытано на себе".
19.50 "История государства Российского".
19.55 В центре внимания. "Дачники-нелегалы".
20.30 События.
20.55 Джеки Чан в боевике "Шанхайский полдень" (США).
22.55 "Момент истины".
23.50 События.
00.15 "Петровка, 38".
00.30 Шон Пенн, Бенисио Дель Торо, Наоми Уоттс в триллере "21 грамм".
02.55 "Янтарный замок". Мультфильм.
03.15 "Вступление". Художественный фильм.
04.45 "Ничего личного". Закон Божий или история религии?

# СУББОТА, 15 сентября

## Первый канал

6.00 Новости.
6.10 "Шутка за шуткой".
06.40 "Гость с Кубани". Комедия. СССР, 1955 г.
8.10 "Дисней-клуб". "Аладдин", "Микки Маус и его друзья".
9.00 "Слово пастыря".
9.10 "Здоровье".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.20 "Смак".
10.50 "Игорь Кириллов. Улыбку шире, ты в эфире!" Документальный фильм.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Жанна Д'Арк". Историческая драма. Франция, 1999 г.
15.10 "Звездная болезнь".
16.00 "Львиная доля". Приключения. Россия, 2001 г.
18.00 "Времена".
19.00 "Михаил Задорнов. "Записки усталого романтика".
21.00 "Время".
21.20 "Ледниковый период".
23.10 "Каратель". Приключения. США - Германия, 2004 г.
01.10 "Китайский синдром". Приключения. США, 1979 г.
03.50 "Жестокие игры-3". Триллер. США, 2004 г.

## БТВ - РТР

6.00 "Доброе утро, Россия!"
7.30 "Студия "Здоровье".
8.00 Вести.
8.10 "Вести-Башкортостан".
8.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
8.45"Утренняя почта".
9.20 "Субботник".
10.00 "Вокруг света".
11.00 Вести.
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Дела и люди".
11.50 "Национальные проекты: от мечты к реальности".
12.20 "Следствием установлено". Детектив. СССР, 1981 г.
14.00 Вести.
14.20 Вести - Башкортостан.
14.30 "Гарем".
Телеканал для детей и юношества "Бибигон"
15.30 "Скуби Ду". Семейная комедия. США - Австралия, 2002 г.
16.55 "Летучий корабль", "Приключения Запятой и Точки". Мультфильмы.
17.30 "Субботний вечер".
19.35 "Танцы на льду. Ваш выбор".
20.00 Вести.
20.15 "Ревизор".
20.45 "Ситуация 202. Страшная сила". Боевик. Россия, 2007 г.
22.55 "Служители закона". Боевик. США.
01.30 "Друзья жениха". Комедия. США.
03.30 "Счастливого пути!" Драма. Франция, 2003 г.
05.25 Канал EuroNews на русском языке.

## БСТ

**8.00 Новости (на русск. яз.).**
**8.05 "Доброе утро". Концерт.**
**8.50 Погода.**
**8.55 "Барби и волшебство Пегаса". Мультфильм.**
**10.20 "Телемагазин".**
**10.30 "Уральский самородок".**
**11.00 "Здорово".**
**11.20 "Ушло мое белое лето". Л.Станкова. Спектакль Салаватского государственного башкирского театра драмы.**
**13.20 "Млечный путь". Рафик Сальманов.**
**14.00 Новости (на башк. яз.).**
**14.20 "Сулпылар".**
**14.35 "Хи-Мен". Мультсериал.**
**15.00 "Дарю песню!"**
**16.20 "Музыкальные встречи с В.Муртазиным".**
**16.55 Чемпионат России по хоккею. Суперлига. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань).**
**19.15 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Дарю песню!"**
**20.30 "Сэнгелдэк".**
**20.45 "Родные напевы".**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Он, я и мои друзья". Комедия. США, 2006 г.**
**23.40 "Телемагазин".**
**По окончании: погода.**

## НТВ-4 (Орбита)

5.45 "Бумер". Криминальная драма. Россия, 2003 г.
7.30 "Сказки Баженова".
8.00 Сегодня.
8.15 "Золотой ключ". Телелотерея.
8.45 "Без рецепта".
9.20 "Смотр". Программа о Российской армии.
10.00 Сегодня.
10.20 "Главная дорога". Программа для автомобилистов.
10.55 "Кулинарный поединок". Певица Валерия против музыкального продюсера Иосифа Пригожина.
12.00 "Квартирный вопрос".
13.00 Сегодня
13.20 "Особо опасен!"
14.00, 04.20 "Хочу в тюрьму". Комедия. Россия, 1998 г.
16.00 Сегодня.
16.20 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной". "Ия Нинидзе. Рожденная летать..."
17.00 "Своя игра". Телеигра.
17.55 "Закон и порядок". "Клевета". 3-я серия. Россия, 2006 г.
19.00 Сегодня.
19.40 "Профессия - репортер".
20.05 "Программа максимум". Скандалы. Интриги. Расследования.
21.05 "Русские сенсации".
21.55 "Ты не поверишь!"
22.45 "Реальная политика" с Глебом Павловским.
23.25 "После заката". Детектив. 2004 г.
01.30 "Микс-файт М-1. Бои без правил".
02.20 "Убрать Картера". Детектив. 1971 г.

## ТВ-Центр

5.30 Дмитрий Брусникин, Александр Феклистов, Елена Майорова в фильме "Летное происшествие". 1-я и 2-я серии.
8.00 "АБВГДейка".
8.35 "Православная энциклопедия".
9.00 "Хитрый, как змея". Фильм из цикла "Живая природа".
9.45 "История государства Российского".
10.05 Фильм-сказка. "Огонь, вода и... медные трубы".
11.30 События.
11.50 "Репортер" с Михаилом Дегтярем.
12.05 "Сергей Герасимов. Осень патриарха". Документальный фильм.
12.50 "Линия защиты".
13.40 "Городское собрание".
14.30 События.
14.55 Маргарет Тэтчер в фильме Леонида Млечина "Железная леди. Усталость металла".
15.45 На экране - детектив. "Дело Һ 306".
17.30 События.
17.45 "Петровка, 38".
18.00 Горячие точки холодной войны. "На краю Украины". Фильм 1-й.
19.00 "Чисто английское убийство". Телесериал (Великобритания).
21.00 "Постскриптум" с Алексеем Пушковым.
22.10 "Народ хочет знать". Ток-шоу.
23.20 События.
23.40 Джессика Альба в фильме "Интимный словарь" (США).
01.50 Футбол. Первый дивизион. "Торпедо" (Москва) - "СКА" (Ростов-на-Дону).
02.55 "Шанхайский полдень". Художественный фильм (США).
04.50 Мультпарад. "Остров ошибок", "Зеркальце".

# ВОСКРЕСЕНЬЕ, 16 сентября

## Первый канал

6.00 Новости.
6.10 "Хищники". Детектив. СССР, 1991 г.
7.50 "Армейский магазин".
8.30 "Дисней-клуб". "Русалочка", "Черный плащ".
9.20 "Играй, гармонь любимая!"
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым.
10.30 "Пока все дома".
11.20 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Ползучая агрессия". Документальный фильм о насекомых-хищниках.
13.20 "Их разыскивает милиция".
13.50 "Два брата". Приключения. Франция - Великобритания, 2004 г.
15.40 "КВН". Премьер-лига.
17.20 "Ты всегда будешь со мной". Комедия. Россия - Украина, 2007 г.
19.10 "Минута славы". Развлекательное шоу.
21.00 "Воскресное "Время".
21.50 "Фабрика звезд".
23.20 "Самолет президента". Боевик. США, 1997 г.
01.40 "Коломбо нравится ночная жизнь". Детектив. США, 2004 г.
03.30 "Битва за Галактику". Фантастический сериал.
04.20 "Загадки памяти". Документальный фильм.

## БТВ - РТР

6.00 "Не ставьте лешему капканы..." Приключения, СССР, 1981 г.
7.30 "Сельский час".
8.00, 11.00 Вести.
8.10 "Вести-Башкортостан".
8.20 "Диалоги о животных".
8.55 "Вся Россия". "Лизхен и Ваниляйн".
9.05 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
10.05 "Сам себе режиссер".
11.10 "Вести - Башкортостан".
11.50 "Городок". Дайджест.
12.20 "Сто к одному".
13.15 "Парламентский час".
14.00 Вести.
14.20 "Вести - Башкортостан".
14.30 "Фитиль N 146".
15.20 "Вести. Дежурная часть".
15.50 "Честный детектив".
16.20 "Страсти-мордасти". Спектакль Евгения Петросяна и Елены Степаненко.
17.50 "Танцы на льду". Шоу-программа.
20.00 Вести.
21.00 "Специальный корреспондент".
21.25 "Большая любовь". Мелодрама. Россия, 2005 г.
23.30 "Матрица: перезагрузка". Фантастический боевик. США, 2003 г.
02.10 "В ожидании эха". Криминальная драма. США, 2000 г.
04.00 "Взгляды" Мистический сериал.

## БСТ

**8.00 Новости (на русск. яз.).**
**8.05 "Доброе утро!" Концерт.**
**8.55 Погода.**
**8.55 "Барби и дракон". Мультфильм.**
**10.20 Телемагазин.**
**10.30 "Бабушкин сундучок".**
**11.00 "Тэмле".**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Семэр".**
**12.00 "Байтус".**
**12.15 "Шуточный юбилей нешуточного артиста".**
**13.00 "Распахнись, душа!"**
**14.00 "Книжный дом".**
**14.20 "На стыке времен".**
**14.45 "Хи-Мен". Мультсериал.**
**15.15 "Салям". Воскресный выпуск.**
**16.00 "Хрустальный соловей-2007". Хит-парад.**
**17.00 "Волшебный курай".**
**17.30 "Дарю песню!"**
**19.05 "Майдан".**
**29.50 "Модный сезон".**
**20.15 "Дела и люди".**
**20.40 "Новое кино".**
**21.00 "Мегаполис".**
**21.30 "Ватан. События недели".**
**22.15 Погода.**
**22.20 "Любовь на острове". США.**
**23.45 "Телемагазин".**
**По окончании: погода.**

## НТВ-4 (Орбита)

6.00 "После заката". Детектив. США, 2004 г.
7.40 "Рикки-Тики-Тави". Мультфильм.
8.00 Сегодня.
8.15 "Русское лото". Телелотерея.
8.40 "Дикий мир" с Тимофеем Баженовым. "Дикари".
9.05 "Счастливый рейс" с Николаем Фоменко.
10.00, 13.00 Сегодня.
10.20 "Едим дома".
10.55 "Их нравы".
11.30 "Авиаторы".
12.05 Top gear.
12.40 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю".
13.25 "Лихие 90-е".
14.00 "Из жизни начальника уголовного розыска". Криминальная драма. СССР, 1983 г.
16.00 Сегодня.
16.20 "Один день. Новая версия".
17.00 "Своя игра". Телеигра.
17.55 "Закон и порядок". "Под прикрытием". 4-я серия.
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым.
19.50 "Чистосердечное признание".
20.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю".
20.55 "Главный герой" с Антоном Хрековым.
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым.
23.10 "Игра Рипли". Детектив. США.
01.20 "Новичок". Боевик. США, 1990 г.
03.50 "Криминальная Россия".
04.15 "Семейство Блюз под прикрытием". Комедийный боевик. США, 1993 г.
05.35 "Профессия - репортер".

## ТВ-Центр

5.30 "Застава в горах". Художественный фильм.
7.30 "Право на надежду".
7.55 "Дневник путешественника".
8.25 "Крестьянская застава".
9.00 "Миссисипский аллигатор". Фильм из цикла "Живая природа".
9.45 "21 кабинет".
10.20 "Наши любимые животные".
10.55 "Реальные истории". Победившие плоть.
11.30 События.
11.40 Фильм. "Штрафной удар".
13.25 Михаил Жигалов в программе "Приглашает Борис Ноткин".
13.55 Детективные истории. "Цена за жизнь 500000$".
14.30 События.
14.50 "Замок лгунов". Мультфильм.
15.05 "История государства Российского".
15.20 "Скандальная жизнь" с Ольгой Б. В бегах от алиментов.
16.10 Премьера документального фильма. "Тайная миссия Сергея Вронского".
17.05 Музыкальное шоу "Анита".
18.30 Ольга Погодина в фильме "Женская интуиция" (Россия). 1-я и 2-я серии.
21.00 "В центре событий" с Анной Прохоровой.
22.05 Вечер с детективом. "Пуаро Агаты Кристи" (Великобритания).
00.10 События.
00.30 Дензел Вашингтон в триллере "Падший" (США).
02.50 "Адский небоскреб". Художественный фильм (Франция).
04.20 "Дело N 306". Художественный фильм.
05.40 "Куда летишь, Витар?" Мультфильм.



ИҒТИБАР! ИҒТИБАР!

Хөрмәтле уҡыусыбыҙ, "Киске Өфө" гәзите биттәрендә иғландар, ҡотлауҙар баҫтыра алаһығыҙ. Беҙҙә иң арзан хаҡтар: иғландар - 50 һум, ҡотлауҙар, ҡайғы уртаҡлашыуҙар - 200 һум.

✓ *Кешене бер карауҙан һынап булмай. Уның дәрәжәһенең етдилеккә төрөнгән булыуы, етешһеҙлектәре ике йөҙлөлөк битлеге аҫтында булыуы бик ихтимал.*

*(Ж. Лабрюйер).*



*ХАТТ КИ...*

# Быуаттарға тиңдәш Туғажмандай,

## Оҙон ғүмерле бул, ҡурайым

**"Киске Өфө" гәзите битенән "Мәҙәни аралашыу" тигән мәҡәлә уҡыным. Эйе, ниндәй генә һөнәр булмаһын, ул Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешегә бирелгән һәләт бит. Кемде теләйһең шуны рәссам, йә ҡурайсы, йәки артист итеп булмай. Ул һәләттән тора. Ҡурайҙы ла төрлөсә уйнайҙар, берәүҙәр бик һуҙып, икенселәр һыҙғыртып, ҡыҫҡа итеп уйнай. Бергә йыйылып, бер-береңде тыңлап, башҡорт йырҙарын дөрөҫ юлға һалып уйнау өсөн ҡурайсыларҙың аралашыуы бик мөһим. Ә бит беҙҙең боронғо ҡурайсыларыбыҙ күкрәккә һалып, һәр кем үҙенә хас ҡурай моңо менән уйнар ине. Әммә хәҙерге ваҡытта был алым менән уйнаусы ҡурайсылар бик һирәк.**



Мин бала саҡта ауылыбыҙҙа Сабирйән олатай мәжлестәрҙә һалмаҡ ҡына итеп башҡорт көйҙәрен ҡурайҙа уйнай торғайны. Тыңлап ултырыусыларҙың ҡайһы берҙәренең күҙ йәштәре күренер ине. Шул саҡта мин, нишләп быны өсөн иларға инде, тип аптырай инем. Күрәһең, ҡурайҙың кешене тетрәндерер моңо булып, шул моңдо аңлағандар илап тыңлағандыр. Үҙем ҡурайсы булмаһам да, ҡурайға ғашиҡ кешемен, ҡурай моңон ишетһәм, теге олатайҙар һымаҡ, минең дә күҙ йәштәрем тәгәрәп китә. Афарин, башҡортомдоң тарихи ҡоралы үҫә, ҡурайымдың таҡыялары ил, донъя буйлап тағы ла киңерәк ҡолас йәйә.

Һеҙгә билдәле булыуынса, мин Баймаҡтағы ҡурай һәйкәленең авторымын. Уны ҡуйғанға ла 15 йыллап ваҡыт үтте. Әммә мин бер ваҡытта ла ҡурайсылар менән осрашҡаным юҡ. Нисә тапҡыр бәйгеләр үткәрҙеләр, ҡурайсылар съезы ла булды, ә мин өйҙә ултырам. "Бына ошо олатай ҡурай һәйкәленең авторы", тип таныштырыусылар юҡсы... Ҡурайға арнап, бер шиғыр ҙа яҙғайным, шуны тәҡдим итмәксе булдым әле.

### Һәйкәл-ҡурай

Ғата ағай ҡурай-һәйкәл булып
Туғажманға ҡайтты мәңгегә.
Ул ҡурайға яңы юлдар асты
Ғүмер һурып алып йәненән.

Йәйәүле лә Мәхмүт тарихындай
Һәйкәл-ҡурай булһын үлемһеҙ.
Туғажманға ҡуйылған да һәйкәл-
Ҡурайымды данлау билгеһе.

Ҡурай моңо йәйге йәйғор кеүек
Йәм өҫтәһен, әйҙә, тормошҡа.
Йәйғор сафлығылай моңо менән
Дәрт өҫтәһен беҙҙең булмышҡа.

Туғажманда үҫеп сыҡты ла ул
Һәйкәл булып ҡалды ҡурайым,
Быуаттарға тиңдәш Туғажмандай
Оҙон ғүмер уға юрайым!

**Миҙхәт БАЙРАМҒОЛОВ.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ЯНДАУЫС, ШОРОМ-БОРОМ...

## тәкә, абышҡа, ҡатын...

**Әсәйем, өләсәйем урынбаҫар, ярҙамсы тигәнде «яндауыс» тип әйтә ине. Яндауыс – түрә, хужа янында йөрөүсе кеше, тигән мәғәнәне аңлаталыр инде. Ялҡау, ғаиләһен ҡарамаған ирҙе Бөрйән яғында «абышҡа» тиҙәр. Бәлки был «бушҡа йәшәүсе» тигәндән алынғандыр.**

Мин оҙаҡ йылдар һүҙ жанры артисы булып эшләйем. Шуға күрә һәр төбәктең әсәйҙәре лөғәтенә ҡараған һүҙҙәрҙе күп беләм һәм, урынына ҡарап, ул һүҙҙәрҙе үҙ сығышымда ҡулланырға тырышам. Силәбе өл-кәһе башҡорттары беҙ быяла тип аңлаған әйберҙе «шешә», шешәне «быяла» ти икән. Ошо һүҙ менән бәйле булған ҡыҙыҡлы бер хәлде лә һөйләнеләр.

Беҙҙең яҡтың бер егете Силәбе һылыуына өйләнгән. Кейәү кәләшенең тыуған яғына ҡунаҡҡа барған. Ҡәйнәһе мунса яҡҡан. Йыуынған саҡта кейәү мунсаның бер тәҙрәһе булмауын күреп ҡалған һәм, һуңынан, сәй эсеп ултырғанда, ҡәйнәһенә:

-Ҡәйнәм, быяла булһа, мунсағыҙға тәҙ-рә ҡуйып бирер инем, - тигән булып, эшлекле ҡиәфәттә һүҙ ҡатҡан.

Ҡәйнә быны үҙен-сә аңлап, өҫтәлгә бер ярты сығарып ҡуйған. Ярай, эскәндәр быны. Икенсе көндө кейәүге тағы ла быяла һораған. Тағы ла бер ярты эскәндәр. Өсөнсө көндө кейәү булған кеше тағы ла быяла һорағанда, ҡәйнәһе:

-Кейәү, мин һине яҡшы кеше икәнһеңдер, тип уйлағайным, алкаш икәнһең,- тигән...

Һанға һуғылмаған хәл-әхүәлгә, мәғәнәгә «арлы-бирле», «әпән-төпән», «шором-бором» тиҙәр. Әбйәлил районының Һәйетҡол тигән ауылында концерт ҡуйырға иғлан элергә килдек. Магазин ишегенә афиша элергә торғанда янныбыҙға 4-5 ҡатын йыйылып китте. Афишаны уҡынылар. Шунда берәүһе:

-Беҙҙең ауылға бер ҡасан да ошоноң кеүек шором-боромдар килгәне юҡ ине. Концертығыҙға ҡыуанып килербеҙ, - тип, ул беҙҙе «шором-бором» һүҙе менән ҙурлап ҡуйҙы. Уларҙың ауылында артист тигән һүҙ «шором-бором» булып йөрөймө икән?

Һүҙ донъяһы бик бай ул. Беҙ кәләште, бисәне рәсми рәүештә «ҡатын» тибеҙ. Ә бына Мордовияла йәшәгән мишәрҙәр «өйләнденңме әле?» тигән һорау урынына «Аҫҡы ҡатың бармы?» тип әйтәләр. Беҙҙеңсә, былай әйтеү көлкө булып аңлашыла. Әммә «Аҫҡы ҡатың бармы?» тигән һүҙ тәрән мәғәнәгә эйә икән. Нигеҙ нисек булһа, йорт та шулай була. Нигеҙ - йорттоң аҫҡы өлөшөндә. Шуға ла уларҙа ҡатын кешене йорттоң нигеҙе тип аңлайҙар. Шуға күрә лә ҡатынды ололап-ҙурлап «аҫҡы ҡат» тип әйтәләр икән. Ҡатын һүҙенең «ҡат» тигән тамыры ла ошо мәғәнәнән алынманымы икән?

Татарстандың Әгәрже районында бә-леште (пирожки) «тәкә» тиҙәр. Унда гастролдә булғанда йортона төшкән хужабикә: «Хәҙер мин һеҙгә тәкә бешерәм»,- тине. Хужабикә табаҡ тултырып өҫтәлгә тәкә ите алып килеп ултыртыр, тип көтһәм, хужабикә өҫтәлгә пирожкиҙар килтереп ҡуйҙы ла: «Рәхим итегеҙ, йылы сағында...», - тине.

**Әйткәндәй...**

**Әсәйҙәребеҙҙең, өләсәйҙәребеҙҙең әйткән ошондай һүҙҙәре хәтер төпкөлөбөҙҙә ята. Уларҙы беҙгә яҙып ебәрергә ашығығыҙ. Иң күп һәм бай йөкмәткеле һүҙҙәр ебәргән авторҙы алдағы ярты йылға гәзиткә яҙҙырып бүләкләйәсәкбеҙ.**

**Юнир САЛАУАТОВ.**

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Шатлыҡ көтөү...

## үҙе шатлыҡ

Яуызлыҡ һәр саҡ эргәлә йөрөй, изгелекте генә табыу ҡыйын.

**(Илья Шевелев).**

Кешене бер ҡарауҙан һынап булмай. Уның дәрәжәһенең етдилеккә төрөнгән булыуы, етешһеҙлектәре ике йөҙлөлөк битлеге аҫтында булыуы бик ихтимал.

**(Ж. Лабрюйер).**

Кешенең ниндәйҙер сифатына баһа биреү өсөн... үҙең дә тейешле сифаттарға эйә булыу кәрәк.

**(В. Шекспир).**

Ҡатын-ҡыҙҙың матур булыу өсөн - бары бер генә, ә һөйкөмлө булыу өсөн мең төрлө мөмкинлеге бар.

**(Ш. Монтескье).**

Бары тик матур булыу менән генә сикләнгән ҡатын-ҡыҙҙың тормошо... заяға үткән.

**(Б. Фонтенель).**

Үҙ ихтыярыңдан тыш риза булыуға ҡарағанда, үтенесте әҙәпле генә кире ҡағыу яҡшыраҡ.

**(Тәлғәт Абдрахманов).**

Бер кеше лә үҙен бәхетле тип һанамай тороп, бәхетле була алмай.

**( Марк Аврелий).**

Шатлана һәм өмөтләнә белеү - бәхет, шикләнеп һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп йәшәү - бәхетһеҙлек.

**(Д. Юм).**

Шатлыҡ көтөп йәшәү үҙе шатлыҡ.

**(Г. Лессинг).**

Бер генә ҡайғы ла ҡайғы көтөп ҡурҡып йәшәүҙән ҙурыраҡ түгел.

**(И. Цшокке).**

Үҙ-үҙеңдән: "Эш менән шөғөлләнәмме мин, әллә юҡ-бар менәнме?" тип һорау бер ваҡытта ла һуң түгел.

**(А. Чехов).**

Әгәр ҙә һин теләгәнеңдең барыһын да эшләй алмайһың икән, эшләй алған кәҙәреһен генә телә.

**(Теренций).**

Аҡыллы кеше ҡайһы саҡта ашыға ул, әммә бер нимәне лә ашығып эшләмәй..

**(Ф. Честерфильд).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ир менән ҡатын 30 йыл бергә йәшәгән. Ошо юбилейҙы билдәләргә булғандар былар һәм ҡатын, ғәҙәттәгесә, аҡ күмәс бешергән. Күмәсте мейестән алғас, уны, ғәҙәттәгесә, арҡырыға урталай бүлгән, ике өлөшөнә лә май яҡҡан. Ғәҙәттәгесә, күмәстең аҫҡы өлөшөн үҙенә ҡалдырып, өҫкө яғын иренә һонған да... ҡулын тиҙерәк кире тартып алған: "30 йыл буйына һәр иртә күмәс бешерәм, уның өҫкө яғын бер генә тапҡыр булһа ла үҙем ашап ҡарау тураһында 30 йыл хыялландым. Ошо йылдар буйына иремә өлгөлө ҡатын булдым, бынамын тигән балалар үҫтерҙем, ғаиләмде аяҡҡа баҫтырыу өсөн күпме көс һәм энергиямды һалдым..." - тип уйлаған ул. Һәм бер ҡарарға килеп, 30 йыл буйы килгән ғаилә традицияһын боҙған: ҡулдары ҡалтырай-ҡалтырай, иренә аҡ күмәстең аҫҡы өлөшөн биргән, үҙенә өҫкөһөн ҡалдырған. Ә ире күмәсте алған да, йөҙө яҡтырып, былай тигән: "Һин, һөйөклөм, беҙҙең юбилей көнөндә шундай ҡиммәтле бүләк эшләнең миңә. Мин 30 йыл буйы күмәстең үҙем яратҡан аҫҡы өлөшөн ашауҙан мәхрүм булып йәшәнем, уға бары тик һин генә хоҡуҡлы тип иҫәпләнем..."**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән МАРАҠАНОВА, Миләүшә БҮЛӘКОВА.

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 5220
Заказ 4357